*"Матур китаптар - ғәжәйеп нәмәләр күренәсәк көҙгө, аулаҡтағы серҙәш, яңғыҙлыкта иптәш, көсһеҙлектә ярҙамсы, хәсрәттәрҙә шатлыҡ килтереүсе, фекерҙәрҙе нурландырыусы, үткән замандарҙың хәлдәрен һөйләп тороусы, тарихты хикәйәт итеүсе, аҡыллы кешеләрҙең аҡылдарын күҙгә күрһәтеүсе, хаҡы арзан, файҙаһы күп нәмә... Китаптарҙан айырылмағыҙ".*

**Ризаитдин ФӘХРЕТДИН.**

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

26 НОЯБРЬ - 2 ДЕКАБРЬ (ҠЫРПАҒАЙ - АҠЪЮЛАЙ) 2011 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы иректе

№48 (466)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Тыуымаған балаларыбыҙ өсөн...**

иրҙәрме, ҡыҙҙарыбыҙмы ғәйепле?



3

**Зирәктәрҙе осратығыҙ,**



улар китапханаларҙа

6

**Юлбашсылар дәүләт өсөн генә түгел,**



8-9 халыҡ өсөн дә кәрәк

**Беҙ - еңеүселәр тоҡомо,**

балаларыбыҙҙы ла еңелмәскә өйрәтәйек



11

14 ТВ-программа


МӨХӘРРИР ҺҮҘЕ

# АСЫЛЫҢ ТАЛАБЫ ШУЛ:

## туған телдә гәзит уҡы!

**Мөхтәрәм уҡыусыбыҙ! Һине лә, баҫмабыҙҙы ла, ошо баҫманы ижад итеүселәрҙе лә һынау мәле. Гәзитебеҙҙе уҡыусы милләттәш туған телдәге баҫманы ниндәй дәрәжәлә һанлай һәм баһалай? Уның үҙ милләтенә, туған теленә ҡарата аң, рух, ихтирамы ниндәй кимәлдә? Баҫмабыҙҙағы һүҙ ҡеүәһе, фекер үткерлеге уның күңелен арбай, сәмен һәм ғәмен уята алырлыҡмы? Бына шулай, 2012 йылдың беренсе яртыһына гәзитебеҙгә яҙылыу барған үтә яуаплы осорҙа уҡыусыбыҙ һәм үҙебеҙ алдына тағы ла ошо һорауҙарҙы ҡуйыбыҙ һәм... Әйҙәгеҙ, тағы ла бер тапҡыр бурыс хаҡында һөйләшеп алайыҡ әле, тип тәҡдим итәбеҙ.**

...Хоҙай һәр кемде донъяға үҙ өлөшө менән ярата. Һәр кемгә камил һын, рухи бөтөнлөк, талант, ижад ҡомары, бәхетле тормош, ризыҡ тәғәйенләй. Шулай уҡ кешенең мотлаҡ бер милләт вәкиле итеп яратылыуы ла - уның өлөшө һәм был өлөшкә туған тел, туған моң кеүек иң ҡиммәтле хазина яҙыла. Һин үҙ өлөшөңә яҙғандарҙың һәр берәһе менән файҙаланып, уларҙы камиллаштырып йәшә, шулар ярҙамында йәшәүгә көс, рух ал, тиган бурыс йөкмәтә Хоҙай кешегә. Әммә беҙ уларҙың барыһынан да файҙаланабыҙмы һуң? Эйе, беҙ үҙебеҙгә тәғәйенләнгән ризыҡты ейәбеҙ, шул уҡ ашҡаҙан, ҡорһаҡ кимәлендәге башҡа ихтыяждарыбыҙҙы ла ҡандырабыҙ. Ә бына рухи танһыҡты ҡандырыуға килгәндә...

Һүҙемде бер миҫалға туҡтап дауам итәйем. Беҙ был шәхестең ижади уңыштары тураһында гәзитебеҙ биттәрендә яҙғылап торабыҙ. Тегеләй йәки был һорау буйынса фекерҙәре лә әленән-әле урын ала баҫмабыҙ биттәрендә. Шуға ла уны үҙебеҙҙең әүҙем уҡыусыбыҙ икән тип уйлай инем дә, яңылышҡанмын булып сыҡты. Бер осрағанында: "Гәзиткә яҙылдыңмы?" - тип һорайым бынан. "Юҡ", - ти ул. "Бәй, беҙ һинә һәр саҡ мәғлүмәти ярҙам күрһәтәбеҙ. Ярҙам ике яҡлы булырға тейеш тә тәһә!" - тип аптырау белдерәм. "Ниндәй ярҙам кәрәк һуң?"- ти был. "Гәзиткә яҙылыуың ғына кәрәк", - тим. "Гәзит уҡырға ваҡытым юҡ бит минең",- тигән яуап ишетәм. Артабан һүҙҙе дауам итерлек түҙемлегем етмәгәс, ҡырҡа боролоп китеп барам. Ул да өндәшмәй генә ары атлай. Күңел әрнеүем, уйҙарым тағы ошо танышыма ялғана. "Ваҡытым юҡ гәзит уҡырға", тине, ә нимә менән үткәрә икән һуң ул ваҡытын? Талантлы кеше, әммә Хоҙай биргән талантын балҡытып ебәрерлек әллә ни эш ҡыйратҡаны ла юҡ бит әле. Быға ана шул битарафлығы ла сәбәпсе, моғайын. Бәлки, туған телдәге гәзитте уҡымауы, ғөмүмән, туған телде һанламауы ла сәбәпселер әле. Моғайын, шулайҙыр...

Минең был һығымтама кемдер көлөп тә ҡуйғандыр. Гәзиткә яҙылмау менән был талантлы кешенең тормошта үҙ урынын таба алмауында ниндәй уртаҡлыҡ бар, тигән һорау ялтлап киткәндәр башында. Уртаҡлыҡ бар! Был кеше лә, тимәк, Хоҙайҙың тап уға ғына тәғәйенләгән өлөшө барлығын уйламай һәм файҙаланмай. Уңышһыҙлыҡ та, битарафлыҡ та, бөтән төңөлөүҙәр ҙә шунан - Хоҙай яҙған асылында булмауҙан...

Үҙ асылын, тигәндән. Хоҙай беҙгә туған тел биргән , әммә беҙ икенсе милләт телен үҙләштереүҙе өҫтөнөрәк күрәбеҙ. Әйткәндәй, яурындарыбыҙ башында ултырған ике фәрештә бары тик туған телендә өндәшеүендә генә аңлай, туған телендә әйткән теләктәрендә генә Хоҙай Тәғәләгә еткерә, имеш. Ә беҙ "Йә, Аллам..." тип түгел, "О, Господи..." тип мөрәжәғәт итәбеҙ Уға. Шунан теләктәребеҙҙең Уға барып етмәүенә аптырайбыҙ. Был фекерләү дөрөҫлөккә тап киләме, юкмы, белмәйем, әммә минең быға бик тә ышанғым килә...

(Дауамы 2-се биттә).



ИШАРА

# ВӘҒӘҘӘЛӘР БУШ БУЛҺА ЛА...

## һайлауҙарға барыу фарыз

**Урамда күршеләр, таныштар үҙ-ара гәпләшкәндә сәйәсәт темаһына ҡағылмай ҡалмайҙар. Хатта әбей-бабайҙар телендә лә шул һайлауҙар бөгөн.**

Мәҫәлән, фекерен һәр саҡ шиғыр юлдары йә таҡмаҡҡа һалып һөйләргә әүәҫ 80 йәшлек Тәнзилә апай бер көндә: "Һаҙый Таҡташ яҙғанынса, "Донъя матур, тиҙҙән ҡыш килә, тип, ямап ҡуйҙым йыртыҡ бүрегемде..." - тип, һүҙ башланы ла шулай тип дауам итте: "Мин дә, ҡыш етә, тип, итегемдең үксәһен яматырға итексегә йүнәлдем. "Әбей, был итегеңде сығарып ҡына ташла ла ҡуй!" - тиер инде тип, унайһыҙланам үҙем. Шуға: "Унынсы йыл кейәм инде", - тигән булдым итегемде тапшырғанда. Итексе: "Апай, халыҡ миңә ниндәй таушалған аяҡ кейемдәре алып килеүен күрһәң ине. Бисмилла, тип, тағы бер-нисә йыл кейерлек әле һеҙҙең итек", - тип, мине йыуатты. Үәт, донъя... Ябай халыҡ яфа сигеп йәшәй, ә түрә-ғаралар аҡсаһын ҡайҙа ҡуйырға белмәй, тиҙәр..." - тип, һүҙен сәйәсәткә бора биребераҡ тамамлап ҡуйҙы.

Эйе, был теманы урап үтеп булмай шул бөгөн. Бар ерҙә Дәүләт Думаһына һайлауҙар тураһында һөйләйҙәр, баштар буталып бөттө инде. Урамда танышым Рәйләнә осраҡҡас: "Ниндәй фирҡә өсөн тауыш бирергә йыйынаһың?" - тип һорағайным, ул: "Белмәйем, пенсионерҙарҙың ташламаларын яңынан ҡайтарырға вәғәҙә биргән берәй фирҡә юҡмы икән? Льготалар булһа, фатирға хаҡтың күпмегә күтәрелеүенә ҡарамай, яртыһын ғына түләр инек, исмаһам", - тип уфтанды.

Һайлауҙар етә башлаһа, йәш саҡта үҙәк баҫмаларҙың береһендә уҡыған мәҡәлә иҫкә төшә гел. Ҡыҫҡаса йөкмәткеһен һөйләп үтәйем. 1941 йылдың матур бер йәйендә кинәт Бөйөк Ватан һуғышы башланып китә. Патриотик рухта тәрбиәләнгән ирҙәр үҙ теләге менән ил һаҡларға ташлана. Дошманды тиҙ арала енеп ҡайтырбыҙ, тип ышана улар. Бер йәш ҡатын: "Ҡәҙерлем, яуға китмә, бүтәндәр һуғышһын", - тип инәлеп, ирен баҡсалағы баҙына йәшерә. Һуғыш дүрт йылға һуҙылып китә һәм, ниһәйәт, еңеү яулана. Еңеүселәр байрам итә. Тик фашистарҙан, үлемдән ҡурҡып баҙҙа ултырып ҡалған дезертир ир генә был оло байрамға ҡушыла алмай. Баҙҙа ултырыуын дауам итә. Ике улы шулай аталарын күрмәй үҫеп етә. Улдарының туйҙарын да атай кеше баҙ эсендә генә тыңлап ултыра. Ологая, ауырыуҙар йонсота башлай. Берҙәнбер көндө властар ҡулына бирелергә ҡарар итә был. Баҙҙан сыға, тик былай ҙа 25 йыл ғүмерен төрмә һымаҡ уҡ баҙҙа үткәргән бит, тип, уға яза бирмәйҙәр...

Был аянысты ваҡиғаны ни өсөн иҫләнем, тиһегеҙме? Илдең ҡайғыһына ла, шатлығына ла төкөрөп йәшәп ятҡан битараф кешеләр ишәйҙе бит. Күптәр һайлауҙарға ла йөрөмәй хәҙер. Әлбиттә, һайлауҙар алдынан вәғәҙә ителгән "алтын тауҙар", һайлауҙар үткәс, боҙ тауҙары кеүек, ирелп юҡҡа сыға ла ҡуя инде ул. Ә шулай ҙа битараф булмаҫҡа, "баҙға йәшеренмәҫкә", үҙ тауышыңды ишеттереп, граждандыҡ бурысыңды үтәргә кәрәк, тимәксемен...

**Фәүзиә ЯХИНА.**

МӨХӘРРИР ҺҮҘЕ

# АСЫЛЫҢ ТАЛАБЫ ШУЛ:

## туған телдә гәзит уҡы!

**(Башы 1-се биттә).**

Туған моң биргән Хоҙай беҙгә. Ҡурай тигән илаһи моң сығанағын да беҙгә тәғәйенләгән. "Тәбиғәттең үҙенең тауышы бит был, ул кешене дауалай..." тип һоҡланған япондар Роберт Юлдашевтың ҡурайҙа уйнауын күҙҙәрен йомоп ултырып тыңлағандан һуң. Ә беҙ ҡурайҙы япондар ише тыңлай ҙа белмәйбеҙ хатта. Ҡурай моңоноң илаһи көсөн, һауыҡтырғыс тәьҫирен тойоу һәләтлегебеҙ күптән юҡҡа сыҡҡан, күрәһең...

Һәр береһе тәбиғәт ҡанундарына нигеҙләнгән, быуаттар буйы һыналған, беҙҙе милләт итеп йәшәткән әллә күпмә йолаларыбыҙ бар. Уларҙы иҫкелек ҡалдығы тип күптән артҡа ташлап бөттөк тә, икенсе милләттең ҡолаҡ тондорғос, юлдан яҙҙырғыс ғәҙәттәренә күсеп бөттөк. Ул ғәҙәттәргә эйәреп ямандары ла килде һәм милләтте "йәшел йылан" ҡоллоғона ла, рухи ҡоллоҡҡа ла төшөрҙө, упҡындың ситенә үк килтереп терәне...

Ошонан тағы бер хәҡиҡәт: ситтәр һине барыбер үҙенеке итеп ҡабул итмәй, сит мәҙәниәт, сит тел һине барыбер тиң итеп күтәрмәй, баһаламай. Шунан йөрөйһөң инде ғүмер һуҡмағында ары һуғылып, бире һуғылып, үҙ-үҙеңде таба алмайынса, булған талантыңды ла тулыһынса тормошҡа ашыра алмайынса. Бәлки, ғүмер ахырында киләләр ул бөтөн уңышһыҙлыҡтарының сәбәбен аңлау һәм "Их, ниңә мин үҙ асылымда йәшәмәнем, ниңә үҙ милләтемә хеҙмәт итмәнем, милләтемә балалар үстермәнем?" тигән үкенес...

...Әлеге милләттәш менән осрашып, бер телдә һөйләшеп тә, берберебеҙҙе аңламай күңел төнөлөүе бына шундай уйҙарға килтерҙе. Эс бошмаҫ та ине, ундай милләттәштәр берәү генә түгел шул. Ошондай Хоҙай тәғәйенләгән өлөшөнән файҙаланмаған, үҙ асылына битараф булған, туған телдә гәзит уҡымаған, туған тел яңғыраған тамашаларға йөрөмәгән милләттәштәр бигерәк тә ҡалаларҙа күп. Беләм, ауылдарҙа йәшәгәндәрҙең ысынлап та гәзиткә яҙылырға мөмкинлеге самалы. Ләкин уларҙың да күбеһе гәзит-журналдарға яҙылыу сараһын таба, һөтөн-ҡатығын һатып булһа ла. Милли матбуғат баҫмалары башлыса улар иҫәбенә тарала, аҡсаһыҙҙар һәм битараф булмағандар иҫәбенә. Ә бит ҡалала йәшәүсе милләттәштәр барыбер ҙә аҡсаһыҙлыҡтан интекмәй, улар эшләп йөрөй, эш хаҡы ала. Әммә... Асылың талабы - туған телдә гәзит уҡыу ҙа ул, тигәнде тағы бер тапҡыр иҫтәренә төшөрөп ҡуйыйыҡ әле уларҙың.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**2012 йылдың тәүге яртыһына гәзиткә яҙылыу кампанияһы тамамланып килә. Һуңлап ҡалмағыҙ. Был хаҡта күрше-күләндәрегеҙгә, таныштарығыҙға ла еткерегеҙ.**

Һәр ваҡыттағыса, уҡыусыны ылыҡтырыр вәғәҙәләребеҙ етерлек.

**Берҙән**, күп һорауҙарығыҙға яуап бирер, ниндәйҙер ауырлыҡтарға юлыҡҡанда уларҙы еңер сара, борсолоуҙар мәлендә - йән тыныслығы, күңел төшөнкөлөгө булғанда - рухландырыр, сәмләндерер һүҙ әйтер матур йөкмәткеле баҫма аласаҡһығыҙ ҡулдарығыҙға.

**Бынан тыш**, әлбиттә, оптимистар өсөн бүләктәр ҙә булмай ҡалмаясаҡ. Оптимистар өсөн, тибеҙ, сөнки гәзитебеҙгә яҙылыу тураһындағы квитанцияларҙың "Мин барыбер бүләкһеҙ ҡалмайым!" тигән кешеләрҙән генә килеүен яҡшы беләбеҙ. "Киске Өфө"нө уҡыусыларҙың барыһының да оптимист булыуын теләйбеҙ, уларҙың ошондай сифаттарын үятыуҙы маҡсат итеп ҡуйбыҙ. **Ә ноябрь айында гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргән 30 кешегә 2012 йыл өсөн "Дини календарь" ебәрәбеҙ.**

Әйткәндәй, кемде бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә тыуған көндәрен хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы тыуған көнө менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.

**"Киске Өфө" - бүләгем" акцияһы ла дауам итә.** Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, атай-әсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ.

**Шулай итеп, гәзитебеҙҙең индексы - 50665, ярты йылға яҙылыу хаҡы - 348 һум 24 тин.**

Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**.
Беҙҙең электрон почта: **info@kiskeufa.ru**.
Беҙҙең блог: **blog. kiskeufa.ru**.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ

# ТОРМОШ ДӘРЕСЛЕГЕ

"Киске Өфө" гәзите башҡа баҫмаларҙан нимәһе менән айырыла? Тәү сиратта, ҡыйыу һәм рухлы булыуы менән. Бөгөн тап ошондай баҫмалар етешмәй ҙә инде беҙгә.

Гәзитте ҡулға алғас та, иң тәүҙә "Әйт, тиһәгеҙ..." рубрикаһын уҡып сығам. Сөнки унда бөгөнгө көн ҡаҙағына һуҡҡан һорау ҡуйыла һәм ул һорауға төрлө кешеләрҙең ҡарашы, яуабы, фекере белдерелә. Кемдер был проблемаларҙың сәбәбен аңлата, хатта сиселешен күрһәтеп бирә.

"Милли идеяға торош" рубрикаһы иһә тотошлайы менән халҡыбыҙ рухын, быуаттар буйы тупланған аҡылының асылын, менталитетын асып һала. Яратҡан баҫмабыҙҙа әҙәп-әхлаҡ, йәшәйеш ҡағиҙәләренә ҡағылышлы бай һәм урынлы әйтелгән фекерҙәр бихисап. Шуның менән ул бынамын тигән тормош дәреслегенә әүерелә лә инде.

Гөмүмән, "Киске Өфө"беҙҙә күтәрелгән һәр мәсьәлә аҡыллы һәм оригиналь фекер, фәлсәфәүи эҙләнеүҙәр аша еткерелә уҡыусыға. Милли асылыбыҙға ҡайтарыуға, күҙҙәребеҙҙе асырға тырышҡан баҫмабыҙҙың бөгөнгө көн өсөн дә, киләсәгебеҙ өсөн дә әһәмиәте бик ҙур.

**Данил ӘБДЕЛГӘЗИН,**
**Сибай ҡалаһының "Атайсал" гәзите хәбәрсеһе.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Ауыл хеҙмәтсәндәренең һөнәри байрамына арналған тантаналы йыйылышта Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов ауыл хужалығы эштәренең йомғаҡтары хаҡында һөйләне. Ул республикабыҙҙың күп күрһәткестәр буйынса илдә беренсе булыуын һыҙыҡ өҫтөнә алды. Башҡортостан һөт, бал, ҡымыҙ етештереү, ат, эре мал иҫәбе буйынса алдынғылыҡты бирмәй. Башҡортостанда етештерелгән продукцияның сифаты юғары булыу сәбәпле, республика шәкәре һәм оно, ярмалары һәм көнбағыш майы ысын мәғәнәһендә брендтарға әүерелде, тип билдәләне республика башлығы.

✓Башҡортостан игенселәре быйыл 3,2 миллион тонна ашлыҡ, 1,4 миллион тонна шәкәр сөгөлдөрө, 260 мең тоннанан артыҡ көнбағыш йыйып алды. Стәрлетамаҡ, Саҡмағош, Ауырғазы, Илеш, Мәләүез, Дәүләкән, Дүртөйлө районДарының ауыл хужалығы предприятиелары ауыл хужалығы продукцияһы етештереүҙә юғары күрһәткестәргә өлгәште.

✓Башҡортостан Президенты республиканың агросәнәғәт комплексының иң яҡшы вәкилдәренә наградалар тапшырҙы. Халыҡтар дуҫлығы орденын Башҡортостан башлығы ҡулынан алты ауыл хужалығы предприятиеһы етәксеһе алды. Башҡортостан Президентының рәхмәт һүҙҙәренә һәм наградаларға йәмғеһе 50 агросәнәғәт комплексы хеҙмәтсәне лайыҡ булды.

✓Өфөлә иң яҡшы уҡытыусылар ассоциацияһы булдырылясаҡ. Унда ҡала, төбәк һәм бөтә Рәсәй профессиональ оҫталыҡ конкурстарында еңеүселәр, бөтә Рәсәй һәм халыҡ-ара олимпиада призерҙары остаздары, тикшеренеүсе уҡытыусылар инәсәк. Ассоциация маҡсаттары - белем биреү учреждениелары хеҙмәткәрҙәренең профессиональ компетентлыҡын күтәреү, педагогтарҙың инновацион тәжрибәһен йәйелдереү буйынса эшмәкәрлекте көйләү, мәғариф үҫешенең көнүҙәк мәсьәләләрен хәл итеү юлдарын асыҡлау.

✓Башҡортостан Хөкүмәтенең 2011 йылдың 23 ноябрендәге 419-сы ҡарары менән республикала III кварталда айына уртаса йән башына һәм халыҡтың төп социаль-демографик төркөмдәре буйынса йәшәү минимумы күләме билдәләнде. Йән башына йәшәү минимумы күләме күрһәтелгән осор эсендә - 5484 һум, эшкә яраҡлы халыҡ өсөн - 5861 һум, пенсионерҙар өсөн - 4471 һум, балалар өсөн 5374 һум тәшкил иткән.

*ШАҢДАУ*

# ТЫУМАҒАН БАЛАЛАРЫБЫҘ ӨСӨН...

## ирҙәрме, ҡыҙҙарыбыҙмы ғәйепле?



**Әхмәр Үтәбайҙың "Киске Өфө" гәзитенең 37-се һанында баҫылып сыҡҡан "Ирҙе ир иткән дә, хур иткән дә - ҡатын" тигән мәҡәләһен уҡып, оҙаҡ ваҡыт иҫемә килә алмай йөрөнөм. Милләттең бөлөү ғәйебен ҡалай анһат ҡына ҡатын-ҡыҙҙарға япһарып ҡуйған.**

Әйҙә, төптәнерәк тикшереп ҡарайыҡ әле. Милләтте милләт булараҡ бөтөрөү юлына иң элек беҙҙең хөрмәтле ир-егеттәребеҙ баҫты түгелме һуң? Үткән быуаттың егерменсе йылдарынан алып ир-егеттәребеҙ Өфөгә эшкә, уҡырға ағыла башланы һәм унда башҡа милләт ҡыҙҙарына өйләнеп, төпләнеп ҡалды. Билдәле, уларҙан тыуған балалар башҡорт булып үҫмәне (Оло быуын яҙыусыларын ҡарағыҙ әле, үҙенән һуң башҡорт балалары ҡалдырғандары бармы уларҙың?). Юғалтҡан милләтебеҙ һанын ауыл тулыландырып торҙо.

Һуңғы ваҡытта Башҡортостанда ҡалалар, ҡасабалар күбәйҙе. Ауыл йәштәре ығылып шул ҡалаларға, ҡасабаларға йүнәлде. Унда эшкә урынлашып, төпләнеп ҡалдылар һәм барыһы ла башҡа милләт ҡыҙҙарына өйләнделәр. Һуңғы йылдарҙа был тағы "модаға" әйләнде. Иң юғары даирәләрҙә эшләгән етәкселәрҙән алып, колхоз-совхоз рәйестәренең, эреле-ваҡлы ойошмаларҙың, завод-фабрикалар етәкселәренең ҡайһыһының ҡатыны үҙебеҙҙең милләттән, йә, әйтегеҙ әле минә? Уларҙан, әлбиттә, милләтен, телен, хатта илен һөймәҫ маңҡорттар үҫеп сыҡты. Шулай итеп, иң элек беҙҙең ир-егеттәребеҙ үҙ милләтен бөлдөрөү юлына баҫты һәм был туҡһан йыл буйына дауам итә. Шул арҡала беҙҙең күпме унған, һылыу, белемле ҡыҙҙарыбыҙ кейәүгә сыға алмай ҡартайҙы. Күпме башҡорт балаһы донъяға тыумай ҡалды...

Һуңғы йылдарҙа беҙҙең ҡыҙҙар ҙа Мәскәү, Питер, Киев кеүек ҙур ҡалаларға һәм сит илдәргә уҡырға, эшкә китә башланы. Нишләмәк кәрәк, өйләнмәгән егеттәрҙе көтөп, ҡартайып, балаһыҙ ултырып ҡалып булмай бит инде. Шулай итеп, ҡыҙҙарыбыҙ ҙа икенсе милләт егеттәренә кейәүгә сығып, милләтте бөлдөрөү юлына баҫты. Был хәл беҙҙең ир-егеттәребеҙгә оҡшаманы. Баҫмаларҙа "Үгеҙ эйәртеп ҡайталар", тип, ҡыҙҙарыбыҙҙан көләп яҙған мәҡәләләр күбәйҙе. Башҡа милләт егеттәре беҙҙең һылыу, унған ҡыҙҙарыбыҙҙы юғары баһалай, уларҙа тоғро тормош иптәше күрә шул. Тик, ҡыҙғаныс, уларҙың да балалары башҡорт булып үҫмәй.

Бынан байтаҡ йылдар элек яҡын әхирәтемдең ирен ерләшергә барған саҡта әхирәтемдең ике туған ағаһы менән бер автобуста барырға тура килде. Белемле, интеллигент ағай (Өфөнөң ҙур заводтарының береһендә баш инженер булып эшләгән): "Бер ҡыҙым французда, бер ҡыҙым итальянда кейәүҙәләр, бик яҡшы йәшәйҙәр, виллалары бар, һәр кемдең - үҙ машинаһы", - тип маҡтанып барҙы. Шунда бер ағай: "Ейәндәрең башҡортса һөйләшәме һуң?" - тип һорағас, ағай көләп ебәрҙе: "Башҡортса түгел, русса ла белмәйҙәр, тик французса һәм итальян телендә генә һөйләшәләр", -тине. Бер апай түҙмәне: "Ейән-ейәнсәрҙәрең әсә телен белмәгәс, бында маҡтанырға түгел, ә иларға кәрәк",- тине. Бик тә дөрөҫ әйтте.

Беҙҙең Учалы районы ауылдары балалары 8-11 класты тамамлайҙар ҙа, Миәс, Силәбе ҡалаларына эшкә китәләр. Эшкә урынлашып, бер нисә йылдан фатир алып, шунда йәшәргә төпләнеп ҡалалар. Егеттәр мәрйәгә өйләнеп, ҡыҙҙары урыҫ, йәһүдкә кейәүгә сығып бөттөләр. Яҡын ғына туғаныма шул турала әйтҡәс: "Рус, йәһүд тә кеше бит. Мәрйә килен башҡорт килеменнән артығыраҡ әле", - тип кенә ебәрҙе. "Ә милләт тураһында уйламайһығыҙмы, милләт бөтә бит", - тигәс: "Милләт беҙгә нимә бирҙе, эш урынымы, фатирмы, дәрәжәме?" - тигән яуап ишеттем.

Мин туғанымдың был фекерен яҡламайым яҡлауға. Беҙ бер нигә ҡарамайынса, үҙ милләтебеҙҙе тиңдәр араһында тиң итеп йәшәтеү хаҡында ҡайғыртырға тейешбеҙ. Был - Хоҙай Тәғәлә тарафынан йөкмәтелгән тәүбурысыбыҙ. Әммә... Туғаным әйткәндәр ҙә, ни тиклем әсе булмаһын, хәҡиҡәт. Ҡайһы берәүҙәр, Башҡортостанда башҡорттарға өҫтөнлөк бирелә, тип лаф ора ул. Был бит төптө дөрөҫ түгел. Ундай өҫтөнлөк көсәп йөрөгән бер генә милләттәште лә белмәйем әле. Киреһенсә, һәр кем ынтылған яҡшы эш урыны табыу, вазифа буйынса үрләү кеүек изге маҡсаттарға өлгәшеү беҙҙең милләттәштәргә ауырыраҡ та бирелә әле ул. Лайыҡлы, көслө егеттәребеҙ йыш ҡына яһалма ҡаршылыҡтарға, хәйлә сымдарына эләгеп, эшһеҙ ҙә, ашһыҙ ҙа, дәрәжәһеҙ ҙә тороп ҡала. Бында, әлбиттә, күберәк эскелек һәм бисәләр ғәйепле. Беҙҙең ирҙәр бит һылыу бисә күрһә, күҙҙәре уйнап китә, донъяһын онота һәм тоҙаҡҡа эләккәнен һиҙмәй ҙә ҡала. Шулай итеп, үрләргә, үҫергә тейешле егеттәребеҙ абынып ҡуя. Ирҙе ир иткән дә, хур иткән дә ҡатын, тигән мәҡәл менән килешмәй булмай, әлбиттә. Ул егеттәребеҙ айыҡ булһа, үҙебеҙҙең тоғро ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ менән ғаилә ҡорһа, әлбиттә, әҙәм булыр, һис юғы, башҡорт балалары үҫтереп, милләте алдында яҡты йөҙлө булыр ине, әммә... Юҡ, ирҙәребеҙҙе яманлап, ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙҙы өҫкә сығарып ҡуйыуҙан түгел был һүҙем. Совет заманында шулай уҡ диндән яҙған ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ тәрбиә ҡанундарын һанламаған ҡыҙҙар үҫтерҙе. Улар йолаларыбыҙҙы, ғаилә ҡағиҙәләрен, ир менән ҡатындың үҙ-ара йәшәү мөнәсәбәттәрен белмәй буй еткерҙе. Уларҙың әҙ генә ауырлыҡтарға, һүҙгә килешеүгә лә түҙмәй, айырылышыу яғын ҡарауын, ирҙе ир итмәй ҡыланыуын да өнәмәйем. Ә шулай ҙа ошондай бер нисә ҡатын-ҡыҙға ҡарап, милләттең бөтөүендә тик ҡатын-ҡыҙҙарҙы ғына ғәйепләү - төптән дөрөҫ түгел.

**Рәйсә ҠАРАБАЕВА.**

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

# ҒӘҘӘТТӘН - ӘҘӘПКӘ

**Бер юл тәртибе һаҡлаусыһының һүҙҙәре иҫкә төшә:"Йәй башына юлда һәләкәттәр күбәйә. Ни өсөнмө? Сөнки шоферҙарҙың иғтибары юлға түгел, ҡыҙҙарҙың ялангас ерҙәренә йүнәлә..."**

Ысынлап та, хәҙерге ҡыҙҙарыбыҙҙың кейемдәре: "Кара минә, тот мине, ал мине!" - тип ҡысҡырып тора шул. Сәс тураһында әйтеп тә тормайым, ә боттар, кендек, бил, елкәләр, атылып сыға яҙып торған түштәр. Ошондай ҡиәфәттең ирҙәр кәйефен уятыуҙан башҡа берәй матурлығы бармы? Мода артынан ҡыуабыҙ, тип һаташаларммы ҡыҙҙарыбыҙ? Ә бит хәҙер Ислам динендә булмаһалар ҙа, Европа илдәрендә лә ярым ялангас йөрөүҙең әхлаҡһыҙлыҡ икәнен танынылар, бындай ялангас модаға ҡаршы сығыш яһай башланылар. Ә беҙ... Беҙ үҙебеҙҙең боронғоларҙан килгән әҙәп-ғәҙәттәрҙе һанға һуҡмайынса, ялангасланып, үҙебеҙҙе генә түгел, ата-әсәләребеҙҙе лә тамуҡҡа һөйрәйбеҙ һәм боронғолар аманатына хыянат итәбеҙ. Халҡыбыҙ борондан һылыу йәш ҡыҙҙарҙы ят ирҙәр күҙенән йәшерәберәк тотҡан, берәй яҡҡа ебәрһә лә, ағаһын йә ҡустыһын һаҡсы итеп эйәртеп ебәрер булған. Сөнки ҡыҙҙар - буласаҡ милләт әсәләре. Ә ялангас, әҙәпте юғалтҡан ҡыҙҙар ниндәй тул ҡалдырыр?

"Ҡыҙ баланды ҡырҡ урындан тый", тип тә әйткән боронғолар. Әсәйҙәр ҡыҙҙарҙы ҡырҡ урындан тыйып тәрбиәләгәндә уларҙы иң беренсе кейенеү һәм аралашыу мәҙәниәтенә өйрәтергә тейеш. Тәрбиәнең бер алымы ла икенсеһенән айырым башҡарылмай. Мәҫәлән, ҡыҙыңды таҙалыҡҡа өйрәтәһең икән, тәндең таҙалығы һаулыҡ өсөн мөһим, тип әйтәһең. Матур итеп һөйләшергә өйрәтәһең икән, тимәк, матур итеп аралашыуға нигеҙ һалаһың. Аралаша белеү дөрөҫ фекерләй белеү менән үҙ-ара тығыҙ бәйләнгән. Аралаша, дөрөҫ фекерләй белгән кеше мәҙәниәтһеҙ булмаҫ, әҙәпһеҙ кейенеп йөрөмәҫ. Яҡшы ғәҙәттәргә, яҡшы мөнәсәбәткә, яҡшы мөғәмәләгә өйрәнгән кешенең әҙәбе лә яҡшы булыр. Шуға ла ҡыҙ баланың тәрбиәһенә айырыуса талапсан булыу мөһим. "Ҡыҙ баланды ҡырҡ урындан тый", тигән мәҡәл юҡтан ғына тыумағандыр бит.

**Әлфиә ЙОМАҒУЖИНА,**
**уҡытыусы.**
**Баймаҡ районы Ғүмәр ауылы.**

# Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостанда көндәр һыуытты. Әммә алдағы көндәрҙә республикала һауа температураһы тағы ла түбәнәйәсәк. Гисметео мәғлүмәттәре буйынса, көндөҙ 13-20 градус һыуыҡ булыуы көтөлә, төндә - 30 градус һыуыҡ. Синоптиктар хәбәр итеүенсә, ял көндәрендә көндәр әҙерәк йылынасаҡ.

✓2021 йылда Өфөлә Бөтә донъя спорт уйындарын үткәреү планлаштырыла. Был хаҡта Ағиҙел ҡалаһы халҡы менән осрашыу барышында Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов хәбәр итте. Уның билдәләүенсә, Бөтә донъя спорт уйындары - Олимпия уйындарына оҡшаш, тик уларҙың программаһына олимпия уйындарына индерелмәгән спорт төрҙәре инә. Бөгөнгә көндә олимпия уйындарына индерелгән 45 спорт төрө теркәлгән, ә Бөтә донъя спорт уйындары программаһына 100-гә яҡын спорт төрөн индереү планлаштырыла.

✓"Ижтимағи электрон гәзит" сайтында (www.i-gazeta.com) Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары - Хөкүмәт Аппараты етәксеһе Илшат Тажетдиновтың онлайн-конференцияһы булып үтте. Бер сәғәт дауамында вице-премьерға Хөкүмәт Аппараты эшмәкәрлегенә, республиканың иҡтисади һәм халыҡ-ара бәйләнештәренә, Дәүләт заказдарын урынлаштырыуға, Башҡортостандың көньяҡ-көнсығыш райондарын комплекслы үҫтереү программаһын тормошҡа ашырыуға бәйле 30-лаған һорау бирелде.

✓Йомабай Иҫәнбаев исемендәге призға республика ҡурайсылар конкурсы Гран-прийын Сибайҙан Нурғәли Кәйекбирҙин яуланы. Ижади бәйге Хәйбулла районында үткәрелде. Унда республиканың 17 районынан һәм 6 ҡалаһынан, шулай уҡ Ырымбур өлкәһенең Александровка районынан 31 ҡурайсылар ансамбле (20 балалар һәм 11 өлкәндәр), 85 башҡарыусы (50 солист - 16 йәшкә тиклем, 30 солист - 16 йәштән өлкәнерәк) ҡатнашты. Конкурста ҡатнашыусылар араһында Учалы районынан 7 йәшлек Иштимер Йосопов иң йәше булды. Иң өлкәне - Бөрйән районынан билдәле башҡорт халыҡ йырҙарын башҡарыусы Дәүләтбай Рәхмәтуллин, уға 74 йәш.

✓Йыл аҙағына тиклем республикала онға хаҡ күтәрелмәйәсәк, тип хәбәр ителәр республиканың Ауыл хужалығы министрлығында. Киреһенсә, етештереүселәр унең һатыу хаҡын кәметә. Юғары сортлы онға һатыу хаҡы йыл башынан алып 30-60 процентҡа төшкән.

✓ *Тыйыуҙы киләһе йылға күсерҙеләр. Ләкин был аҙымдан барыбер ягыулык күбәймәне. Етештереүселәр, тыйыуҙан ҡурҡып, бензиндың күп өлөшөн сит илдәргә һатып өлгөрҙө.*



ҮӘТ ӘЙ!

# ЭШСЕЛӘР ҘӘ ЕТЕШМӘЙ...

## эшһеҙҙәр ҙә кәмемәй

**Республикала эшһеҙлек кимәле тотороҡло ҡала. Өфөлә, мәсәлән, мәшғүллек хеҙмәте органдарында теркәлгәндәрҙең һаны ноябрь айына 8705 кеше тәшкил иткән. Шуларҙың 5422-һе ҡатын-ҡыҙҙар.**

Шулай ҙа йыл башынан алып эшһеҙҙәр һаны 2,5 мең кешегә кәмегән. Был тәү сиратта хеҙмәт баҙарында көсөргәнешлекте кәметеүгә йүнәлтелгән өҫтәмә сараларға бәйле. Мәшғүллек хеҙмәтендә бөгөн вакансиялар һаны иһә - 11766. Күренеүенсә, вакансиялар рәсми рәүештә теркәлгән эшһеҙҙәргә ҡарағанда өс меңгә күберәк. "Бындай үҙенсәлекле айырма башлыса эшсе һөнәрҙәренең талап ителеүенән барлыҡҡа килә. Ә эшһеҙҙәрҙең күбеһе техник белемгә эйә, һөнәри кимәленән түбәнерәк булған эштән улар баш тартыуҙы хуп күрә, - ти Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары Рәмил Дилмөхәмәтов. - Икенсенән, кешеләр эш хаҡы түбән булыуҙы сәбәп итеп тәҡдим ителгән урындарға бармай. Ошо сәбәптәр хеҙмәт баҙарындағы хәлде ҡатмарлаштыра. Эшһеҙ булып иҫәптә тороусыларҙың ваҡытында пособие алып тороуҙары ла, бәлки, эш эҙләүгә әүҙемлек күрһәтмәүгә булышлыҡ итәләр".

Бөгөн эш эҙләүселәр өсөн вакантлы һөнәрҙәргә уҡытыу мөмкинлеге булдырылған. Әммә, Рәмил Хөрмәт улы әйтеүенсә, унда барыусылар ҙа бик әҙ. Ойошма-предприятиелар ҙа үҙ сиратында хеҙмәткәрҙәрен төрлө сәбәптәр арҡаһында эштән бушатып тора. Бөгөн мәшғүллек үҙәктәренә 178 ойошманан ошо хаҡта хәбәр килгән, ти Р. Дилмөхәмәтов. Хәлде ыңғай яҡҡа үҙгәртеү йәһәтенән граждандарға үҙ эшен асыуға булышлыҡ итеү, эштән бушатылырға торғандарға өҫтәмә һөнәри белем алырға ярҙам итеү, бынан тыш, ауыр шарттарҙа хеҙмәт иткән ҡатын-ҡыҙҙы яңы һөнәргә уҡытыу кеүек саралар ойошторола.

Шул уҡ ваҡытта эшкә сит ил граждандары, нигеҙҙә БДБ илдәренән, йәлеп ителә. Уларҙың күбеһе тәҙәләштә эшләй. Эш менән тәьмин итеүселәр өсөн был отошло, сөнки ситтән килеүселәр түбән эш хаҡына ла риҙалаша.

Баш ҡалала эш хаҡы түләү буйынса бурыстары булған предприятиелар ҙа етерлек. Йәғни 25 предприятие эш хаҡын тотҡарлай. Дөйөм бурыс 93 миллион һум тәшкил итә.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Рәмил Дилмөхәмәтов әйтеүенсә, тәүге бурыс - эшһеҙҙәрҙе вакантлы урындарға йәлеп итеү. Ләкин кешене көсләп эшләтеп булмай. Теләгәндәре ике-өс ергә лә урынлаша, теләмәгәне иһә мөмкинлек булғанда ла эшкә бармауы ихтимал. Тиҙҙән ялҡаулыҡҡа ҡаршы көрәш асырға тура килмәгәйе.**

Әксән МӨНИРОВ.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

## ӘХЛАҠИ ЗАКОН БУЙЫНСА...

**Бөгөн иң ҡурҡыныс наркотиктарҙың береһе һаналған дезоморфинды етештереүҙе бөтөрөү маҡсатынан республика аптекаларында ауыртыныуҙы баҫа торған дарыуҙарҙы һатыуҙы сикләргә ҡарар иткәндәр.**

Ябай шарттарҙа еңел һәм тиҙ етештерелә торған дезоморфинды ҡуллана башлаусы бер йыл эсендә тере мәйеткә әүерелә. Уның эске ағзалары серей һәм наркоман бик тиҙ яҡты донъя менән хушлаша. Шуға күрә лә был наркотик һуңғы ваҡытта йәмғиәтебеҙҙең бик ҙур афәте булып тора.

БР Һаулыҡ һаҡлау министрлығы мәғлүмәттәре буйынса, 2,5 мең кеше дезоморфинда ултыра, нигеҙҙә - 15-30 йәштәгеләр. Наркотиктар әйләнешен контролдә тотоу буйынса дәүләт органдары үрҙә әйтелгән препараттарҙы рецепт буйынса ғына бирергә тәҡдим итә. Әммә бындай закон ил буйынса 2012 йылдың 1 июненән генә үҙ көсөнә инергә тейеш. Айырым төбәктәрҙә иһә, шул иҫәптән Татарстанда, кодеины булған дарыуҙар рецептһыҙ һатылмай. Башҡортостанда бындай саралар һаман да ҡабул ителмәй. Юридик нигеҙҙәр булмағас, айырым фармацевттар үҙ теләге менән әхлаҡи закондарға таянып эш итә башлаған. Өфө, Туймазы, Ҡыйғы районы аптекалары бындай килешеүҙәргә ҡул ҡуйған да инде. Нефтекамала индерелгән сара әленән үк үҙ һөҙөмтәһен бирә башлаған. Наркомандар препарат табыу маҡсатынан башҡа төбәктәргә юл тота. Урындағы таксистар үҙ сиратында уларҙы хеҙмәтләндермәҫкә килешкән.

## ТҮРӘЛӘРҘЕ БЫЛ БОРСОРМО?

**Республикала вайымһыҙ чиновниктарҙың эш хаҡын ҡыҫҡартыуҙары ихтимал. Республика Хөкүмәте Премьер-министры Азамат Илембәтов урындағы үҙидаралыҡ органдарында эш хаҡына сығымдарҙы көйләүсе ҡағыҙға үҙгәрештәр индереү хаҡында ҡул ҡуйҙы.**

Уға ярашлы, ҡала һәм район башлыҡтарының эш хаҡы урындағы уртаса эш хаҡынан, эшһеҙлек кимәленән, ҡулланыуға тапшырылған торлаҡтан, кеше һанына ҡарата инвестицияларҙан, урындағы килемдең бюджеттағы өлөшөнән һәм урында етештерелгән тауарҙың күләменән сығып билдәләнәсәк.

Был күрһәткестәрҙе Башҡортостандың Иҡтисадты үҫтереү министрлығы өс ай һайын республика Финанс министрлығына тапшырасаҡ, ә улар, үҙ сиратында, барыһын да иҫәпләп, коэффициент сығарасаҡ. Йәғни бер тапҡыр насар эшләү өс айлыҡ эш хаҡына йоғонто яһарға мөмкин. Был үҙгәрештәр барлыҡ ҡала һәм райондарға түгел, ә республика бюджетынан үҙ килеменән 10 процентҡа күберәк ярҙам алған район һәм ҡалаларға ғына ҡағыласаҡ. Бындай райондар һаны бөгөн республикала күп. Иҫәпләүгә һуңғы өс йылдың, бер рәттән булмаһа ла, ике йылы алынасаҡ: мәҫәлән, тик 2008 һәм 2010 йылдар.

Чиновниктарҙың эш хаҡы бер-нисә өлөштән тора. Ҡағыҙҙа булараҡ, ул ҙур булмаған оклад, айлыҡ премия, шулай уҡ хеҙмәт стажы, чин, дәүләт серен һаҡлаған өсөн өҫтәмә, матди ярҙам һәм башҡа өҫтәмәләр. Нәҡ өҫтәмәләр чиновниктарҙың эш хаҡының төп өлөшөн тәшкил итә.

Әйткәндәй, һәйбәт эш өсөн чиновниктар премия алырға ла мөмкин. Мәҫәлән, иң һөҙөмтәле ҡала һәм районлар араһында тәүге өс урынға эләгеүселәр 4,1 оклад күләмендә премияға дәғүә итә.

## БЕНЗИН ХАҠЫ ҠИММӘТ

**Автомобиль ягыулығы хаҡы буйынса Өфө башҡа ҙур ҡалалар араһында 35-се урынды биләй. Водителдәр әйтеүенсә, автобуста йөрөүе күпкә арзанараҡҡа төшә.**

Октябрь айы эсендә генә ягыулыҡҡа хаҡ 1,5 процентҡа артҡан. Статистика мәғлүмәттәренә ярашлы, бер литр бензин уртаса 26,22 һум тора. "Башнефть" компанияһы үҙгәрештәр кисергәндән һуң, республикала бөтә продукцияның 4 -5 проценты ғына һатыла. Ҡалғаны башҡа төбәктәргә китә," - тип аңлата БР буйынса монополияға ҡаршы хеҙмәт етәксеһе Зөлфирә Аҡбашева. Ябай итеп әйткәндә, беҙҙең нефтҡә хәҙер мәскәүҙәр хужа.

Бынан тыш, бензин ҡимммәтләнеүенә нефтҡә донъя хаҡтары күтәрелеүе, һалымдар артыуы, башҡа сәбәптәр тәьҫир итә, тип билдәләй белгестәр. "Бензин хаҡының 60 процентын акциздар тәшкил итә, - ти Зөлфирә Аҡбашева. - Быйыл Евро-2 стандартлы бензин илдә тыйылғайны, әммә быға нефть эшкәртеү заводтары әҙер булмай сыҡты. Шуға күрә тыйыуҙы киләһе йылға күсерҙеләр. Ләкин был аҙымдан барыбер ягыулыҡ күбәймәне. Етештереүселәр, тыйыуҙан ҡурҡып, бензиндың күп өлөшөн сит илдәргә һатып өлгөрҙө".

Шул уҡ ваҡытта ягыулыҡҡа ихтыяж артҡандан-арта. Йыл башынан алып Өфөлә автомобилдәр һаны 20 меңгә артҡан һәм хәҙер 400 мең тәшкил итә. Шуға ҡарамаҫтан, ҡайһы бер республика заводтары килемһеҙ эшләй. Бензиндың ҡиммәтләнеүе хәҙер тәү сиратта күмәртәләп һатыу хаҡының артыуына бәйле, ти З. Аҡбашева.

## ПАССАЖИРҘАР ҘА... ЭСМӘҺЕН

**Йәмғиәтте ялмап алған эскелекте кәметеүгә йәнә бер аҙым яһалырға тора. Һөйөнөслө күренгән яңылыҡ бигерәк тә руль артында ултырыусыларға ҡағыла. Тик был яңылыҡҡа ысынлап та һөйөнөрлөкмө икән?**

ЮХХДИ хеҙмәткәрҙәре тиҙҙән алыҫтан спирт быуын билдәләй торған үҙенсәлекле приборға эйә буласаҡ. Был өр-яңы заман техникаһы булдырыу буйынса 2007 йылда эшләй башлайҙар. Уның өсөн 25 миллион һум аҡса бүленә. "Бутон" тип аталған алколазерҙың мобиль һәм стационар төрҙәрен етештерергә уйлайҙар. Тәүгеһе ярҙамында 15 метр алыҫлыҡтан приборҙы автомобилгә йүнәлтеп этанол быуын асыҡларға була. Стационар моделде юл буйында беркетеп ҡуясаҡтар. Прибор килгән сигналдарҙы яҡын тирәләге ЮХХДИ посына ебәреп торасаҡ.

Ҡорамалдың кәрәклеген билдәләйҙәр, әммә уның әлегә етешһеҙ яҡтары күп, гәйепһеҙ кешеләр зыян күреүе ихтимал, тип әйтеүселәр бар. Мәҫәлән, таксистарға иҫерек пассажирҙарҙы йөрөтөргә тура килә. Ә алколазер кемдән спирт быуы таралыуын билдәләмәй. Автобус водителдәрен, моғайын, аҙым һайын туҡтатырға тура киләсәк. Сөнки йәмәғәт транспортында кем генә йөрөмәй. Төшөрөп алған пассажирҙарҙың ғына түгел, айыҡ, ҡайҙалыр ҡабаланып китеп барғандарҙың да ваҡыты әрәм буласаҡ бит. Бынан тыш, спирт быуы ҡатын-ҡыҙҙарҙың биҙәнеү әйберҙәренән дә сығыуы ихтимал. Бер һүҙ менән әйткәндә, турғайҙарға йәҙрә менән атыу була инде. Шулай ҙа белгестәр етешһеҙлектәрҙе бөтөрөргә вәғәҙәләй. Аҙаҡтан прибор йыл дауамында тест үтәсәк. Ҡорамалдың ҡасан ҡулланылышҡа инеүен әле бер кем әйтә алмай.

## Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓19 ноябрҙә Башҡортостанда эш сәфәре менән Рәсәй Федерацияһы Президенты Дмитрий Медведев булып китте. Дмитрий Медведев менән Рөстәм Хәмитов Ғ.Ғ.Ҡыуатов исемендәге Республика клиник дауаханаһында булды, унда улар оксигенация өсөн аппараттар ҡараны, шулай уҡ үткәрелгән операциялар тураһында мәғлүмәт базаһы менән танышты. Бынан һуң Дмитрий Медведев бөйөр күсереп ултыртыу буйынса операция кисергән ауырыуҙар менән аралашты. Артабан дауахана хеҙмәткәрҙәре менән осрашты һәм уларҙың һорауҙарына яуап бирҙе.

✓Башҡортостан 2011 йылдың көҙгө саҡырылыш осоронда 6 мең самаһы йәш егетте Рәсәйҙең Ҡоралды Көстәренә оҙатасаҡ. Үҙәк хәрби комиссариатында билдәләүҙәренсә, беҙҙең республика, Красноярск крайы һәм Татарстан менән бер рәттән, хәрби хеҙмәткә саҡырыу кампанияһын үткәреү буйынса иң ойошҡан төбәктәрҙең береһе булып тора. Был йәһәттән Алтай һәм Пермь крайҙары, Төмән һәм Силәбе өлкәләре яҡшы һөҙөмтәләр күрһәтә.Көҙгө хәрби хеҙмәткә саҡырыу кампанияһы 31 декабрҙә тамамланасаҡ.

✓7 декабрҙә Өфөлә "Байрам индустрияһы - Яңы йыл" байрам продукцияһы күргәҙмә-йәрминкәһе үтәсәк. Күргәҙмә республиканың баш ҡалаһында етенсе йыл рәттән үткәрелә һәм йыл һайын унда Рәсәйҙең төрлө төбәгенән йөҙҙән ашыу фирма ҡатнаша. Йола буйынса Башҡортостандың, Татарстандың, Мәскәү, Һамар, Свердловск, Силәбе, Ульяновск өлкәләренең, Санкт-Петербургтың, Рәсәйҙең башҡа төбәктәренең етештереүселәре үҙенең экспозицияларын әҙерләй.

✓Баҫма матбуғат электрон баҫмалар менән бер рәттән оҙаҡ ваҡыт йәшәйәсәк. Бындай фекерҙе Өфөлә төбәк киң мәғлүмәт сараларының баш мөхәррирҙәре менән осрашыуҙа ил Президенты Дмитрий Медведев белдерҙе. Уның фекеренсә, көндәлек гәзиттәр миллионлаған тираж менән сыҡҡан дәүер үтте, һәм ул үҙе интернет яҡлы. Шул уҡ ваҡытта, Президент һүҙҙәренсә, һуңғы ваҡытта ул гәзиттәрҙе йышыраҡ уҡый, сөнки баҫмаларҙың күпселеге электрон төрҙә сыға башланы. Киләсәк интернет менән бәйле булһа ла, баҫма матбуғат йәшәйәсәк.

*ҮӘТ, МӘСЬӘЛӘ!*

# МӘКТӘПТӘРГӘ...

## тағы бер һынау

**Рәсәйҙә "Дини мәҙәниәт һәм донъяуи этика нигеҙҙәре" тигән предметты уҡытыу тәжрибәһе тамамланды. Ул ике йыл дауамында 21 төбәктең 9980 мәктәбендә үткәрелде.**

Тәжрибә яңы предметты өйрәнеү йәһәтенән күп кенә етешһеҙлектәрҙе асыҡларға ярҙам итте. Иң ауыры - уҡытыусылар әҙерләү, тигән һығымтаға килде Мәғариф һәм фән министрлығы. Дин нигеҙҙәрен уҡытыуҙы 4-се синыф аҙағында башлап, 5-се сиректең төүге яртыһында тамамларға, тип ҡарар иткәйнеләр. Йәғни дәресте башланғыс синыф уҡытыусыларына ла үткәрергә кәрәк булып сыҡты. Әммә, тәжрибә күрһәтеүенсә, уларға башта етди әҙерлек үтергә кәрәк. Тәжрибәгә тарих уҡытыусылары ла йәлеп ителгәйне. Уларҙың иһә бәләкәй балалар менән эшләү оҫталығы етмәүе асыҡланды. Өҫтәүенә, дини нигеҙҙәрҙе яҡшы белгән педагогтар күп талап итеlә. Шуға күрә яңы дәресте бер юлы бөтә мәктәптәрҙә лә индермәйәсәктәр. Тәжрибә үтмәгән төбәктәрҙә мәктәптәрҙең 10 проценты ғына дин нигеҙҙәрен уҡытасаҡ. 2014 йылда ғына был предмет бөтә мәктәптәрҙә индереләсәк.

Тәжрибә һөҙөмтәләрен баһалау өсөн балалары дин нигеҙҙәрен өйрәнгән 700 ата-әсәнең фекерен белешкәндәр. Күпселектең дәрестәргә ыңғай ҡарауы асыҡланған.

Дини мәҙәниәт нигеҙҙәре дәресе үҙе алты модулгә бүленә: донъяуи этика, донъя дини мәҙәниәте, ислам, православие, буддизм, иудаизм мәҙәниәте нигеҙҙәре. Ата-әсәләр модулде үҙҙәре һайлай, балалар төркөмдәргә бүленеп уҡыясаҡ.

Әммә фекер алышҡанда йыш осраҡта мәктәп етәкселеге үҙе ата-әсәләрҙе теге йәки был модуле һайларға мәжбүр итеүе асыҡланған. Был турала респонденттарҙың 21 проценты хәбәр иткән. Был алты модулдән дә дәрес алып барырлыҡ белгестәрҙең булмауы



менән дә аңлатыла. "Дәресте дин әһеле түгел, мәктәп педагогы уҡытасаҡ", - тип вәғәҙә итә РФ мәғариф һәм фән министры Андрей Фурсенко. Әле был предметты күпселек мәктәптәрҙә башланғыс синыф һәм тарих уҡытыусылары үҙ өҫтөнә алған. Уҡытыусыларға яңы дәресте үҙләштерергә ярҙам итеү өсөн 500 белгес әҙерләнгән. Һәр төбәктә стажировка майҙансығы ойоштороу күҙаллана. Педагогтар 2-3 айлыҡ курстар үтәсәк. Тәжрибә үткән төбәктәрҙә уҡыусыларҙың күбеһе донъяуи этиканы һайлаған. Теге йәки был дин нигеҙен өйрәнергә теләүселәр иһә үтә күп түгел икәне асыҡланған.

*ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП*

**"Мәктәптәрҙә дин дәрестәрен индерергә кәрәкме, әллә дин мәсеттәрҙә генә өйрәтелергә тейешме?" тигән һорау менән бер нисә кешегә мөрәжәғәт иттек.**

**Әхәт КИЛМӨХӘМӘТОВ, филология фәндәре кандидаты, Башҡортостан мәғарифты үҫтереү институтының Донъяуи һәм милли мәҙәниәттәр кафедраһы мөдире:** Яңы дәрес балаларҙы донъя мәҙәниәте менән таныштырыу, әхлаҡи тәрбиә биреү йәһәтенән әһәмиәтле. Йәмғиәттә үҙ-үҙеңде тотоу, яҡшылыҡ менән насарлыҡты айыра белеү, әхлаҡи нормаларҙы һаҡлау нигеҙҙәре бирелә был дәрестәрҙә. Икенсенән, предметтың уҡытыу формаһына килгәндә, ул культурологик нигеҙҙә генә булырға тейеш. Рухи мәҙәниәт булараҡ, дин хаҡында дөйөм мәғлүмәт биреү тураһында һүҙ бара, ә динде өйрәнеү күҙ уңында тотолмай. Ата- әсәләр алты модулдең береһен һайлай ала. Кем айырым дин нигеҙҙәренә туҡталырға теләмәй, донъяуи этиканы һайлай. Был йүнәлештә бала дөйөм әхлаҡи нормаларға, этикет ҡағиҙәләренә төшөнә. Айырым бер дин нигеҙҙәрен һайлаусылар иһә барыбер донъя мәҙәниәте менән танышып үтәсәк.

Дәресте юғары белемле, махсус курстар үткән мәктәп уҡытыусылары алып барырға тейеш. Яңыраҡ мәктәп уҡытыусыларын әҙерләү буйынса Мәскәүҙә махсус курстар үткәрелде. Унда Башҡортостан мәғарифты үҫтереү институты ғалимдары, уҡытыусылары ҡатнашты. Үҙ сиратында республика мәктәбе уҡытыусылары беҙҙә әҙерлек үтәсәк. Киләһе йылдың апрель айынан ил күләмендә, шул иҫәптән Башҡортостанда дин мәҙәниәте һәм донъяуи этика нигеҙҙәре дәресе уҡытыла башлаясаҡ.

**Мәрйәм БУРАҠАЕВА, яҙыусы, педагог:** Дин нигеҙҙәрен беҙ башҡорт мәктәптәрендә асылда 1992 йылда уҡ индергәйнек. Ул етенсе синыфта "Тормош һабаҡтары" дәресендә өйрәнелеп килде. Был дәрестә төп иғтибар, әлбиттә, башҡорт мәҙәниәтен, сәнғәтен, йолаларын, ғөрөф- ғәҙәттәрен өйрәнеүгә бирелә, шулай ҙа диндең төп нигеҙҙәре лә ситтә ҡалдырылмай. Шуға ла был дәресте уҡытыуҙы махсус әҙерлек курстары үткәреп, әлеге "Тормош һабаҡтары", "Башҡортостан мәҙәниәте" предметтары уҡытыусыларына йөкмәтһәләр, яҡшы булыр, тип уйлайым. Яңы предметты 4-5-се синыф балаларына уҡытасаҡтар. Минеңсә, был осорҙа баланың ҡарашы нығынып өлгөрмәй, дәрес асылын ул фән итеп кенә өйрәнәсәк һәм ҡабул итәсәк. Шуға күрә уҡытыусыларға, ата - әсәләргә әйтер теләгем шул: донъя дине нигеҙҙәрен, йә булмаһа, донъяуи этика йүнәлешен һайлап алһындар ине.

Дәреслектәр Мәскәүҙә нәшер ителә. Әммә башҡорт мәктәптәре өсөн беҙ өҫтәмә методик ҡулланма әҙерләйәсәкбеҙ. Уның буйынса мин һәм улым Илгизәр Бураҡаев эшләй. Был методик ҡулланма дәрестең өс йүнәлеше йәки модуле, донъя дине нигеҙҙәре, этика һәм ислам нигеҙҙәре буйынса була. Шулай уҡ һүҙлек рәүешендә дини терминдарҙың тәржемәһен бирергә уйлайбыҙ. Дин мәҙәниәттең тотош бер өлөшө. Бала уға төшөнөргә, ысын динде ялғандан айыра белергә тейеш.

**Нурмөхәмәт хәҙрәт НИҒМӘТУЛЛИН, Башҡортостан мосолмандары Диниә назараты идараһы рәйесе:** Рәсәй - күп динле дәүләт. Беҙҙә дүрт традицион дин - ислам, христиан, йәһүдә, будда дине йәшәп килә. Шуға күрә дәрестәрҙә дүрт дин тураһында ла мәғлүмәт бирелергә тейеш. Рәсәй мөфтөйҙәре Советы рәйесе Рауил Гәйнетдин һәр сығышында ошо фекерҙе үткәрә. Беҙ ҙә уға ҡушылабыҙ. Шул ваҡытта ғына милләт-ара татыулыҡҡа ғына түгел, дин-ара татыулыҡҡа ла юл асыласаҡ. Әгәр ҙә мәктәптәрҙә бер генә дин хаҡында мәғлүмәт бирелһә, ул, киреһенсә, быға кәртә булып ҡына торасаҡ. Шуның өсөн дүрт дингә лә иғтибар бүленергә тейеш. Хәҙер бит, элекке кеүек, мәҙрәсәләр йәки сиркәү эргәһендәге мәктәптәр юҡ. Бер синыфта әллә күпме милләт, дин вәкиле уҡый. Уларҙы бүлеп уҡытыу бик күп фекер айырмалыҡтарына, ихтирамһыҙлыҡҡа килтереүе мөмкин. Уҡытыу мәсьәләһенә килгәндә, педагогия институттары был йүнәлеш буйынса махсус белгестәр әҙерләп сығарырға тейеш, беҙҙенсә. Әгәр беҙҙең яҡтан ярҙам кәрәк булһа, бер ниндәй ҡаршылыҡ күрһәтмәйәсәкбеҙ.

**Ишкенә МӨХӘМӘТОВ яҙып алды.**

*ҺОРАУ-ЯУАП*

## ҺЕҘҘӘН РИЗАЛЫҠ КӘРӘК

**Элекке ире шәхси йорттағы үҙ өлөшөн элекке ҡатыны ризалығынан тыш өсөнсө кешегә һата аламы?**

- Өлөш милке ҡатнашсыһы үҙ өлөшөн һатырға, бүләк итергә, васыят итергә, залог итеп бирергә йә булмаһа өлөшөн башҡа төрлө файҙаланғанда РФ Гражданлыҡ кодексының 250-се статьяһындағы ҡағиҙәнe иҫтә тотоп эш итергә бурыслы.

Әлеге статьяға ярашлы, дөйөм милек хоҡуғындағы өлөш сит кешегә һатылған осраҡта өлөш милекселәренең ҡалғандары был өлөштө һатыуға ҡуйылған хаҡты билдәләргә һәм башҡа тигеҙ шарттарҙа уны һатып алырға өҫтөнлөклө хоҡуҡ менән файҙалана. Шуныһына иғтибар итегеҙ: өлөшөн һатыусы башҡа өлөшсөләргә хаҡын һәм башҡа шарттарҙы күрһәтеп, үҙ өлөшөн һатыуы хаҡында яҙма рәүештә хәбәр итергә бурыслы. Әгәр башҡа өлөшсөләр уны һатып алыуҙан баш тартһа йәки хәбәр алғандан һуң бер ай эсендә һатып алмаһа, өлөш милексеһе уны теләгән кешегә һатып ебәрә ала. Кодекстағы ошо уҡ статья буйынса һатып алыуҙа өҫтөнлөклө хоҡуҡ менән файҙаланыу ҡағиҙәһе боҙолған осраҡта башҡа өлөшсөләр суд тәртибендә был хоҡуҡты үҙҙәренә кире ҡайтара ала. Шулай итеп, элекке ирегеҙ фатирҙағы үҙ өлөшөн тотонорҙан алда был хаҡта яҙма рәүештә һеҙгә белдерергә һәм һеҙ баш тартҡан хәлдә йәки бер ай эсендә бер ниндәй яуап бирмәгән осраҡта ғына өлөшөн ситкә һатырға хоҡуҡлы.

## МИРАҪҠА ХОҠУҒЫ ЮҠ

**Ағайым вафат булды. Уның милке булған фатирында теркәлгән һәм 15 йыл граждансылыҡ тәртибендә бергә йәшәгән ҡатыны тороп ҡалды. Ул ҡатын фатирға дәғүә итә аламы?**

- Әгәр ағайығыҙ иҫән сағында ҡатыны исеменә васыят яҙмаған булһа, гражданлыҡ ҡатыны фатирға дәғүә итә алмай. Был осраҡта түбәндәге ҡағиҙәләрҙе иҫтә тотоу кәрәк. Васыятнамәһе булмаған хәлдә граждан вафат булғандан һуң уның милке закон буйынса мираҫсыларға күсә. РФ Гражданлыҡ кодексының 1141-се статьяһының 1 пунктында билдәләнеүенсә, закон буйынса мираҫсылар сират тәртибендә саҡырыла. Ошо Кодекстың 1142-се статьяһының 1-се пунктына ярашлы, закон буйынса төүге сираттағы мираҫсылар тип мираҫсының балалары, ире йә ҡатыны һәм ата-әсәһе иҫәпләнә. Шул уҡ ваҡытта РФ Ғаилә кодексының 10-сы статьяһы буйынса ир менән ҡатындың хоҡуҡ һәм бурыстары уларҙың гражданлыҡ хәле акттарын яҙыу органдарында никахтарын дәүләт теркәүе үткәрелгән көндән ғәмәлгә инә. Шулай итеп, теркәлмәгән никахта йәшәүсе бер ниндәй хоҡуҡҡа, шул иҫәптән мираҫҡа хоҡуҡҡа ла, эйә түгел.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА әҙерләнe.**

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



### Бауырҙа ҡорт булһа...

❖ 150 грамм ҡайын бөрөһө, 300 грамм шәкәр ҡомо, 1 стакан ваҡлап туралған алоэ, 0,75 литр кагор кәрәк. Ҡайын бөрөһө, шәкәр ҡомо һәм алоэны бергә ҡушып, 4 тәүлеккә һалҡын урынға ҡуйырға. Таҙа эмаль һауытта кагорҙы ҡайнатып сығарырға, һалҡында торған ҡатнашмаға ҡушырға һәм утта 30 минут төнәтергә. Һыуынғас, һөҙөргә, бөтөн масса 0,75 литр килеп сығырға тейеш. Ашар алдынан 15 минут алда көнөнә 3 мәртәбә 20-шәр тамсы эсергә. Ныҡлап йүнәлеү өсөн был дауаны ике шешә күләмендә эсеп бөтөргә.

### Беренсе ярҙам

Берәй еренде бәреп ауырттырһаң, юл япрағын, меньяпраҡты, һары мәтрүшкәне, сельдерейҙы иҙгеләп, сепрәккә төрөп, ауыртҡан ергә ябып бәйләргә. Бәйләгән үләндәр кипһә, яңыһын эшләп ҡуйырға. Күҙҙәр ауыртһа, кәбеҫтә һәм сливаның йомшаҡ япраҡтарын бәйләргә. Шулай уҡ сей картуф, алма һәм ҡыярҙы ҡырғыстан үткәреп, күҙҙәргә ябырға. Муйынға дымлы сепрәк ҡуйыу ҙа файҙалы.

### Температура күтәрелһә...

200 мл һыуға 1 балғалаҡ (10 грамм) әнис (укроп) үләнен йәки уның орлоғон һалып төнәтергә һәм бүлмә температураһындағы һыуға ҡушып, көнөнә 3 мәртәбә эсергә.

### Ҡышҡы оҙон төндәрҙә...

Төндәр оҙайҙы, әгәр ҙә был осорҙа йоҡлай алмай интекһегеҙ, ятырҙан 1 сәғәт алда 1 стакан ҡайнар һөт йәки ҡайнаған һыуға бал болғап эсергә кәрәк. Бал оло кеше тәнендә кәмегән микроэлементтарҙы тейешле кимәлдә тоторға ярҙам итә. Йоҡо булмаһынан бер мөйөшөнә валериан үләненең һабаҡтарын элеп ҡуйыу ҙа яҡшы. Аптека ромашкаһынан, гөлйемештең таж япраҡтарынан яһалған мендәрҙе файҙаланырға була.

### Ангинанан миләүшә

25 грамм миләүшә сәскәһен бер стакан 40 процентлы спиртҡа һалып, 2 аҙна ҡараңғы урында төнәтәләр. Ауыҙ-танау ҡыуышлығын 1 стакан һыуға 2 балғалаҡ төнәтмә ҡушып сайҡатырға. Көнөнә ике тапҡыр - иртәнсәк ашағандан һуң һәм кис йоҡлар алдынан дауаны ҡабатлау яҡшы һөҙөмтә бирә.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

✓ *Ҡатын хаҡы һаҡланһа, ғаилә хөрмәте лә һаҡланыр, ҡатыны ла шат һәм сәләмәт булыр. "Ҡатынының намыҫлы булыуын теләгән ир иң элек үҙе намыҫлы булһын" тигән мәҡәл - ғәйәт дөрөҫтөр.*






# ИРҘӘРҘЕҢ БУРЫСЫ...

## яҡшы мөғәмәләлер

**Кешеләр менән гүзәл мөғәмәләлә булыу - Ислам шәриғәтенең беренсе ҡағиҙәһе булһа, гүзәл мөғәмәләрҙең иң кәрәкле булған өлөшө - ҡатын менән буласаҡ мөғәмәләлер.**

Ҡатындар Исламда ғәҙәттән тыш хөрмәтле заттар булып, ҡатындарҙы ололаған ирҙәр ҙә иң хөрмәтле булған ирҙәрҙер. Шуның өсөн һәр мосолман ире ҡатынын ауырлыҡтарҙан хәленән килгәнсе һаҡларға, уға ҡарата мәрхәмәтле булырға бурыслылыр. Бындай мөғәмәләлә булған ирҙең донъяһы ла төҙөк, тормошо ла тыныс булыр.

Ҡатын менән мөғәмәлә самаһыҙ дәрәжәлә түгел, бәлки, ғәҙеллеккә нигеҙләнгән булырға тейештер. Тәрбиәле ир ҡатынына ҡарата хөрмәтле мөғәмәләлә булған кеүек, үҙ ғорурлығын да һаҡлар, йәғни, үҙен дә хөрмәт итер һәм үҙен дә хөрмәт иттерә белер. Эштәрен уның менән кәңәшләшеп эшләр, ҡайҙалыр киткәнендә рөхсәт һорау ниәте менән түгел, бәлки, белдереү ниәте менән барасаҡ урыны тураһында хәбәр итер. Иренең кәңәш һәм белдереүенә ғәҙәтләнгән ҡатын иренең ышаныслы икәнен белеп тынысланыр, һөҙөмтәлә, үҙе лә уға барыһын да һөйләп бирергә ғәҙәтләнер. Ҡатындар аҡылһыҙ һәм кәңәшкә лайыҡ түгел, тип уйламағыҙ. Шундай ҡатындар булыр, әгәр ҙә аҡылдары үлсәүгә һалынһа, йөҙҙәрсә ирҙәрҙең аҡылдарынан өҫтөн сығыр. Шуның менән бергә, әгәр ҙә ҡатын тарафынан бирелгән фекер дөрөҫ тип табылмаһа, ир, яраҡлы дәлил килтереп, уның дөрөҫ түгел икәнлеген иҫбат итергә тейеш булыр.

Иренең шәфҡәт ҡанаты аҫтында булғанлығын белгән ҡатын һәр бер дөрөҫ фекерен иренә бағышлар, һәр ваҡыт уның ризалығына өлгәшер өсөн тырышыр, ата-әсәһе һәм ҡәрҙәштәренән артыҡ уны һөйөр, уның аҡыл менән беркетелгән шәфҡәтенә хайран ҡалыр, үҙе булмағанда уның хеҙмәтен йәненә бәхет тип белер. Донъяла бынан да артыҡ рәхәт булырмы?

Ир кеше ҡатынына үҙенең ниндәй нәмәләрҙе үҙһенеүе, ниндәй нәмәләрҙән нәфрәтләнеүе, замандың ниндәй юлдан барыуы һәм балаларҙы нисек тәрбиәләү тейеш икәнлеге хаҡында, шулай уҡ дуҫтар һәм белештәр, дошмандарҙың хәлдәре һәм тормошта кәрәк булған ғөрөф-ғәҙәттәр хаҡында мәғлүмәтте һәм фекерҙе белдереп торорға тейеш. Былай итеү - ҡатындарҙы яңылышыуҙарҙан һаҡлауға сәбәп булыр. Ләкин әҙәм балаһы онотоу һәм хата эшләүҙән арына алмағанлыҡтан, ирҙәр ҙә, ҡатындар ҙа хата ғәмәл башҡарыуы ихтимал. Бындай хаталар, әгәр ҙә шәриғәткә ҡаршы булмаһа, ғәфү ителергә лайыҡ булыр. Әгәр ҙә ҡатын, шәриғәт риза булмаясаҡ яңылыш эш күрһәтһә һәм дә быны үҙе теләп эшләһә, ул ваҡытта йомшаҡлыҡ күрһәтеүгә рөхсәт ителмәй. Был осраҡта ир уның әлеге ғәмәленең ғәйеп икәнлеген аңлатыр.

Ҡатындар, ирҙәре тарафынан һәр ваҡыт хөрмәт күрергә хаҡлы булһалар ҙа, йөклө ваҡыттарында һәм йәш балалары булғанда тағы ла нығыраҡ хөрмәт күрергә лайыҡ булырҙар. Был көндәр - ҡатындар өсөн мәшәҡәтле һәм ауыр көндәр.

Ҡатын хаҡы һаҡланһа, ғаилә хөрмәте лә һаҡланыр, ҡатыны ла шат һәм сәләмәт булыр. "Ҡатынының намыҫлы булыуын теләгән ир иң элек үҙе намыҫлы булһын" тигән мәҡәл - ғәйәт дөрөҫтөр.

*АТА-ӘСӘЛӘР ЙЫЙЫЛЫШЫ*



**Ғәжәйеп шәп тиҙлек менән барған заманда йәшәйбеҙ. Заман арбаһынан төшөп ҡалмаҫ өсөн йәнтәслим тырышабыҙ. Күҙ менән ҡаш араһында елпелдәп үтеп киткән ғәҙәти көндәр, көйөслө вә һөйөнөслө ваҡиғалар ғүмер китабына саҡ-саҡ эләгеп теркәлеп бара. Хеҙмәтебеҙ, эшебеҙ, көндәлек ығы-зығы, өй мәшәҡәттәре менән ғүмер осоп үтә. Ошо арауыҡта балаларыбыҙға матур тәрбиә лә биреп өлгөрәһе бар. Үҙ балаларын һирәк-һаяҡ ҡына ауыл тирәһенә килеп сыҡҡан циркка, район мәҙәниәт йортонда уҙғарылған кисәләргә, музейға алып барыусы йәш ата-әсәләрҙе күреп күңел ҡыуана. Ҡайһы берәүҙәрҙең баш ҡалабыҙ Өфөгә, йә башҡа тарафтарға луна-парк, күҙәтеү тәгәрмәсенә, театрҙарға алып барыуын ишетеп, икеләтә шатлыҡ кисерәһең. Афарин!**



# ЗИРӘКТӘРҘЕ ОСРАТЫҒЫҘ,

## улар китапханаларҙа

Әммә балаларҙы ылыҡтырыр бер изге урын тураһында онотабыҙ. Был - китапхана. Ә бит халҡыбыҙҙың тарихы, әҙәбиәте, мәҙәниәте, сәнғәте, ауыҙ-тел ижады, ғөрөф-ғәҙәттәре - барыһы ла китапхана кәштәләрендә һаҡлана. Күренекле башҡорт ғалимы, аҡыл эйәһе, яҙыусы **Ризаитдин Фәхретдин** былай тип яҙған: **"Матур китаптар - ғәжәйеп нәмәләр күренәсәк көҙгө, аулаҡтағы серҙәш, яңғыҙлыҡта иптәш, көсһөҙлөктә ярҙамсы, хәсрәттәрҙә шатлыҡ килтереүсе, фекерҙәрҙе нурландырыусы, үткән замандарҙың хәлдәрен һөйләп тороусы, тарихты хикәйәт итеүсе, аҡыллы кешеләрҙең аҡылдарын күҙгә күрһәтеүсе, хаҡы арзан, файҙаһы күп нәмә... Китаптарҙан айырылмағыҙ".**

Тимәк, балаларыбыҙҙың ғүмере йәмле, яҙмышы ғәмле булһын өсөн уларҙа китапҡа һөйөү, ынтылыш тәрбиәләргә кәрәк. Изге китап Ҡөрьәндә "Бөйөктәр менән бергә ултырышығыҙ, ғалимдарға һорауҙар бирегеҙ, зирәктәрҙе осратығыҙ", - тип яҙылған. Ә уларҙы ҡайҙа осратаһың? Әлбиттә, китапханала.

Быйыл республикабыҙҙың Милли китапханаһы үҙенең матур юбилейын ҡаршылай. Арҙаҡлы шәхесебеҙ Әхмәтзәки Вәлиди исемен йөрөткән китапханабыҙҙың ойошторолоуына 175 йыл тула. Изге китап йортоноң тарихи үткәне ил тарихы, халыҡ яҙмышы менән тығыҙ бәйләнгән. Башҡортостанға тәүге китаптар Ислам дине менән бергә килеп инә. Мосолман миссионерҙары Ғәрәбстандан, Персиянан, Урта Азиянан һ.б. тарафтарҙан дини китаптар алып килә. Шуға ла мәсеттәр китаптар һаҡланған беренсе ғилем усағы булып һанала. Халҡыбыҙ элек-электән китап ҡәҙерен белгән, белемгә ынтылған. 1574 йылда Ағиҙел йылғаһы буйында ҙур булмаған ҡәлғә төҙөлә, уға Өфө исеме бирелә. Тиҙ арала үҫеш алып, ҡала статусын ала. Ҡалала йәшәүсе халыҡтың белемгә ынтылышын иҫәпкә алып, хөкүмәттең һәр губерна ҡалаһында китапхана асыу тураһындағы ҡарарына ярашлы, 1836 йылдың 25 мартында Өфө ҡалаһында 1-се дәүләт китапханаһы асыла. 1921 йылда БАССР-ҙың үҙәк фәнни китапханаһы булараҡ танылып, һуңынан республика китапханалары өсөн белешмә-библиографик һәм методик үҙәк була ул. 1933 йылда китапхана составына Үҙәк мосолман китапханаһы, 1936 йылда М. Горький исемендәге Үҙәк дөйөм китапхана ҡушыла. Шул уҡ йылда БАССР-ҙың Республика китапханаһы статусын ала. 1960 йылда Н. Крупская исеме бирелә. Ә 1992 йылдан инде Милли китапханыбыҙ Әхмәтзәки Вәлиди исемен йөрөтә.

Китапхана Башҡортостанда һәм Рәсәйҙә баҫылып сыҡҡан барлыҡ баҫмаларҙың мотлаҡ бер данаһын алдырып бара. Был изге китап йорто фондында башҡорт, урыҫ, татар, ғәрәп, төрки, инглиз, немец, француз һ.б. телдәрҙәге барлыҡ ғилем тармаҡтары буйынса 3 миллиондан ашыу китап иҫәпләнә. Һирәк осрай торған китаптар бүлегендә философия, логика, халыҡ медицинаһы, хоҡуҡ, тел ғилеме буйынса 15-16 быуаттар ҡулъяҙма китаптары (200-ҙән ашыу); урыҫ яҙыусыларының тәүге һәм үҙҙәре иҫән саҡта баҫылған әҫәрҙәре; Н.К. Блохин, А.Ф. Смирдин, Аксаков китапханаларынан алынған автографлы, экслибрислы китаптар; көнсығыш яҙыусыларының 18-19 быуаттарҙа баҫылған әҫәрҙәре; 19 быуатта Башҡортостанда нәшер ителгән белешмә әҙәбиәт, гәзит һәм китаптар бар. Китапхана йылына 75 меңдән артыҡ китап уҡыусыны хеҙмәтләндерә. 600-ҙән ашыу гәзит һәм журнал алдыра. Шулай уҡ китапхананың белешмә-библиографик бүлеге республикабыҙ тарихы, иҡтисады, мәҙәниәте, айырым яҙыусылар һәм ғалимдар ижады буйынса, ҡалалар һәм райондар, айырым хужалыҡтар тураһында күрһәткестәр һәм белешмәләр төҙөй һәм баҫтырып сығара.

Китапхана республикалағы китапханалар фондын китаптар менән тулыландырыу, милли каталогтар йыйылмаһы һәм милли библиография, шулай уҡ республика китапханалар автоматлаштырылған белешмәләр системаһы булдырыу эшен алып бара. Бөйөк ғалимыбыҙ исемен йөрөткән китапхана ла "Башҡорт халыҡ хәтере" программаһына ярашлы, иң уҡымлы, һирәк осраусы һәм фундаменталь китаптар электрон вариантҡа күсерелә. Башҡортостан китапханалары буйлап виртуаль китап күргәҙмәләре ойошторола. Был китапты, китап авторын рекламалау, китапты уҡыусыға заманса саралар ярҙамында яҡынайтыу маҡсатында эшләнә.

Эйе, беҙҙең балалар китапханаларға йөрөй. Әммә ата-әсә балаларының тәүге тапҡыр китапханаға аяҡ баҫыуын байрамға әйләндерһә, һәр китапта асылған мөғжизәне уртаҡлашһа, бала китаптан бер ҡасан да айырылмаясаҡ. Фекерләү ҡеүәһе киң, күңеле матурлыҡҡа, изгелеккә тартылыусан, ололар әйтмешләй, "өнө асыҡ" буласаҡ. Ә инде башҡалабыҙ Өфөләге милләтебеҙҙең рухи байлығын һаҡлаған Милли китапханаға инеп күреп, танышып сыҡһалар, онотолмаҫ тәьҫораттар алыр ине балаларыбыҙ. Киләсәгебеҙ ҡыйыу, сая фекерле, тарихыбыҙға, сәнғәтебеҙгә, әҙәбиәтебеҙгә битараф булмаған йәш быуында. Ә уларҙы тәрбиәләр изге ҡәғбәбеҙ - ғаилә һәм китап. Шуны онотмайыҡ.

**Нурия ҠУНЫСБАЕВА.**

*✓ Уға Аллаһы Тәғәлә һәләтте ҡуш ҡуллап биргәйне. Һәләтле кешенең эшләгән эштәрендә бүтәндәрҙеке менән бутамаҫлыҡ шәхси һәләтте күрергә була. Ринат Йосоповтың эштәрендә лә шуны күрәбеҙ.*



КҮҢЕЛ МӨҺӨРӨ

# УНЫҢ ЮҠЛЫҒЫ...

## фән өсөн дә оло юғалтыу



**Ошо көндәрҙә Өфөлә күренекле башҡорт ғалимы Ринат Йосоповҡа бағышланған "Йосопов уҡыуҙары" Халыҡ-ара ғилми конференция уҙғарылды. Унда мәрхүмде яҡшы белеп, уның менән аралашып йәшәгән Рәсәйҙең, Ҡаҙағстандың, Венгрияның һәм башҡа илдәрҙең күренекле ғалимдары ҡатнашты.**

Башҡорт ғалимы Ринат Йосоповтың баһаһы, ҡәҙере тағы ла нығыраҡ беленде, уның юҡлығы тағы ла нығыраҡ үкендерҙе, тигән дөйөм һығымта яһап була ҡунаҡтарҙың да, үҙебеҙҙең ғалимдарҙың да сығыштарынан һуң. Мәскәү ғалимәһе билдәле антрополог Надежда Дубова: " Ринат Йосоповты тик башҡорт тарихын өйрәнеүсе булараҡ ҡына ҡарарға кәрәкмәй, сөнки ул үҙенең асыштары менән донъя кимәлендәге дөйөм антропология фәне үҫешенә үҙ өлөшөн индергән кеше. Ринат Йосопов кешене өйрәнеүсе Рәсәй ғалимдарының иң күренеклеләренең береһе ине һәм уның беҙҙең аранан иртә китеүе бөтәбеҙ өсөн дә оло юғалтыу", - тип, башҡорт ғалимының фәнгә индергән тос өлөшөн юғары баһалап, мәрхүм иҫтәлегенә оло ихтирамын белдерҙе.

Венгриянан килгән мадъяр антропологы Андрош Биро Ринат Йосопов менән бик күп йылдар дуҫтарса аралашып, фекер алышып йәшәгән кеше. Ул үҙенең сығышында ғалим яһаған фәнни асыштарҙың башҡорттар өсөн генә түгел, ә мадъярҙар тарихын өйрәнгәндә лә мөһим булыуы, мадъяр ғалимдарының Ринат Йосоповҡа ихтирамлы булыуы тураһында һөйләне.

Ринат Йосопов Петербургта аспирантурала уҡығанда уның менән дуҫлашып, аҙаҡтан гел аралашып йәшәгән Петербург ғалимы В.И. Хартанович та конференцияла үҙенең иҫтәлектәре менән уртаҡлашты. Был ғалим мәрхүм менән бәйле төрлө ваҡиғаларға туҡталып китте: "Минең хәтеремдә Ринат һоҡланғыс кеше, дуҫ һәм ғорур, сәмле башҡорт булараҡ һаҡлана. Ринат үҙ халҡының тарихын яҡшы белә ине һәм уның менән хаҡлы ғорурланды. Үҙе лә халҡы намыҫына тап төшөрмәҫкә тырышты", - тип, Ринат Йосоповтың аспирант сағында гер күтәреү ярышында төрлө өлкәләрҙән килгән, үҙенән күпкә ҡалынраҡ кәүҙәле аспирант егеттәрҙе артта ҡалдырып, уҙып китеп, бөтәһен дә аптыратҡанын, һоҡландырғанын иҫкә төшөрҙө.

Эйе, Ринат Йосоповтың антропология өлкәһендәге хеҙмәттәре уның Башҡортостан һәм Рәсәй фәнендә генә түгел, ғөмүмән, донъя кимәлендәге ғалим икәнлеген күрһәтә. Фәндә оҙаҡ йылдар уңышлы эшләп, башҡорт халҡы тарихы буйынса бик бай материал туплап, һуңғы йылдарҙа ул антропология өлкәһенән тыш, этнологияла теоретик һығымталар яһай алырлыҡ бейеклектәргә күтәрелгәйне. Һәм был өлкәләге хеҙмәттәрен фәнни даирә ҡыҙыҡһынып, яҡшы ҡабул итте, тип әйтергә була.

Минең уйымса, Ринат Йосоповтың шәхси сифаттары һәм тәүге төп һөнәре буйынса медик булыуы уның фән юлындағы уңыштарын билдәләгәндер. Медицина институтында тик яҡшы билдәләргә генә уҡып, медик һөнәрен ныҡлап үҙләштергән Ринат Йосопов кеше һөйәктәренә ҡарап, уның тән төҙөлөшөн генә түгел, хатта уның ниндәй сирҙәр менән яфаланғанын, был донъяла күпме ғүмер кисергәнен дә билдәләй ала ине. Ә бындай нескәлектәр тарихсы өсөн, ғөмүмән, ябыҡ, билдәһеҙ өлкә. Антропология, билдәле булыуынса, кеше организмының төҙөлөшөнән, уның үҙенсәлектәренән сығып, халыҡтарҙың формалашыуын өйрәнеүсе фән. Медик булараҡ, Ринат Йосопов антропологияның дерматоглифика, генетика һәм башҡа өлкәләрендә лә яҡшы хәбәрҙар ине. Уның башҡорт халҡының формалашыуын өйрәнеүгә индергән өлөшө баһалап бөткөһеҙ. Әгәр ҙә уның Аллаһы Тәғәләнән килгән һәләте булмаһа, әлбиттә, медик булыу ғына үҙенән-үҙе уңыш килтермәҫ ине. Уға Аллаһы Тәғәлә һәләтте ҡуш ҡуллап биргәйне. Һәләтле кешенең эшләгән эштәрендә бүтәндәрҙеке менән бутамаҫлыҡ, уларҙыҡына оҡшамаған шәхси һәләтте, шәхси эҙҙе, юлды күрергә була. Ринат Йосоповтың эштәрендә лә шуны күрәбеҙ. Шуға беҙ башҡорттар Ринат Йосопов тигән ғалимыбыҙ булыу менән үтә лә уңдыҡ.

Ринат тик кабинетта ғына ултырып эшләгән ғалим түгел ине. Ул археологтарҙың һәм этнографтарҙың бик күп ялан экспедицияларында әүҙем ҡатнашып, уларҙың һөҙөмтәләренә үҙенең тос өлөшөн индергән кеше. Дөрөҫөн әйткәндә, Ринаттың ҡатнашлығы был экспедицияларға һәм уның һөҙөмтәләренә ныҡ тәьҫир итә ине. Шуға күрә этнографтар ҙа, археологтар ҙа уны һәр саҡ үҙ экспедицияларында күрергә теләй ине. Һуңғы йылдарҙа бындай экспедицияларҙа уның менән бергә миңә лә йөрөргә насип булды. Дөрөҫөн әйтергә кәрәк, ошо экспедициялар кемдең кем икәнен ап-асыҡ күрһәтә. Ҡайһы берәүҙәр менән экспедицияла йөрөү бик ҡыйын, яфаға әүерелә. Ә Ринат Йосоповтың ҡатнашлығы иһә экспедицияларға йәм өҫтәр ине. Кисен усаҡ янында һөйләшеп ултырыуҙарҙа Ринат һәр саҡ уртала булды. Уның гитараға ҡушылып матур моңло тауыш менән йырлауы әле лә ҡолаҡта. Хәҙер инде был матур мәлдәр хәтерләргә генә ҡалды...

**Закирйән ӘМИНЕВ.**

БЕҘҘЕ ЯРАТҠАН ДУҪТАР



**БДУ уҡытыусыһы, профессор, филология фәндәре докторы Ғиниәт Сафиулла улы Ҡунафинды талапсан уҡытыусы итеп беләләр. Ул үҙенең архивтарҙа соҡоноп, башҡорт әҙәбиәте, фәне, мәҙәниәтендә йондоҙ булып балҡыған билдәле шәхестәрҙең ижады тураһындағы белемен тамсыһына тиклем студенттарға бирергә тырыша. Уҡытыусы өсөн иң мөһиме - йәштәр предметты ишетеп түгел, ә тәүсығанаҡты уҡып белһен. Был йәһәттән ғалим үҙ фәнен уҡытыу буйынса бөтөн методик эшләнмәләрҙе һәм әсбаптарҙы үҙе әҙерләгән һәм эшләгән. Уның авторлығындағы китаптар бөгөн студенттар араһында ла, башҡорт теле уҡытыусылары араһында ла ҙур һорау менән файҙалана.Шулай ҙа туғандары, коллегалары, элекке уҡыусылары өсөн ниндәйерәк шәхес икән ошо көндәрҙә үҙенең сираттағы юбилейын билдәләүсе Ғиниәт Сафиулла улы Ҡунафин?**

# ПЕДАГОГ, ҒАЛИМ, ТӘРБИӘСЕ

**Тимерғәле КИЛМӨХӘМӘТОВ, БДУ-ның журналистика кафедраһы мөдире:** Ғиниәт Ҡунафин бер нисә йөктө тартыусы шәхес. Берҙән, ул педагог, вуз уҡытыусыһы, икенсенән ғалим, өсөнсөнән, йәмәғәт эшмәкәре. Шуларҙың бөтәһен бер юлы уңышлы тартып алып бара ул. Оҙаҡ йылдар факультеттың деканы булды. Ошо арауыҡта йәш факультеттың уҡыу планын эшләү, юғары квалификациялы кадрҙар менән тәьмин итеү кеүек ойоштороу эштәрен атҡарып сыҡты.

Ғиниәт Сафиулла улының башҡа ғалимдарҙа күренмәгән бер матур сифаты - ул фәндә үҙенә ауыр фронтты - боронғо башҡорт әҙәбиәтенән башлап 1917 йылға тиклемге башҡорт әҙәбиәте тарихын өйрәнеүҙе алды. Был бик ауыр арауыҡ, сөнки төрлө архивтарҙа ятҡан ҡулъяҙма материалдарҙы ҡарау, уларҙы уҡыу ғына ла ҙур эш. Шулар нигеҙендә ул студенттарға белем биреүҙең программаһын төҙөнө.

Фән кандидаттарын, фән докторҙарын үҫтереүҙә лә уның өлөшө тос. Факультеттың кандидатлыҡ һәм докторантлыҡ яҡлау комиссияһы ағзаһы һәм комиссия эшендә даими ҡатнаша. Педагог булараҡ, студенттарға төплө белем биреү маҡсатында уларҙан тәртип тә талап итә. Уҡырға ингәнһең икән - уҡырға тейешһең, тигән принципты дөрөҫ ҡуя. Принципиаль уҡытыусы. Студенттарына ғына түгел, ҡәләмдәштәренә лә, кафедра мөдире булараҡ, ҡул аҫтында эшләүселәргә лә принципиаль. Тураһын әйтергә баҙнат иткән кеше ул.

**Зәки Әлибаев, БДУ-ның башҡорт әҙәбиәте һәм фольклоры кафедраһы доценты:** Ғиниәт Ҡунафин әҙәбиәт ғилемендә тотош бер йүнәлешкә нигеҙ һалыусы ғалимдарҙың береһе. Тап уның эшмәкәрлеге аша XIX быуаттың рухи мираҫын үҙебеҙҙең халыҡҡа кире ҡайтарып бирҙек. М. Аҡмулла, М. Өмөтбаев һәм башҡаларҙың әҙәби мираҫы тулыһынса өйрәнелде, тиһәң дә хата булмаҫ. Әлеге көндә лә ғалим әҙәбиәт тарихы, теорияһы, текстология буйынса ең һыҙғанып эшләй. Улай ғына түгел, ул үҙенең был йүнәлештә байтаҡ аспиранттары, докторанттары менән эш алып бара. Тағы ла Башҡортостанда тәүгеләрҙән булып башҡорт филологияһы буйынса факультет ойоштороу, уны етәкләү Ғиниәт Сафиулла улы иңенә төштө. Был эштәрҙе лә ысын ир-егеттәрсә атҡарып сыҡты. Әгәр ҙә быларға уның йәмәғәт эшмәкәрлеген дә өҫтәһәң, ғалимдың тулы портреты барлыҡҡа килер ине.

**Кәримә Усманова, БДУ-ның башҡорт филологияһы факультетын 1994 йылда тамамлаусы, Сибай ҡалаһы:** Әле булһа Ғиниәт Ҡунафиндың лекцияларын һағынып иҫкә алам. Үҙ фәненә ҡарата ҡыҙыҡһыныу уята алған, лекциялары аша студенттар күңеленә Ҡол Ғәли, Әбелманих Ҡарғалы, Шәмсетдин Зәки, Баһауи, Аҡмулла, Р. Фәхретдинов һәм М. Өмөтбаевтарҙың ижадына һөйөү тәрбиәләгән, үҙенең киң эрудициялы һәм фәлсәфәүи фекерле булыуы менән күп студенттарҙың ихтирамын яулаған уҡытыусыларының береһе ул. Уның практик дәрестәренә әҙерләнеп килә инек, сөнки ул уларҙы һәр саҡ яҙма рәүештә талап итте. БДУ-ны тамамлауға әллә күпме йылдар үтһә лә, миндә Ғиниәт Сафиулла улының лекциялары әле лә һаҡлана. Был үҙе үк уның дәрестәренә ҡарата һөйөүҙе раҫлай. Ғәҙел, талапсан һәм үҙ фәнен төплө белгән уҡытыусыбыҙға артабан да уңыштар, сәләмәтлек, ижади үрҙәр теләйем.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ яҙып алды.**

**Һәр үҫештең һәм үҙгәрештең, эволюцияның һәм революцияның объектив һәм субъектив факторҙары була. Ижтимағи ҡоролош үҫешендә йә үҙгәрешендә тарихи ситуацияны, халыҡ-ара сәйәси хәлде беҙ объектив факторҙар тип атаһаҡ, үҫеште йә үҙгәреште, эволюцияны йә революцияны тәьмин итерлек көстөң бының өсөн әҙер булыуын субъектив факторға индерәбеҙ. Ә инде ошо уҡ проблеманы милләт үҫеше сиктәрендә ҡараһаҡ, объектив факторға донъялағы, илдәге ижтимағи-сәйәси хәлдәрҙе, милләт һәм дәүләт-ара мөнәсәбәтте индерер инек, ә субъектив факторға килгәндә, быныһы инде милләттең үҙенең йәшәү һәләтенә, заманға яраҡлаша белеүенә бәйле күренеш, әйтәйек, һәр милләт үҙенең үҫешен тәьмин итер өсөн дәүләтте барлыҡҡа килтерә. Ошондай һүҙ башының сәбәбе шунда: беҙҙең был һандағы "Диалог" рубрикаһында "Башҡортостан умартасылыҡ һәм апитерапия ғилми- тикшеренеү үҙәге" дәүләт учреждениеһы генераль директоры, биология фәндәре докторы, профессор Әмир ИШЕМҒОЛОВ менән БДУ эргәһендәге хоҡуҡ колледжы директоры, сәйәсәт фәндәре кандидаты Әхтәр БОҪҠОНОВ ил, дәүләт һәм милләт үҫешенең объектив һәм субъектив сәбәптәре хаҡында фекер йөрөтә.**

# ЮЛБАШСЫЛАР ДӘҮЛӘТ

## халыҡ өсөн дә

**▸ Әмир Миңлеәхмәт улы, һеҙ беҙҙең гәзиттә яһаған бер сығышығыҙҙа бал ҡорто күсенең йәшәү рәүеше милләт, дәүләт өсөн милли идея булырлыҡ, тигән бик ҡыҙыҡлы фекер әйткәйнегеҙ. Ә, Әхтәр Мөхәмәт улы, һеҙҙең быйыл донъя күргән милләт үҫешен дәүләт контексында ҡараған китабығыҙ "Боронғо дәүерҙән башлап XX быуат башына тиклем башҡорт ижтимағи-сәйәси фекер тарихы" тип атала. Беҙҙеңсә, һеҙ икегеҙ ҙә милләт, ил, дәүләт үҫешенең субъектив һәм объектив факторҙарын ошондай фекерләүегеҙ менән аңларға һәм аңлатырға тырышаһығыҙ. Шулай түгелме? Ғөмүмән, әйтелгәндәргә өҫтәп, тағы ла ниндәй дәлилдәр килтерер инегеҙ?**

**Ә. ИШЕМҒОЛОВ:** Ысынлап та, бал ҡорто күсенең йәшәү рәүеше кешелек, ил, дәүләт һәм милләт өсөн милли идея булырлыҡ. Элекке фекеремдә ҡалам, уларҙы артабан нығытыу өсөн тағы ла бер нисә дәлилемде өҫтәй алам. Миҫалға барыбыҙҙы ла борсоған коррупцияны алайыҡ. Коррупция бөгөн Рәсәй дәүләтенең бәкәленә һуҡҡан күренеш булып тора. Владимир Жириновский коррупцияға ҡаршы көрәште ҡайһы бер чиновниктарҙы эштән бушатыу, төрмәгә ултыртыу рәүешендә күрә. Әммә быдай сараларҙың башҡа проблемалар тыуҙырғанын да беләбеҙ.

Ҡасандыр беҙҙең халыҡта ишеккә йоҙаҡ һалыу булмаған. Иркен йәйләүҙәрҙә көн иткәнбеҙ. Халҡыбыҙҙың асыҡлығы ла уның көнитмешенә бәйле булған. Башҡа халыҡтар менән ҡарымта, барымталарҙы иҫәпкә алмағанда, урлашыуҙар бөтөнләй булмаған тиерлек. Асыҡ өйлө, асыҡ йөҙлө, ҡунаҡсыл булғанбыҙ, коррупция шуның өсөн дә беҙгә ят күренеш. Ошо тәңгәлдә башҡорт тоҡомло бал ҡорттарының тормошона күҙ һалайыҡ. Әйткәндәй, башҡорт тоҡомло бал ҡорто үҙенә исем биргән халыҡтың менталитетына яҡын тора. Кавказ, себер, итальян тоҡомло ҡорттарҙан айырмалы рәүештә, башҡорт тоҡомло бал ҡорто сит ояға инеп бал урламай. Ә башҡа тоҡомға ҡараған ҡорттарҙың бер күсе ауылға килеп индеме, беҙҙең ҡорт ояларына һөжүмдәр башлана. Шуның өсөн дә беҙ башҡорт тоҡомло ҡорт ояларын уларҙан йәшерә һалабыҙ. Үкенескә ҡаршы, бал ҡорто тормошо менән үҙебеҙҙеке бермә-бер тап килә.

**Ә.БОҪҠОНОВ:** Бал ҡорттарын йәшереп һаҡлап ҡалып булһа ла, халыҡты интеграциянан һәм глобалләшеүҙән йәшереп һаҡлап булмаясаҡ. Шуға күрә беҙҙә бөгөн шундай мәсьәлә-һорау бер туҡтауһыҙ борсорға тейеш: XXI быуатта халыҡты халыҡ булараҡ һаҡлауҙың ниндәй механизмдары булырға тейеш? Ә бына 1917 йылға тиклем төрлө губерналарҙа йәшәгән халҡыбыҙ үҙен һаҡлаған бит. Әле бына Әмир ағайҙың килтергән дәлилдәренән сығып шуны әйтергә була: башҡорт - диаспорала йәшәй торған халыҡ түгел. Беҙҙең халыҡ йәшәгән еренән сығып китһә, юғалыуға еңелерәк дусар ителә. Сөнки беҙҙең менталитетҡа, бал ҡорттары һымаҡ, күстә берҙәм булып йәшәү механизмы һалынған. Күп халыҡтарҙа үҙ-үҙен танып белеү дин менән бергә бара, ҡайһы бер халыҡтар дәүләтселек юлы менән берләшә, беҙҙең халыҡтың үҙ-үҙен таныуы Уралына, туған моңона, ҡурайына, бейеүенә һәм мәҙәниәтенә бәйле. Беҙҙә ватансылыҡ тойғоһо көслө. Баҡтиһәң, Мәскәү ҡалаһының 4 кенә процент үҫмерҙәре әрмелә хеҙмәт итә. Уларҙың ата-әсәләре "Рәсәй, ватан" тип яу һала-һалыуға, әммә уларҙың балалары шул ватанды һаҡларға теләмәй. Ә беҙҙең башҡорт егеттәре өсөн әрмегә бармау һаман да ғәрлек һанала. Шулай булғас, дәүләтселек, ватансылыҡ тойғоһо кемдә көслөрәк һуң? Тарихи күҙлектән ҡарағанда ла, башҡорт бер ваҡытта ла ҡол булмаған, ә урыҫтар крепостной булған. Күптәр Рус батшалығын урыҫ халҡының дәүләтселеге тип яңылыша. Рәсәй - ул батша власы. Ә башҡорт донъяһындағы үҙидара бөтөн халыҡтыҡы булған. Әмир ағай әйткән күстә лә шул уҡ хәл күҙәтелә, йәғни ҙур илдең байлығына бөтөн күс хужа һәм унда һәр кемдең үҙ урыны бар.



**Асыҡ өйлө, асыҡ йөҙлө, ҡунаҡсыл булғанбыҙ, коррупция шуның өсөн дә беҙгә ят күренеш. Ошо тәңгәлдә башҡорт тоҡомло бал ҡорттарының тормошона күҙ һалайыҡ. Әйткәндәй, башҡорт тоҡомло бал ҡорто үҙенә исем биргән халыҡтың менталитетына яҡын тора. Кавказ, себер, итальян тоҡомло ҡорттарҙан айырмалы рәүештә, башҡорт тоҡомло бал ҡорто сит ояға инеп бал урламай. Ә башҡа тоҡомға ҡараған ҡорттарҙың бер күсе ауылға килеп индеме, беҙҙең ҡорт ояларына һөжүмдәр башлана. Шуның өсөн дә беҙ башҡорт тоҡомло ҡорт ояларын уларҙан йәшерә һалабыҙ. Үкенескә ҡаршы, бал ҡорто тормошо менән үҙебеҙҙеке бермә-бер тап килә.**

**Ә. ИШЕМҒОЛОВ:** Рәсәй Федерацияһы Президенты Дмитрий Медведев ил төбәгендәге бер осрашыуҙа: "Һеҙ ниңә үҙегеҙҙең урындағы етәкселәр хәл итәһе мәсьәләләр буйынса миңә һорау бирәһегеҙ? Һеҙҙең үҙегеҙҙең хужағыҙ, министрығыҙ, начальнигығыҙ бар бит", - тип аптырауын белдереп сығыш яһаны. Был хәл аптырарлыҡ та. Ә бына бал ҡорто донъяһы шундай камил ҡоролған, унда һәр кем үҙенең вазифаһын башҡара һәм барлыҡ закондар күҙәтелә. Инә ҡорт йомортҡа һала, бала сығара, ата ҡорттар үҙ вазифаһын башҡара, эш ҡорттары бал килтерә, ҡайһы ҡорттар ташылған балды эшкәртеп, кәрәҙҙәрҙе ҡаплай, ҡайһыныһы бала тәрбиәләй. Шуның кеүек, илебеҙ Рәсәй алға китһен, иҡтисады үҫһен өсөн уның системаһы эшләргә тейеш. Бөгөн беҙҙә ундай система юҡ тип тип әйтергә лә була. Мәҫәлән, быйыл беҙҙең ауыл хужалығы хеҙмәткәрҙәре ҙур тырышлыҡ һалып, республикабыҙға ике йылға етерлек иген, йәшелсә-емеш үҫтереп алды һәм улар бөгөн уңышын ҡайҙа ҡуйырға белмәй.

Көслө умарта бер йәйҙә даими рәүештә бер фляга бал бирә. Беҙ Германияла булғанда уларҙың тоҡом ҡорттары көнөнә күпме бал килтереүен һораштыҡ. Иң күбе 7 килограмм, тип яуап бирҙеләр. Ә беҙҙең ҡорттар йүкә сәскә атҡанда көнөнә 15 килограмм бал йыя. Кавказ ҡорттары, мәҫәлән, халыҡ теле менән әйткәндә, асфальтта йә урам буйында бал йыя. Уның ҡарауы, башҡорт бал ҡорто иң сифатлы бал йыйып, донъяның "Башҡорт балы" феноменын барлыҡҡа килтерҙе.

Халыҡта "Тәртип тупһанан башлана" тиҙәр. Бал ҡорто күсендәге тәртипкә ҡарап, кеше донъяһын нисек итеп таҙа тотоу өлгөһөн ала. Ауылдарҙа йөрөгәндә шул күҙгә ташлана: асыҡ туберкулез һымаҡ йоғошло ауырыуҙар менән сирләүселәр халыҡ араһында иркен йөрөй, йәғни ауырыу йоҡтороуға ҡаршы бер ниндәй ҙә саралар күрелмәй. Ә бал ҡорто донъяһында үҙен сирле тойған ҡорт ояны ташлап китә һәм башҡаларға бер ниндәй ыҙаһын һалмайынса, ситтә донъя ҡуя. Эшсе ҡорттоң ғүмере 45 көн. Әгәр ҙә уларҙың кәүҙәләре умарта эргәһенә ташлаһа, һәр бер оя янында тауҙар барлыҡҡа килер ине. Тағы ла, әгәр ҙә умарта эсенә сысҡан килеп инә икән, уны башта үлтерәләр ҙә, ҡорт елеме менән эшкәртеп, дезинфекция үткәреп, үҙҙәренсә бальзамлап һалып ҡуялар.

**▸ Тағы ла бал ҡорто күсе тормошоноң ҡайһы яҡтарын кешеләрҙеке менән параллель итеп ҡуйырға мөмкин булыр ине, тип уйлайһығыҙ?**

**Ә. ИШЕМҒОЛОВ:** Кешеләр үҙ шәжәрәһен белмәү арҡаһында, йәки ниндәйҙер байлыҡты ситкә ебәрмәү маҡсатында яҡын туғандарҙың никахлашыуына юл ҡуйған бер мәлдә бал ҡорто тормошонда был мәсьәлә ҡәтғи ҡуйылған. Ҡан буталмаһын өсөн инә ҡорт күстән 15 саҡрымлап ситкә, икенсе ырыуға осоп сығып китә һәм ул шундай тиҙлектә осҡанға күрә, уны сит ырыуҙың иң көслө ата ҡорто ғына ҡыуып етеп аталандыра. Беҙҙең элекке йыйындарҙағы, һабантуйҙарҙағы "Ҡыҙ ҡыуыу" йолаһы нәҡ ошоға тап килә.

Беҙҙең тормошта йәштәр өйләнешкәндән һуң айырым тормош ҡороу маҡсатында төп ата йортонан сығып китә. Күптәр ҡалаларға, ундағы дөйөм ятаҡтарға барып һыйына, фатирҙарҙы ҡуртымға ала, һәр хәлдә, яҡшы йәшәү шарттары көтмәй уларҙы был осраҡта. Күп кенә йәш ғаиләләрҙең тарҡалыу сәбәптәре лә тәүге ауырлыҡтарҙы күтәрә, үткәрә белмәүгә бәйле. Йәштәр башҡаланғанда ҡулдарында бер сумаҙан булһа, бал ҡорттары сығып китер алдынан тәндәренә май йыя һәм шуның ярҙамында оҙаҡ ваҡыт йәшәй ала. Бал ҡорто күсенән шулай уҡ аталанған оло инә ҡорт сығып китә. Йәғни ул йәш ғаиләгә әҙер тормош, әҙер донъя ҡалдыра. Был саҡта оло инә ҡорт үҙенең яңы донъя ҡорор тәжрибәһенә таяна.

**Ә. БОҪҠОНОВ:** Бик урынлы дәлилдәр. Әмир ағай әйткәндәренә өҫтәп, мин киләсәктә халҡыбыҙ һанының йылдам артыуын күҙаллайым. Был, бер яҡтан, тарихыбыҙҙы, шәжәрәбеҙҙе өйрәнеүгә бәйле булһа, икенсенән, күс менән йәшәгәндә һаҡланып ҡалыу еңелерәк булғанға күрә, үҙ асылынан ситтә аҙашып йөрөгән күп кенә милләттәштәребеҙ барыбер ошо юлды һайлаясаҡ. Сөнки ниндәйҙер сәйәсәткә ҡаршы килеп булған тәҡдирҙә лә, тәбиғәткә ҡаршы килеп булмай. Әйтәйек, ҡатнаш ғаиләләрҙә тыуған кеше өсөн абстракт Рәсәйҙә урыҫ булыу бер нәмә лә бирмәй. Әлбиттә, телде белмәү ҙә күп халыҡты башҡортлоҡтан ситләштерә, әммә менталитет яғынан алып ҡарағанда, күптәргә башҡорт булыу оҡшай. Сөнки башҡорттоң тарихында йөҙөбөҙгә ҡыҙыллыҡ килтерерлек бер генә ваҡиға

# ӨСӨН ГЕНӘ ТҮГЕЛ, кәрәк

ла юҡ. Беҙҙең арала тәфтиләүҙәр булмаған, бер кем дә бер кемде лә ҡол итеп тотмаған, бар мәсьәлә халыҡ йыйындарында хәл ителгән. Шуның өсөн Рәсәйҙең сәйәсәте беҙгә күп ваҡыт оҡшамаһа ла, бының ни өсөн шулай килеп сығыуын аңларға тырышырға кәрәк. Әйтәйек, Мәскәүҙә йә Питерҙа тыуып үҫеп, унан бер ваҡытта ла ситкә сыҡмаған, башҡа халыҡтарҙы күрмәгән-белмәгән кеше уларҙың мәнфәғәтен яҡлап та ултырмай. Мәҫәлән, ни өсөн Рәсәйҙә һәр ваҡыт самодержавие принциптары йәшәп килә? Сөнки был илдең халҡы һәр ваҡыт ярлы булды. Ә ярлы халыҡ менән демократия яһап булмай. Америкала ни өсөн демократия бар? Унда һәр кешенең өсәр машинаһы бар һәм ул дәүләт файҙаһына бер машинаһын бирә һәм биргән әйберен контролдә тота ала. Бына был контролде демократия тип атап була.

**Бал ҡорто күсе нисек кенә көслө булмаһын, ҡоролоҡ хөкөм һөргән йәйҙәрҙә улар кешеләр ярҙамына мохтаж. Кешелек тә, милләт тә дәүләт ярҙамына мохтаж булған кеүек. Шулай түгелме?**

**Ә. ИШЕМҒОЛОВ:** Әгәр ҙә йәй насар килеп, бал йыйыр сәскәләр һеркәләнмәһә, инә ҡорт йомортҡа һалыуын шундуҡ туҡтата, йәғни балаларының үлеүенә ҡарағанда, уларҙың тыумауын артыҡ күрә. Шундай саҡта беҙ инә ҡорттоң бала тыуҙырыуын туҡтатмаҫ өсөн күскә шәкәр сиробы бирә башлайбыҙ. Икенсе төрлө әйткәндә, беҙ бында ғаиләгә дотация бүлеүсе дәүләт функцияһын башҡарабыҙ. Сироп биргән көндө бал ҡорто ояһында һабантуй башлана. Бал ҡорттары ҡыуанышып осорға, күңел асырға тотона. Кешеләр донъяһында иһә "сироп" булһа ла, булмаһа ла, балалар тыуа бирә. Шулай ҙа дәүләт ҡабул иткән "Әсәлек капиталы" программаһы тыуымды бер аҙ арттырҙы.

**Ә.БОҪҠОНОВ:** Милләт тә хәҙерге заманда тик дәүләт ярҙамында ғына һаҡлана һәм үҫешә ала. Бөгөн беҙҙең "сиробыбыҙ" бар, ул Рәсәй Федерацияһы дәүләтселеге. Дәүләт механизмы бөгөн халҡыбыҙға бик күп мөмкинлектәр бирә. Һуғыштан һуңғы йылдарҙа бик күп төрлө һалымдар булған. Бөгөн ул һалымдарҙы түләмәгән хәлдә лә, илебеҙ граждандарының күбеһе үҙ-үҙен аҫырай алмай. Шул уҡ ваҡытта Рәсәй донъялағы насар илдәрҙән дә түгел, шуны ла онотторға ярамай. Беҙ йыш ҡына бөлөнөп ташлайбыҙ.

Рәсәйҙән саҡ ҡына ситкә сыҡһаң, ундағы аҙ һанлы халыҡтарға мөнәсәбәт менән үҙебеҙҙекен сағыштырһаң, күп йәһәттән шөкөр итерлек. Мәҫәлән, төрөктәр 40 миллион курдты бөтөнләй халыҡ итеп һанамай. Ҡытайҙар 25 миллион уйғыр иҫәпләнгән автономиялы округты йотто. Рәсәй сәйәсәте, бер яҡтан ҡараһаң, ысынлап та, милләттәрҙе инҡар иткән һымаҡ күренә, ысынында иһә, Рәсәйҙә алып барылған сәйәсәт - милләтһеҙ административ сәйәсәт. Рәсәй бөгөн идара итеүгә нисек ҡулай, шулай эшләй. Шуға күрә беҙ, идара объекты булараҡ, был йәһәттән үҙебеҙҙең фекерҙе белдерергә бурыслыбыҙ.

Рәсәй дворяндары менән башҡорт дворяндары бер-береһенән ныҡ айырылған. Башҡорт дворяндары халыҡ мәнфәғәтен яҡлаған, сөнки улар ергә хужа, аҫаба булған. Рәсәй дворяндарына иһә ер һәм крепостной крәҫтиәндәр бирелгән. Шул уҡ Рәсәй сәйәсәте ете быуат самаһы һаман да дауам итә. Был үҙенә күрә тарихи традиция. Шуға күрә Рәсәйҙе тота килеп демократик ил итеп ҡороп булмаясаҡ.

Яңыраҡ уҡығайным, баҡтиһәң, һәр бер йәмғиәттә ете процент кеше ҡомарлы уйындар менән мауыға икән. Тимәк, илебеҙҙең ун миллион самаһы кешеһе үҙ көсөнә, иленең иҡтисадына ышанмайынса, мөғжизәгә иҫәп тотоп йәшәй икән - был үҙенә күрә диагноз да. Ул кешеләр үҙенең киләсәге хаҡында яҡшы уйлай алмай, сөнки уларҙа үҙҙәренең киләсәген яҡты итеп ҡорор идея юҡ. Шул уҡ ваҡытта ялҡау кеше лә бал ҡорто менән шөғөлләнә алмай, бының өсөн егәрлелек талап ителә.

Бөгөн беҙҙең балаларға эш юҡ. Ҡалала ғына түгел, ауылда ла күҙәтелә башланы был хәл. Беҙ үҫкән саҡта көнөбөҙҙөң ике-өс сәғәте мал ҡарауға бәйле эш менән үтә торғайны. Хәҙер ауылда ла мал тотмаусылар күбәйҙе. Район үҙәктәрендә лә мал һәр урамда берике кешелә генә ҡалды. Был нимә тураһында һөйләй һуң? Беҙ ураған һайын власты әрләйбеҙ ҙә ул, үҙебеҙ иһә эшләмәйенсә лә йәшәй алабыҙ. Ә бына Бөйөк Ватан һуғышынан һуң эшләмәйенсә йәшәп булғанмы? Юҡ, тимәк мохтажлыҡ кешене ниндәйҙер эш менән булышырға мәжбүр иткән. Мохтажлыҡ үткәйне... Хәҙерге йәштәрҙе ҡарағыҙ әле: ниндәй оҙон буйлылар, матур кейенеп йөрөйҙәр, организм өсөн кәрәкле витаминдарҙы ризыҡ аша ҡабул итәләр, әммә улар эшләргә яратмай. Беҙгә ҡорт күсендәге кеүек тәртип, хеҙмәт тәрбиәһе кәрәк. Нигеҙендә хеҙмәт булмаған дәүләт оҙаҡ йәшәй алмай.

**Ауылда эш булмаһа, ауыл халҡының эшен ойоштороусы юлбашсы табылмаһа, ул ауылды һәләкәт көтә. Бал ҡорто күсендә был мәсьәлә нисек ҡуйылған һуң?**

**Ә. ИШЕМҒОЛОВ:** Әгәр ҙә күстә инә ҡорт үлеп ҡалһа, эшсе ҡорттар бал йыйыуҙан туҡтай. Икенсенән, ҡорттар яйлап тарала башлай, ҡайһыһы үлә, ҡайһыһы инәһе булған ояға инеп китә. Бындай осраҡта күскә ярҙам ҡулы һуҙмаһаң, инә ҡорт ултыртмаһаң, күс юҡҡа сыға. Кешелеккә килгәндә, социализм осоронда беҙ колхоз-совхоз системаһына күсеп, кешеләрҙе ерҙән айырҙыҡ, шунан һуң икенсе-өсөнсө быуындар социализмда тыуып, революцияға тиклемге ергә берегеү тойғоһонан бөтөнләй айырылды. Беҙҙең халыҡ хужа әйткәнде тыңлай, тайпылышһыҙ үтәй бит инде. Шул рәүешле үткән быуаттың 90-сы йылдарына тиклем йәшәп килдек тә, көндәрҙән бер көндө колхоз-совхоздар юҡҡа сыҡты. Шул саҡта элеккене онотҡан, яңыға ҡулайлашмаған ауыл халҡы баҙап ҡалды. Бөгөн илебеҙ инәһе үлеп, ҡорто таралған күскә оҡшап ҡалды. Юлбашсыһы булған ауылдарҙа нимәләр эшләнә, ә күпселек урында бер ни эшләнмәй. Күпселек ауыл халҡы хәҙер "Беҙгә килеп әйтерҙәр, эшкә ҡушырҙар әле", тип эш көтөп ята. Уларға бөгөн ойоштороусы кәрәк, был эште урындағы хакимиәт башлығы ойошторорға бурыслы. Ауыл хакимәте башлыҡтары йорттарға һуңғы мәртәбә ҡасан инеп сыҡты икән? Улар айына 20-30 мең эш хаҡы алып та, ауыл халҡын эш менән тәьмин итеү буйынса бер нәмә лә эшләмәй икән, был үҙе үк ауылда дәүләт механизмының эшләмәүен күрһәтә. Шул уҡ ваҡытта ауылда эшһеҙ ятҡан егеттең ҡанына һалынған тарихи хәтере "Һин бит башҡорт егете, көслө, зәһәр егетһең, нишләп аҡса тапмайһың?" тип төртә. Ә ул егет эшләй алмай, сөнки совет осоронда йәшәгән, формалашҡан атайҙарынан, олатайҡартатайҙарынан ундай тәрбиә алмаған. Был осраҡта ул егет эскелеккә бирелә йә үҙ-үҙенә ҡул һала.

Бөгөн колхоз-совхоздар урынына хакимиәт янында кисекмәҫтән муниципаль хужалыҡтар ойошторорға, бизнес-пландар төҙөргә һәм эшкә тотонорға кәрәк. Хәҙерге ваҡытта республикабыҙҙа 70 процент ауыл хужалығы продукцияһы шәхси хужалыҡтарҙа әҙерләнә. Ә бөгөн шәхси хужалыҡҡа йылына нисә һум субсидия һәм дотация бирелә икән?

**Ә.БОҪҠОНОВ:** Әхмәтзәки Вәлиди социализацияны Башҡорт хөкүмәтенең принцибы итеп ала. Шуға күрә колхоз-совхоз идеяһы беҙҙең халыҡҡа әллә ни ят булманы ул. Сөнки уның нигеҙендә күмәкләп эш итеү, ергә дөйөм милек итеп ҡарау принцибы ята. Ләкин колхозға инмәҫ өсөн төндә һыйырҙарын һуйып ашаусылар ҙа булған бит. Шул уҡ ваҡытта совет ҡоролошо бөткәнгә тиклем кооператив системаһы эшләп килде. Тимәк, хөкүмәт төрлө формаларҙа халыҡҡа ярҙам итә килде. Бөгөн иһә ауыл халҡы етештергән тауарын да һата алмай. Уны ҡала баҙарҙарына индермәйҙәр, ә инде арттырып һатыусылар уларҙан тауарҙы арзан ғына хаҡҡа алырға тырыша.

Кадрҙар әҙерләү мәсьәләһе лә элек дәүләт контролендә булды. Элек партия етәкселек һәләте булған йәш кешене егерме йәшендә үк билдәләп, төрлө махсус мәктәптәр, курстарҙа уҡытып, уға ҡырҡ биш йәш тулғанда әҙер кадр формалашыр ине. Ул саҡта халыҡтың әхлаҡ яғы ла төрлө юлдар менән контролдә тотолдо. Ә бөгөн ҡарайыҡ инде: хатта ата-әсәләр балаларынан ситләшә. Күп кенә ата-әсәләр балаларының дингә килеүенә ҡаршы хатта. Хәҙер ейәндәренә тәрбиә бирерлек өләсәйҙәр, олатайҙар бик һирәк. Шуға күрә беҙ күп кенә бәләләребеҙҙе дәүләттән, хөкүмәттән күреп, "улар беҙгә бурыслы", тип кенә ятһаҡ, шулай уҡ дөрөҫ түгел.

**Ә. ИШЕМҒОЛОВ:** Хәҙерге ваҡытта бер сезонда илле умартанан бер миллион килем алған умартасылар бар. Был аҡсаға балалар уҡытырға ла, санаторийҙарға барырға ла була. Ғафури районының Сәйетбаба ауылында совет осоронда меңгә яҡын бал ҡорто ояһы һаналған. Элекке умартасылар донъянан киткән, йәштәр был йүнәлеште дауам итмәгән һәм шул сәбәпле ул ауылда бөгөн ике-өс умартасы табыу ҙа проблема булып тора. Ошонан шундай фекергә килдем: беҙ эштең уртаһынан башлағанбыҙ икән. Умартасыға тәрбиәне мәктәптә үк бирә башларға кәрәк икән. "Әлифба" предметын ғына алайыҡ. Беҙ унда ундан ашыу дәресте умартасылыҡҡа мөнәсәбәтле итеп үткәрергә тәҡдим иттек. Мәҫәлән, элек "Б" хәрефен үткәндә "болот" һүҙе торһа, хәҙер "бал", "У" хәрефендә "урман" булһа, хәҙер "умарта". Бөгөн кешенән ни өсөн умартасылыҡ менән шөғөлләнмәүе хаҡында һорашһаң, ике төрлө яуап ишетергә була. Беренсенән - "ҡорттоң сағыуынан ҡурҡам", икенсенән - "уны ҡарауҙың тәртибен белмәйем". Мәктәптәрҙәге уҡытыу системаһын дөрөҫ тип әйтеп булмай. Шуға күрә кешегә бала сағынан умартасылыҡҡа һөйөү уятыу маҡсатында "Әлифба"нан тыш уҡыу программаһына бал ҡорто хаҡында әкиәттәр, хикәйәләр индерҙек. Быларҙан тыш, Көньяҡ Урал райондары мәктәптәрендә умарталыҡ булдырыуға, умартасылыҡ буйынса түңәрәктәр, махсус кластар ойоштороуға йүнәлтелгән ҡарарҙар ҡабул иттек. Ул ҡарар буйынса XI синыфты тамамлаған уҡыусы аттестат менән бергә профессиональ техник училище кимәлендәге умартасы дипломы алып сығырға тейеш. Беҙ бөгөн балаларға математика, физика, химия, биология, әҙәбиәт, тарих уҡытабыҙ, әммә нисек донъя көтөргә, тормош ҡорорға өйрәтмәйбеҙ. Әгәр ҙә XI синыфты тамамлаған бала уҡыу йортона уҡырға бармаһа йә инә алмаһа, мәктәптән алған һөнәре ярҙамында шунда уҡ эшкә тотона ала бит.



***Башҡорт - диаспорала йәшәй торған халыҡ түгел. Беҙҙең халыҡ йәшәгән еренән сығып китһә, юғалыуға еңелерәк дусар ителә. Сөнки беҙҙең менталитетҡа, бал ҡорттары һымаҡ, күстә берҙәм булып йәшәү механизмы һалынған. Күп халыҡтарҙа үҙ-үҙен танып белеү дин менән бергә бара, ҡайһы бер халыҡтар дәүләтселек юлы менән берләшә, беҙҙең халыҡтың үҙ-үҙен таныуы Уралына, туған моңона, ҡурайына, бейеүенә һәм мәҙәниәтенә бәйле. Беҙҙә ватансылыҡ тойғоһо көслө. Баҡтиһәң, Мәскәү ҡалаһының 4 кенә процент үҫмерҙәре әрмелә хеҙмәт итә. Уларҙың ата-әсәләре "Рәсәй, ватан" тип яу һала-һалыуға, әммә уларҙың балалары шул ватанды һаҡларға теләмәй. Ә беҙҙең башҡорт егеттәре өсөн әрмегә бармау һаман да ғәрлек һанала. Шулай булғас, дәүләтселек, ватансылыҡ тойғоһо кемдә көслөрәк һуң?***

**(Дауамы 15-се биттә).**

✓ ***Юҡ, шиғырҙың мәшәҡәте күп икән. Нимә хаҡында яҙыуҙы уйлап баш ватаһың, уны рифмалаштырғанда икенсе тапҡыр ғазапланаһың. Ритм, образ кеүек тағы әллә нәмәләр бар.***



ЗАУЫҠ

*Айһылыу ҒАРИФУЛЛИНА*

# ҠУЛАЙЛАШЫУ БАРА ИЛДӘ...

### Ризалыҡ

Һуңлап килә хәҙер ҡыштары ла -
Сама тура килмәй самаға.
Һөйәлешеп, моңһоу сират көтә
Быйыл ҡар күрмәгән саналар.
Ҡара һыуыҡ електәргә үтә -
Ел ҡыуалай мине ҡабалан.
Юҡ, һүгергә һине йыйынмайым,
Мин йәшәгән ошо заманам!
Осош-балҡыштар ҙа һиндә булды,
Дингә ҡайтыу, килеү тәүбәгә.
Мөстәҡиллек алып, нисә йылдәр
Күккә тейеп торҙо түбәләр.
Башҡортлоғон башҡорт юймаҫ, тигән
Инанырлыҡ көстәр табалһам,
Минән риза булыр заман үҙе,
Риза булырмын мин замандан!

### Беҙҙең хәл

Һаҡал үҫтергән - ваһһабсы,
Яулыҡ ябынған - дошман.
Мосолмандарҙы ғәйепләү
Дауам итә тәк буштан.

Наркоман, фәхишә булһаң,
Берәү һинән шикләнмәй.
Фани донъя, һиндә бөгөн
Ниҙәр генә эшләнмәй?

Мәсеттәре яндырылып,
Манаралар ҡолаған,
Быуат самаһы йәшәнек
Динһеҙ, ярым-яланғас.

Иманһыҙҙы енеү енел -
Шешәгә лә алдана.
Аҡса хаҡына кешеләр
Ҡоллоҡҡа ла яллана.

"Заманса" ҡыҙҙар яланғас -
Бот төбөнән итәктәр.
Ир-атты аҙҙырыу өсөн
Самалана иҫәптәр.

Мәсет юлын белмәй ир-ат,
Урам буйында улар.
Донъя йөгөн тартҡан ҡатын
Үҙ тәртәһендә тулай.

Дин - айырымдар эше, тип
Уйлай бөгөн күбеһе.
Оҙонораҡ аҡса күрһә,
Күккә тейә түбәһе.

Бабайҙарҙың пенсияһы
Бирәсәгенә китә.
Көмөшкәселәр "баҙары"
Ҙур әйләнештә үтә.

Тешһеҙ кешенең ризығы,
Тип әбей хәмер эсә.
Балаһын ҡарамай, ана,
Һыра һемерә бисә.

Атаһын, сәйәсәт был, тип,
Уфтанып ҡуя күрше.
Рухи көрсөк теҙләндерә -
Нимә ул матди көрсөк?

Иманһыҙ Ивандар булып
Типтерәбеҙ нисә йыл?
Әммә татар, башҡортҡа ла
Был хәл түгел "надоел".

Ҡул күтәреп, доға ҡылып
Илгә кем ни һораған?
Ашаған ҡайҙан белһен ул,
Хәлде аңлай тураған.

Иманға килмәй белмәбеҙ
Ошо тормоштоң йәмен.
Онотайыҡ сусҡа итен -
Харам ризыҡтың тәмен.

Аллаһҡа яҡынлашайыҡ -
Бәрәкәттәр һорайыҡ.
Тормошто китап ҡушҡанса,
Шәриғәтсә ҡорайыҡ!

Ул сағында ике донъя
Рәхәттәрен күрербеҙ.
Фатихалы эшебеҙҙең
Емештәрен тирербеҙ!

### Донъя болғатыусыға кәңәш

Эскән һыуыңа төкөрмә -
Халыҡ һүҙе - алтын.
Хоҙай бүләк иткән ерҙе
Хурларға юҡ хаҡың!

Аш менән атҡан кешегә
Таш атмасы, туған!
Алтынға нәжес йөкмәй ул,
Үҙ затына йоға!

Бер-берәүҙе кәмләү менән
Дәрәжәң бит артмаҫ.
Аҡылың алдан йөрөһөн,
Ә асыуың - арттан!

Үҙ нәфсеңдең ҡоло булма,
Аллаһ ҡоло бул һин.
Күңелең миһырбан менән,
Илһам менән тулһын!

Дәүерҙе лә, ереңде лә,
Ситтәрҙе лә һүкмә,
Күңелеңдең йыуынтыһын
Башҡаларға түкмә!

Ватанды һайлап алмайҙар -
Аллаһ бүләге ул.
Инде ауыҙыңдан сыҡһа,
Бел: һүҙеңә һин ҡол!

Үҙ күҙеңдәге бүрәнә
Күренһен иң тәүҙә.
Ситтәр күҙендәге сүпте
Шәйләмә һин, әйҙә.

Үҙгәреште һин бөгөндән
Нәҡ үҙеңдән башла.
Ғәйепте ситтән эҙләүҙе
Мәңгелеккә ташла!

### Ҡулайлашыу

Ҡулайлашыу бара илдә:
Мәғарифта - беренсе.
Филиал була мәктәптәр
Йөҙөнсө һәм меңенсе...
Ҡыҫҡара башҡорт телдәре -
Дәрес хаҡында һүҙем.
Ҡыҫҡартырҙар башыңды ла -
Бул, башҡорт, әйҙә, түҙем.
Ҡыҫҡара эфир ваҡыты
Башҡорт телендә барған.
Аллаһтың үҙенән генә
Һорарға ҡалды ярҙам.
Ҡулайлашыу бара илдә -
Ҡулайлаштырыу - фарыз.
Мәғарифта реформанан
Фурсенко бөттө "арып".
Мәктәптәре ҡулайлашҡас,
Тел бөтәр, ауыл бөтәр.
Башҡортҡа нөктә ҡуйылыр -
Бынан һуң көтмә өтәр.
Ҡулайлашып, шымып ятҡас,
Беҙгә ошо ла таман!
Аҡыллыға - ишара был,
Яҙмам ошонда тамам.

### Боралҡы

Ерең дә юҡ, илең дә юҡ:
Далалағы ҡамғаҡтай
Тәгәрәп үтте ғүмерең
Ебе серек йомғаҡтай.
Бәргеләнеп, һуҡҡыланып
Йәшәргә серәшеүең.
Йөҙроҡ күрһәтеп батырға
Аҫтыртын көрәшеүең.
Боралҡынан берәү килһә,
Боронғоға урын юҡ.
Тәхеттәй тойола уға
Һин ултырған урындыҡ.
Илгенәмә килгеләгән
Килмешәктәр борондан.
Ерҙең уты булалмаған
Быҫҡып ятҡан торондар.
Эй, халҡымдың бай аҡылы -
Телеп һалған мәкәлдә.
Һуң булһа ла иҫкә төшә
Уяу бул, тиеп әлдә...

**Риф МИФТАХОВ**

# МИН КЕМДӘН КӘМ!



**Хикәйә**

Туйҙырҙы был тормош Тәхфәтте, туйҙырҙы. Яҡтырыр-яҡтырмаҫтан күҙенде тырнап ас та, тегенәнбынан ғына ҡапҡылап, кистән ҡалған һалҡын сәй һемереп эшкә йүгер инде. Туҡталыштағы, автобустағы этеш-төртөштө әйтәһе лә түгел - сей елкәһенә тейеп бөткән. Хеҙмәт урынына барғас, башмаҡ күҙ Бәшәрҙе күреп, тағы ла бер ҡәйефе ҡырыла уның. Кит инде, кит, шул лығырҙаҡ, ҡап ҡорһаҡ әҙәмде лә мөдир итеп тоторҙар икән. Булыр-булмаҫ институттың булыр-булмаҫ лабораторияһына ярай тиҙәрҙер, күрәһең. Етте! Тәхфәт яңы эш табырға тейеш! Йоҡоһон туйғансы йоҡлап, теләгән ваҡытта барып, теләгән ваҡытта ҡайтып китә торған хеҙмәт урыны булдырырға кәрәк. Хәҙер барыһы ла шундай эштә. Ниңә әле уға, берәй предприятие асып, бизнесмен булып китмәҫкә...

Уйлана торғас, Тәхфәт был хыялынан тиҙ сигенде - иҡтисади белеме һайыраҡ шул. Уның ҡарауы, ул тормошто һәйбәт белә. Тукта әле, тукта, ниңә уға яҙыу-һыҙыу эше менән шөғөлләнеп ҡарамаҫҡа? Мәктәптә уҡығанда һүрәт төшөрөргә һәләте булмаһа ла, берәй нәмә хаҡында тасуирлап яҙырға фантазияһы етә торғайны бит. Хатта әҙәбиәт уҡытыусыһы, аптырауҙан баш һелкеп, телен шартлатып ҡуйыр ине. Хәҙер ҙә институтта йыллыҡ отчеттарҙы нисегерәк төҙөй ул! Бер кемдең башы, аҡылы етерлек түгел. Сикһеҙ фантазия бында ла кәрәк икән.

Яҙыусы буласаҡ Тәхфәт! Улар бит, эшкә барыу түгел, өйҙәренән дә сыҡмайҙар, урындарынан да ҡуҙғалмайҙар тиерлек. Илһам килгәндә генә өҫтәл артына ултыралар ҙа, күңелдәрен ҡағыҙға бушатҡас, яңынан йылы урындарына сумалар, йә булмаһа, саф һауала баш елләтергә, дуҫ-иштәре менән һыра эсергә урамға сығып китәләр. Ошонан да рәхәтерәк тормоштоң булыуы мөмкинме ни!

Тик нәмәнән башларға? Бәлки, шиғырҙар яҙыуҙандыр? Күләме лә бәләкәйерәк, тиҙ ҙә яҙыла. Уны, моғайын, мөгәҙләләр генә ижад итмәйҙер әле. Тәхфәт ҡулына ручка алып, алдындағы аҡ ҡағыҙҙарға текләп, уйға батты. Ярты сәғәт самаһы ирендәрен ҡыбырҙата-ҡыбырҙата ултырһа ла: "Эй, минең тыуған ҡырҙарым, болондарым, яландарым, мин эшкә бармаһым бөгөн, һеҙҙе уйлап тик ятам", - тигән юлдарҙан да шәберәген ижад итә алманы. Тәүҙә был ижад емеше үҙенә нығ оҡшаһа ла, һуңынан ниңәлер күңеле ҡайтты, хатта шиғыр яҙылған ҡағыҙҙы йыртып ырғытты. Юҡ, шиғырҙың мәшәҡәте күп икән. Нимә хаҡында яҙыуҙы уйлап баш ватаһың, уны рифмалаштырғанда икенсе тапҡыр ғазапланаһың. Ритм, образ кеүек тағы әллә нәмәләр бар. Уларына ла түҙер инең, ә нисек итеп уны оҙаҡ һәм оҙон яҙмаҡ кәрәк? Оҙон итеп яҙмаһаң, гонорары ла шул тиклем генә инде уның. Юҡ, шиғыр бармай!..

Тәхфәт прозаға күсергә булды. Башта башҡаларҙың яҙғанына күҙ һалырға уйлап, дуҫ-иш, таныш-белештәренән әҙәби китаптар һорап торҙо. Ике аҫар уҡыуға ҡәтғи ҡарарға килде: үҙ биографияһынан роман яҙасаҡ! Был турала иң башта ҡатынына әйтергә булды. Хәсни иренең һүҙен элеп алып:

- Бәй, яҙмай ни, яҙ, - тине, - бөтәһе лә яҙа ла. Һин кемдән кәм? Юҡ-бар бала саға йыр-таҡмаҡ сығарып йөрөгәндә, һинә, фән кешеһенә, ниңә ижад итмәҫкә, ти. Даны ла, аҡсаһы ла булыр, исмаһам. Яҙ, тик ҙурыраҡ итеп яҙ. Китабың кирбес ҡалынлығы булһын. Шул йәшеңдә, шул кәүҙәң менән бәп-бәләкәй китап яҙмаҫың бит инде!

Тәхфәт ҡатынының был һүҙҙәренән йәнләнеп китте.

- Үҙем дә шулай уйлап йөрөйөм. Солидный роман булырға тейеш. Биография бай бит минең: бала саҡ, мәктәп йылдары, армияла хеҙмәт итеү, ҡайтыу, институтҡа өс тапҡыр имтихан биреү, яңынан ауылға ҡайтып эшләү, яңынан Өфөгә килеү, әлеге эштә бәрелеш-тартыштар...

- Ә мине ҡайҙа ҡуяһың? - Хәсбиҙең тауышы бик ҡәтғи ине. - Ауылдашым, күршем тигәс тә, мине ҡулға еңел генә төшөрҙөм тип уйлайһыңмы? Артымдан әҙме егеттәр йүгерҙе. Айыу Ишкәленең мин тип өҙгөләнеүҙәре, сабыуҙары үҙе бер романлыҡ. Ә теге күпер урамы Әтәс Әхәттең үлер сиккә етеп бөтөрөнөүҙәре...

- Улары ла керә инде, ҡатын. Ғөмүмән, китапҡа кемдәрҙе ыңғай, кемдәрҙе тиҫкәре герой итеп алыу тураһында иркенләп ултырып һөйләшербеҙ.

- Бәй, уны мин һиңә хәҙер үк әйтәм. Ыңғайҙар: мин дә, үҙең дә, Әюп ҡоҙаң. Малайың менән ҡыҙыңды, икеһен дә институтҡа алып, кем кеше итте? Ул! Ауылдағы Хәйри дуҫыңды нисек ҡалдыраһың? Урманға ул хужа булмаһа, дачаңа клубтай йорт төҙөп ҡуялмаҫ инең әле.

- Арзан ғына хаҡҡа һәр беребеҙгә тундар тегеп биргән Тәлиға ҡоҙасаны ла онотаһым юҡ.

- Эйе, ул да бар. Ә, ана, теге Муса ҡоҙа менән Сәнә ҡоҙағый кеүек һарандарҙы тиҫкәре ит. Әҙәм көлкөһөнә ҡалдыр һин уларҙы. Үткән йыл йыйған мәжлестәрен хәтерләйһеңме? Хурлыҡ бит! Өҫтәлендә йүнле эсер, ҡабыр әйбер булманы. Етмәһә, ауыҙ йыралар: имеш, эш аралашып, серләшеп ултырыуҙа... Романыңда, һаран кешеләр менән серләшеп тә, гөрләшеп тә ултырмайҙар, тип өҙҙөргәнсә әйт!..

Был кисте Төхфәт ҡатыны менән буласаҡ роман геройҙары хаҡында оҙаҡ әңгәмәләште, хатта ҡайһы саҡ үҙ-ара бәхәстәр ҙә сыҡҡылап ҡуйҙы. Аҙаҡ килеп, кемдәрҙе тиҫкәре герой итеп яҙыу тураһында бер һүҙгә килеп, уларҙың исемлеге төҙөлдө. Төхфәт ҙур әҫәрен яҙып бөткәнсе әлеге эшенән китеп торорға булды. Был хаҡта һүҙ сыҡҡас, Хәсби:

- Мин аҙыҡ-түлек магазинында эшләгәндә ас та, кейемһеҙ ҙә булмабыҙ, балаларҙы ла ҡарарбыҙ, - тине, иҫе лә китмәй. -Романың ғына сыҡһын. Алла бирһә, тағы ла ныҡыраҡ байырбыҙ...

Төхфәт әҫәре менән өс йыл яфаланды. Фатирында ла, баҡсаһында ла яҙҙы. Өфөнөң боҙоҡ һауаһы менән насар һыуы ҡамасаулайҙыр тип, тыуған ауылына ла, санаторийҙарға ла барып романы өҫтөндә эшләне. Бальзак кеүек туҡтауһыҙ кофе эсеп тә ижад итте. Тик ҡатыны, балалары, ҡайһы бер дуҫ-иштәре, ҡоҙа-ҡоҙағыйҙары көткән роман, ауырыу мал кеүек, мандый алманы...

Иренең файҙаһыҙ үткәргән ваҡытына әрнеп, бер көндө ҡатыны Хәсби:

- Булдыҡһыҙ! Аҡсалы эш тап, икенсе йыл романға үҙем ултырам. Бына тигән әҫәр яҙасаҡмын! Мин кемдән кәм! - тине.

Булыр унан! Китап яҙыуҙы хәҙер сүп урынына ла күрмәйҙәр бит...

*ЯҢЫ РУБРИКА: "ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ"*

# БЕҘ - ЕҢЕҮСЕЛӘР ТОҠОМО,

## балаларыбыҙҙы ла еңелмәҫкә өйрәтәйек

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишерелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



**Тамара ҒӘНИЕВА, шағирә:** Донъя ҡатмарлашты, тигән фекерҙе ябай халыҡтан йыш ишетергә тура килә. Үкенескә ҡаршы, халыҡ зарлана, ә беҙҙең етәкселек бер туҡтауһыҙ, илебеҙ йылдам аҙымдар менән алға китеп бара, тип раҫлай. Күҙәтеүҙәремсә, ҡыйынлыҡтар оҙаҡҡа һуҙылмаҡсы. Шуға күрә халыҡҡа, нисек кенә ҡыйын булмаһын, үҙ көнөн үҙенә күрергә тырышырға тура киләсәк. Көйөргәҙе районындағы тыуған ауылым Кинйәбайҙы ғына миҫалға килтерәм. Унда бер ниндәй ҙә эш юҡ. Халыҡ нисек көн күрер, тигән борсолоу бар ине. Әммә хәҙер мал аҫрап, әмәлен табалар. Ә үҙ эшенде асам, тиһәң, алданмаҫ өсөн, хакимиәт менән үҙ-ара мөнәсәбәттәрҙе лә көйләргә, бөгөнгө ҡануниәтте лә, иҡтисадты ла ялҡауланмайынса ныҡлап өйрәнергә кәрәк. Беҙ көслө халыҡ. Батшалар заманында ла етәкселәр менән мөнәсәбәттәр ҡырҡыу булған, әллә күпме ҡыйралыштар аша үткәнбеҙ. Шуға күрә ниндәй генә хәлгә тарымайыҡ, ниндәй генә ауырлыҡтар кисермәйек, уларҙы йырып сығыр өсөн тәжрибәбеҙ, рухи көсөбөҙ бар. Ана шул рухи көстө юғалтмаҫҡа һәм балаларҙы, бирешмәҫкә кәрәк, тигән принциптан сығып тәрбиәләргә тейешбеҙ. Беҙҙе, әлбиттә, элек, һин бирешмә, һин шәп бул, һин бит башҡорт, тип тәрбиәләп ултырманылар. Атаәсәләр үҙҙәре өлгө булды. Ғөмүмән, минең йәштәгеләр - көслө быуын ул. Сөнки беҙ еңеүселәр балалары. Ә хәҙерге йәштәр йәмғиәтебеҙ төшөнкөлөккә бирелгән, нимә көтөргә белмәгән, аңламаған осорҙа формалашты. Шуға күрә хәҙер бөтәбеҙгә берләшеү юлын табырға кәрәк. Мәҫәлән, ауылдарҙа аңлатыу рәүешендә төрлө семинарҙар үткәрергә була. Әйтәйек, эскелеккә ҡаршы күп кенә райондарҙа шундай саралар үтте. Әммә дәүләт тарафынан улар яҡлау табып етмәй. Район хакимиәттәрендә халыҡты әйҙәп, әүҙемләштереп торған ниндәйҙер идеологик үҙәк булырға тейештер. Кеше илдә барған үҙгәрештәр менән хәбәрҙар булырға тейеш. Ә беҙҙә бөгөн бик һирәктәр матбуғатты алдыра. Һәр ғаиләгә бер башҡорт гәзите булһа ла килергә тейеш. Ауылда аң кимәлен, белемде күтәрерлек мәғрифәтселек эштәрен алып барырға кәрәк, тип уйлайым.

Дәүләттең төп бурысы: халыҡтың хоҡуҡтарын һаҡлау. Ә бөгөн беҙҙең өс төп хоҡуғыбыҙ - бушлай торлаҡ алыу, бушлай белемгә эйә булыу һәм медицина ярҙамын күрһәтеү - тартып алынды. Ошо төп мәсьәләләр хәл ителмәйенсә, матди яҡтан бер нәмә лә үҙгәрмәйсәк. Шулай ҙа дәүләттә генә түгел, ғаилә эсендә лә көрсөккә барып терәлеү һәр ваҡыт булып тора. Рухы ныҡлы, күңеле таймаҫтай ағзалары булған ғаиләләр ауырлыҡтарҙы берҙәмлек менән үткәреп ебәрә. Шуға күрә, үтә ҙур хәсрәткә бирелеп китергә, килеп сыҡҡан хәлдәрҙе трагедияға әйләндерергә ярамай. Үҙ ғаиләң, үҙ донъяң именлеге хаҡына тырышып йәшәргә генә кәрәк.

**Рубриканы**
**Мөнир ИҠСАНОВ**
**алып бара.**

*БАЛАҢА УҠЫ!*

# РАУЗАЛАР БАТШАБИКӘҺЕ

**Булғанмылыр был хәл, юҡтырмы, бер Аллаһы Тәғәлә генә белә. Алыҫ, бик алыҫ илдә бер бик матур бәләкәй Батшабикә йәшәгән, ти. Ул үҙе шул тиклем сибәр, ә йөрәге шундай изге, шәфҡәтле булған, уны бөтәһе лә яратҡан һәм Раузалар Батшабикәһе тип атаған, ти.**

Был илдә яуыз сихырсы ла йәшәгән, ти. Раузалар Батшабикәһе тураһында ишеткәс, ул йоҡоһонан яҙған һәм тыныслығын юғалтҡан. Тирә-яҡта бөтәһенең дә Батшабикәнең яҡшылығы һәм матурлығы тураһында ғына һөйләүҙәренә, сихырсының өҫтөнлөгөн бөтөнләй күрмәүҙәренә уның көнсөллөгө һәм асыуы килгән. Сихырсы Батшабикә менән иҫәпләшергә хыялланған, ти.

Шулай берҙән-бер көндө Аллаһы Тәғәләнең бөтә йән эйәләре - кешеләр, ҡоштар, күбәләктәр, бал ҡорттары яңы иҫ киткес матур яҙғы көн тыуыуына ҡыуанып, Хоҙай Тәғәләне маҡтағанда, яуыз Сихырсы ла үҙ өйөнән сыҡҡан. Был дөйөм ҡыуанышыу, сырҡылдашыу һәм гөжләү уның кәйефен тағы ла ныҡыраҡ боҙған, ти.

Сихырсы үҙенең тоғро хеҙмәтсеһен саҡырып алған да, уға сихырланған "яуызлыҡ орлоҡтары" һалынған тоҡсайҙы биргән һәм уға Батшабикәгә баҡсасы булып ялланырға, һарайҙа баҡсалар сәскә атҡас, был орлоҡтарҙан сәй әҙерләп, ошоноң менән Батшабикәне һыйларға ҡушҡан.

Хеҙмәтсе бөтә әйтелгәндәрҙе теүәл үтәгән. Орлоҡтарҙан ерәнгес еҫ килгән, сөнки улар "яуызлыҡ орлоҡтары " булған. Әммә баҡсалағы раузаларҙан аңҡыусы хуш еҫ сәйҙең яман еҫен баҫҡан. Раузалар Батшабикәһе "Бисмилләһи-ррахмәни-ррахим" тип шыбырлаған да сихырланған сәйҙе эскән, ти.

Сихырсы уйынса, был сәйҙе эскән кеше дөйә сәнскәгенә әйләнергә тейеш була. Хеҙмәтсе, ҡулдарын ыуғылап, яуыз сихырсының сихыр көсөнә һәм Раузалар Батшабикәһенең сәнскәккә әйләнә башлаясағына көн элгәре ҡыуанған.

Әммә бының урынына Раузалар Батшабикәһенең муйынына бик матур лилиәләрҙән үрелгән сәскә бәйләме уралған һәм уның сәстәре алтын тулҡын булып елберләгән, күҙҙәре зөбәржәт япраҡтарына, устары - аҡ лилиәләргә, ә тирәһе баҡсала сәскә атыусы раузаларҙың нәфис таждарына оҡшап киткән. Батшабикә көлгән саҡта уның тирәяғында ҡыҙыл мәктәр, һары күҙле ромашкалар, төрлө төҫтәге маргаритҡалар сәскә атҡан. Ул һөйләгәндә уның ирендәрендә зәңгәр, күк миләүшәләр күҙҙәрен асҡан.

Ә шул ваҡытта хеҙмәтсе үҙе сәнскәккә әйләнеп ҡарайған һәм кипкән, ти.

Кешеләр, Раузалар Батшабикәһен күреп, хайран ҡалып ҡыуанған: "Уның исеме Раузалар Батшабикәһе, хәҙер үҙе лә сәскә кеүек"- тиешкәндәр.

Раузалар Батшабикәһе һәр ваҡытта ла бер эш башлар алдынан "Бисмилләһи", тип әйткән, шуға ла уға килгән бөтә бәләләр изгелеккә әйләнгән. Аллаһ Тәғәлә уны шулай яуызлыҡтан һаҡлаған.

Яуыз Сихырсы, үҙенең сихыры нимә менән тамамланғанын белгәс, асыуынан шартлаған. Уның йәшелсә баҡсаһында үҫкән яуызлыҡ сәнскәктәре бөтәһе бер юлы һулыған.

Бәләкәй Раузалар Батшабикәһе "Бисмилләһи" һүҙе уны Сихырсының сихырынан һаҡлағанын аңлаған һәм Аллаһы Тәғәләгә рәхмәт әйткән.

Һәр ваҡытта ла: үҫеп еткәс һәм йәш кәләш булғас та, һуңынан әсәй булып ҡартайғас та, Аллаһ Тәғәлә гел уның үтенесен үтәгән.

Бына әкиәт тә бөттө.

**Мөршиҙә УЙСАЛ.**
**"Хаҡ динемдә беренсе аҙымдарым" китабынан.**

*БАЛАЛАР ҺӨЙЛӘЙ*

# УТЫН КӨСЛӨРӘК

**Мин дә бик күптәр һымаҡ телевизорҙағы тәүге рекламаларҙан уҡ "Киске Өфө" гәзите бары тик Өфө тураһындалыр тип уйлағайным. Бер аҙ ваҡыттан һуң "Киске Өфө"нөң бер һаны ҡулыма килеп эләкте һәм шул ваҡыттан алып унан айырылғаным юҡ. Ҡалдырмай яҙылам, йотлоғоп уҡыйым һәм һәр һанын туҙҙыратмай тегеп һалып барам. Гәзиткә улдарымдың бала сағындағы бер нисә ҡыҙыҡ һүҙҙәрен тәҡдим итәм.**

* * *

Өс йәшлек Азатты балалар баҡсаһына алып китеп барам. Ҡыш, әсе ел. Ул: "Әсәй, үпәситем өшөй", - тигән булды. Йәғни, үпәс итә торған бите өшөй була инде.

* * *

Икенсе тапҡыр китеп барғанда юл ситендә бер ҡаҙ тора: "Әсәй, ҡара әле, йомол ҡаҡаҡ", - ти. Ә ҡаҙ ысынлап та һыуыҡтан йомолоп бөтөп тора. Һыңар аяғын да, суҡышын да мамығы араһына йомоп алған.

* * *

Мин утын ярам. Азатым эргәмдә урала. Бысылған, ҡолап ятҡан түмәрҙәрҙе миңә ултыртып биреп йөрөгән була. Бер ҙурыраҡ түмәрҙе ултырта алманы. Ахырҙа, "Утын көслө" тип ҡуйҙы. Бер ҙә, көсөм етмәй, тимәй бит әле.

* * *

Көтөүгә сыҡмаған һарыҡтарҙы өйөбөҙгә яҡындағы тауҙа йөрөтәбеҙ. Нимә менән булышырға белмәй йөрөгән бәләкәй улым Зөлфәргә, һин һарыҡтарҙы ҡарап йөрө, кеше һарыҡтарына ҡушылмаһындар, тип әйттем дә үҙем башҡа эш менән булам. Зөлфәргә лә өс йәш самаһы ине. Бер ваҡыт балам яу һалып йүгереп килә: "Әсәй, беҙҙең һарыҡтар кешенең һарыҡтарына тоташты!" - тип ҡысҡыра үҙе.

**Фирҙәүес МЫРҘАБУЛАТОВА.**
**Баймаҡ районы Сәйғәфәр ауылынан.**

ИНТЕРНЕТТАН



# ИРТӘ ТОРҺАҢ...
## сәләмәт булырһың

■ Тикшеренеүселәр әйтеүенсә, "һабан тургай"ҙарының сәләмәтлеге лә нығыраҡ, кәйефе лә һомғолораҡ, кәйефе лә яҡшыраҡ була. Белгестәр быны уларҙың иртәрәк уяныл, эш көнө башланғанға тиклем күп эштәрен эшләп өлгөрөүе менән аңлата. Йәғни, шуға ла уларҙың тормошонда депрессияға урын юк, сөнки ваҡытында үтәлмәгән эште башҡарыу өсөн хәүефләнергә кәрәкмәй. Йоҡонан һуң тороусылар йыш ҡына депрессияға бирелә, артыҡ ауырлыҡ менән яфалана.

■ Кальций организм өсөн бик файҙалы, әммә был микроэлементка бай булған һөт аҙыктарын яратмайһығыҙ икән, уның урынына башҡа аҙыктар ҡулланырға гәҙәтләнегеҙ. Мәсәлән, борсаҡ йәки чечевица ашы, балыҡ консервалары, һөйәкле иттән бешерелгән аш кальцийға бай. Кальций шулай уҡ аҡ фасолдә, сельдерейҙа күп. Хатта ҡайһы бер тәмтомда ла кальций булыуын иҫәпкә алығыҙ. Туңдырмаға миндаль сәтләүеге йәки инжир һалып тәкдим итһәгеҙ, был аҙыктан балалар ҙа баш тартмаясаҡ.

■ Һөт аҙыктары диабет менән ауырыусыларға ла файҙалы. Америка ғалимдарының ун йыллыҡ тикшеренеүҙәре күрһәтеүенсә, аҙнаһына 35 тапҡыр һөт аҙыктары ҡулланыу күп ауырыуҙарҙан ҡотҡара, быға һөттәге кальций һәм макронутриттар йәки аҡһым һәм майҙар булышлыҡ итә. Улар организмды диабеттан һаҡлап ҡына ҡалмай, ябығырға ярҙам итә, гипертония һәм йөрәктең ишемик ауырыуҙарын булдырмай.

■ Ғалимдар йөрәк ауырыуы булған 608 кешене тикшереп, омега-3 майлы кислоталары кешене ҡартайыуҙан һаҡлауын билдәләгән. Былдай кислоталар йөрәк өйәнәгенән һуң тиҙерәк һауығыу мөмкинлеге бирә, ҡартая барған һайын хәтер насарайыуы процесын аҡрынайта, күҙ ауырыуҙарын булдырмай. Майлы кислоталарға бай рацион эсәк яман шеше сире барлыҡҡа килеүҙе 40 процентҡа түбәнәйтә. Былдай йәшлек эликсирын һәр магазинда ла һатып алып була. Америка ғалимдары фекеренсә, һөмбаш, макрель һәм сардина балыҡтары майлы кислоталарға бай.

■ Кеше ауырыған саҡта бер аҙ ашамай торһа, күпкә файҙалыраҡ, сөнки был ваҡытта организмдың көсө аш һеңдереүгә түгел, ә инфекция менән көрәшеү өсөн йүнәлтелгән булырға тейеш. Ауырыған мәлдә туҡлыҡлы аштарҙы кәметеп, күберәк емеш-еләк, бигерәк тә әфлисун, мандарин, лимон, сей йәки быҡтырылған йәшелсә, һыуҙа бешерелгән йәки быҡтырылған балыҡ ашарға, һут эсергә кәрәк. Әйткәндәй, киҙеү вирусы әсе мөхитте яратмай, шуға ла нарзан кеүек минераль һыуҙарҙы күберәк эсеү яҡшыраҡ, ул бауырҙан ҡабул ителгән дарыуҙарҙы ла сығарырға ярҙам итә.

■ Маҡсатҡа ынтылып йәшәү - кеше характерының ыңғай сифаты ғына түгел. Тормошта маҡсат булыуы кешенең физик сәләмәтлегенә лә яҡшы йоғонто яһай. Чикаго психологтары һәм физиологтары үткәргән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, маҡсатлы йәшәгән кешеләр араһында иртә һәм осраҡлы үлем һирәк осрай. Бынан тыш, физиологтар әйтеүенсә, маҡсатлы кешеләр хроник ауырыуҙар менән һирәгерәк яфалана, уларҙың һаулыҡ торошо күпкә яҡшыраҡ була.

ШУЛ ДА БУЛДЫМЫ ҒӘҘӘТ!

# ЕГЕТТТӘР - АУЫЛДА,
## ҡыҙҙар ҡалала йәрһеҙ интегә

**"Киске Өфө"нөң 47-се һанында Баймаҡ ҡалаһынан "Бәхетле" димселек агентлығы тураһында уҡыным. Уны ойоштороусы Зөлфиә Әфләтүнова ҡалай шәп эшләгән, тип ҡыуандым. Сөнки хәҙер буйҙаҡлыҡ беҙҙең милләттең төп бәләләренең береһенә әйләнеп бара. Һүҙҙәремде беҙҙең Мәләүез районы миҫалында раҫламаҡсы булдым.**



Журналист йомошо менән район буйлап командировкаға сыҡҡанда, бер ауылдың биләмә башлығы менән дә ошо буйҙаҡлыҡ тураһында һөйләшеп киттек. Ул бер егетте маҡтап һөйләп алды:

- Бик егәрле егет, ҡушҡанды көтөп тормай. Ҡара таңдан үҙенекен теүәлләп, силсәүит эшенә лә өлгөрә, ауылдаштарына ла ярҙам итә: баҡсаһын һөрөп бирә, бесәнен сабыша. Эсмәй, тартмай, тик... үтә баҫалҡы. Ошо егеткә кәләш табып бирһәгеҙ, бик мәслихәт булыр ине. Юғиһә, утыҙға етеп бара, өйләнмәгән.

Буйҙаҡ утыҙға тиклем үҙе өйләнмәһә, унан һуң ҡурҡып өйләнмәй, тиҙәр. Ауыл биләмәһе рәйесенең хафаланыуы бер ҙә юҡҡа түгелдер, тип, үтә лә баҫалҡы тигән егеттең үҙен күреп һөйләшкәйнек, ул өйләнмәй йөрөүенең сәбәбен ваҡыт юҡлыҡҡа ауҙарҙы.

Икенсе ауылда ла шундай күренешкә тап булдыҡ. Әлегеләй көҙ мәле, халыҡтың ҡош-ҡортон һуйып эш иткән ваҡыты. Бер өйгә инһәк, әсәһе бәйләм бәйләй, ә улы алъяпҡыс кейеп, өйрәк йолка. Унлап башын таҙартып һалған, янында йолҡонмаған йәнә биш-алты баш күренә.

- Башҡа өмәселәрегеҙ ҡайҙа һуң? - тибеҙ.

- Минең улым үҙе унауға торош итә, - ти әсә, ҡуҡырая биреп. -Өмәгә саҡырһаң, ҡатын-ҡыҙ, эште еңеләйтәбеҙ тип, хәләл генә ҡош-ҡортто ҡайнар һыуға сумырып алып йолҡа. Ундай ҡаҙ-өйрәктең йөнө аҙаҡ бер нимәгә лә эшкинмәй. Йыл һайын өс яҫтыҡлыҡ ҡаҙ-өйрәк аҫрайбыҙ...

Ҡатын улының һәр хәрәкәтен күҙәтә, өйрәтә, унынса эшләмәһә, һуҡранып та ала. Ҡырҡ йәштән ашҡан был ирҙең әсәһенең һәр һүҙе менән өнһөҙ килешеүенән уның әлегә тиклем өйләнәй йөрөү сәбәбен аңлауы ҡыйын түгел ине. Әсә кеше шулай тип тә өбөрҙе әле:

- Килене лә, сурты ла кәрәкмәй, улым үҙе ҡыҙҙар кеүек...

Ошо уҡ ауылда икенсе бер әсә, киреһенсә, улының өйләнмәүенә зарланды:

- Эсмәй ҙә, тартмай ҙа, төҫкә лә һөймәлекле генә. Өйләнеү тураһында һүҙ сыҡһа, әлегерәк шаяртып була ла ауап ҡайтара ине, хәҙер был темаға бөтөнләй һөйләшкеһе килмәй, ярһый ҙа китә. Урамға ла сыҡмай, үҙенә йомолғандан-йомола бара. Былай ауырыған кешегә лә оҡшамай. Өйләнәм, тиһә, бөгөндән һорап, туй үткәрер инем.

Эйе, буйҙаҡлыҡ милләтебеҙгә янаған иң оло хәүефкә әйләнә бара бөгөн, сөнки беҙҙә демография үҫеше тап ошо ғаилә ҡороп, тул йәйеп, балалар үҫтереүгә бәйле бит. Был социаль проблема бигерәк тә ауылдарҙа киҫкен. "Минең улым ауылда ҡала, көтөүсе була" тип үҫтергән балаларыбыҙға, колхоз булғанда эш бар ине, дөйөм хужалыҡтар тарҡалғас, улар эшһеҙ ҙә, ашһыҙ ҙа тороп ҡалды. Күп атай-әсәй, үҙебеҙ этләнгән дә еткән, тип, ҡыҙҙарын уҡытырға ҡалаға ебәреп бөттө. Шулай булғас, һәр башҡорт ауылында өйләнмәй ҡартайыусы егеттәр байтаҡ. Миҫалға Иштуған ауылын ғына алайыҡ. Унда бөгөн 380 кеше йәшәй. Шуның 47-һе -буйҙаҡ. Туғыҙы өйләнеп айырылған, ә ҡалғандары бөтөнләй ғаилә ҡормаған. Буйҙаҡтарҙың иң олоһона 50 йәш. Үҙе олатай булыр йәштә.

Тормош юлын ингә-иң терәшеп үтерлек икенсе яртыһын ҡайһы берәүҙәр еңел генә таба. Тулы гармонияла, һөйөү, яратыу тойғолары солғанышында, татыулыҡта, берҙәмлектә үтә тормош һуҡмағынан улар. Икенселәре ғүмер буйы эҙләй. Ә ҡайһы берәүҙәр бөтөнләй эҙләмәй, тыныс ҡына өйөндә ултыра. Ғөмүмән, өйләнмәй, буйҙаҡ тормошон хуп күреүҙең бер нисә сәбәбе бар.

Үрҙә килтерелгән тәүге осраҡтағы һымаҡ, ҡайһы берәүҙәр ғаилә ҡормауын ваҡыт юҡлығы менән бәйләй. Психологтар әйтеүенсә, эшкә мөкиббән бирелгәндәр үҙенең ғәҙәти тормошон боҙорға теләмәй, шуға күрә тормош ҡормай, бер үҙе йәшәүгә өҫтөнлөк бирә. Ундайҙар, ғәҙәттә, хаҡлы ялға сыҡҡас, йәки ауырып йығылғас ҡына ғүмере заяға уҙғанын аңлай.

Өйрәк йолҡҡан ҡырҡ йәштән уҙған улын "ҡыҙҙар кеүек" тип маҡтаған әсәйҙәрҙең дә гәйебе бар улдарының яңғыҙлығында. Өйләнеүен ашыҡтырмағас, йыл һайын эшләгән өсәр-дүртәр мендәре ни хәжәтемә икән һуң? Буласаҡ килендәренән көнләшкән әсәйҙәр, шулай итеп, яратҡан улдарын яңғыҙлыҡҡа дусар иткәнен ишеткәнем бар. Ундайҙар килененә юҡ-бар гәйеп тағып, улын айыртып ала, йә булмаһа бөтөнләй өйләндермәй.

Ҡайһы берәүҙәр өйләнеү - муйынына ҡамыт кейеү, иркенде юғалтыу, тапҡан малыңды кем менәндер уртаҡлашыу, тип ҡурҡа.

Икенселәр туй яһарға, мәһргә аҡса булмауын йәки торлаҡһыҙлыҡты сәбәп итә. Ә шулай ҙа яңғыҙлыҡтың төп сәбәбе - Хоҙай Тәғәлә һинең өсөн генә яралтҡан икенсе яртыңды таба алмау. Бигерәк тә ауыл егеттәренә был йәһәттән ауырға тура килә. Ауыл тормошо ауыр, шуға ла ҡыҙҙар, үрҙә әйтеп китеүебеҙсә, ҡалаға ынтыла. Ауылда - егеттәр, ҡалала ҡыҙҙар йәрһеҙ зарыға. Ана шуларҙы осраштырып, ҡауыштырыу өсөн "димселәр мәктәбен" тергеҙергә кәрәк, минеңсә. Димләп кәләш алыуҙы, кейәүгә барыуҙы әллә нимә һымаҡ күрә йәштәр. Ул борондан килгән ҡанун-ғәҙәт, уны инҡар итеп булмай.

Һәм тағы. Ике меңенсе йылдар башында районда бик матур традиция йәшәй ине. Ауыл йәштәре концерт программаһы әҙерләп, күрше ауылдарға сыҡты, эстафета һымаҡ, берберенә сарандың символын тапшыра килде. Ошо осрашыуҙар мәлендә байтаҡ йәштәр бер-береһен тапҡандыр, ҡауышҡандыр, тип уйлайым. Димләүҙәрҙән тыш, әлеге йоланы тергеҙеп, йәштәребеҙҙе осраштырыуҙың, таныштырыуҙың башҡа сараларын эҙләргә кәрәк. Быны йәмәғәт ойошмалары ла, хакимиәттәр ҙә, ЗАГС бүлеге хеҙмәткәрҙәре лә ойоштора ала. Был мәсьәләне хәл итеүгә ҡумаҡлап тотонмай булмай. Иң мөһиме, был маҡсатта ойошторолған теләһә нindай сара ла һөҙөмтәһеҙ ҡалмаясаҡ икәненә иманым камил.

**Лена АБДРАХМАНОВА.**

✓ Ҡанундарҙы үтәмәйенсә генә Аллаһы Тәғәләгә ялбарып нимәләр һорау - Иблискә генә файҙа. Барыһы өсөн дә түләргә кәрәк, шул иҫәптән Аллаһҡа ла - уның ҡанундарын үтәп!



СӘЛӘМӘТ БУЛ!

# ҮЛЕМГӘ ДУСАР ИТКӘН СИР



**Туҡталышта хәлһеҙләнеп эскәмйәгә ултыра төшкән инәй янына кешеләр йыйылды. "Дәүлинйәһе күтәрелгән. Минеке лә шулайта ла ҡуя, - тине оло йәштәрҙәге инәй иң белдеклеһе булып. - Бына, балалар ошо дарыуҙы ҡаптырығыҙ, хәҙер үтә лә китә", - тип бер дарыу төймәһен һуҙҙы. Шунда уҡ дарыуҙы йотоп ебәргән ауырыуҙың хәле яҡшыра башлағас, туҡталыштағы өлкәндәр дарыуҙың исемен һораша башланы. "Ҡайһы дарыуханала бар? Улай булғас, ала һалып ҡуйырға кәрәк!" - тиеште улар.**

Күптәргә таныш күренештер был. Әмәлгә, бәләкәй ҡалала, ауылдарҙа хәлһеҙләнеп йығылған кешеләргә күмәк көс менән ярҙам итеп ебәрәләр, ә бына бер-береһен белмәгән мегаполистарҙа ҡолаған әҙәмде күптәр битараф рәүештә урап үтә. Күпме кешенең шулай, медицина ярҙамы ваҡытында күрһәтелмәү сәбәпле, ғүмере өҙөлә!

Республикабыҙҙа бер нисә йыл рәттән "Һәр ғаиләгә тонометр!", "Ҡан баҫымыңды үлсә!" кеүек акциялар үткәрелһә лә, халыҡ былдай сараларҙы етди ҡабул итергә ашыҡмай. Ҡан баҫымы ҡапыл күтәрелгән кешеләр дауаханаға барырға ашыҡмай. Уның ҡарауы, таныштары кәңәш иткән йәки ҡайҙалыр кемгәлер "нык килешкән" дарыу тураһында ишетеп, шуны эсәләр. Ә һәр кем бының алдынан тулы медицина тикшереүе үтергә, анализдар бирергә, күҙҙәренең ҡан баҫымын үлсәтергә тейеш икәнлеге хаҡында уйлап та бирмәйҙәр. Әлбиттә, ҡайһы саҡта дауаханаға барып күренеү өсөн дә ҡорос нервылар кәрәк. Кемдең сиратта торғоһо, табипты оҙаҡ көтөп ултырғыһы килһен? Шулай ҙа һаулығын хәстәрләгән кеше былдай һынауҙы мотлаҡ үтергә тейеш.

Ҡан баҫымы ауырыуҙарына ни өсөн шундай ныҡлы иғтибар бирелә һуң? Сөнки быңдай сир йыш ҡына кешене аяҡтан йыға (инсульт, инфаркт), үлем осраҡтары ла йыш теркәлә. Ҡан баҫымының юғары булыуы тиҙ генә беленмәүе айырыуса хәүефле. Кешеләр тәүге йылдарҙа хатта уның тураһында белмәй ҙә. Ауырыған кеше хәлһеҙлеген магнитлы көндәргә, компьютер артында оҙаҡ эшләүенә, физик һәм эмоциональ яҡтан арығанлығына бәйләй. Ҡан баҫымының юғары булыуының тәүге билдәләре, ул: баш ауыртыуы (соңҡа өлөшөндә), баш әйләнеүе, күҙ алдында ҡара нөктәләр күренеүе, ҡолаҡ шаулауы, танау ҡанауы, хәлһеҙлек, күңел болғаныуы, ҡоҫоу, йөрәктең йыш тибеүе, йөрәк сәнсеүе, тын етмәү.

Ҡан баҫымы ауырыуҙарына юл ҡуймау, уны иҫкәртеү өсөн бигерәк тә 40 йәште үткәндәргә үҙ һаулығына иғтибарлы булырға кәрәк. Һәр йортта мотлаҡ тонометр булырға тейеш. Әгәр өйҙә булмаһа, ҡан баҫымын үлсәүҙең һәр мөмкинлеген файҙаланырға кәрәк. Ваҡытында дауаланмаған кешене инфаркт, инсульт һуғыуы ихтимал. Моғайын, кемдеңдер үлеменә аптырап, "Кисә генә шапшаҡтай, һап-һау йүгереп йөрөй ине",- тигәндәрен ишеткәнегеҙ барҙыр. Ошонда беленә лә инде аҫтыртын юғары ҡан баҫымының ни тиклем ҡурҡыныс һәм хәүефле булыуы. Ҡан баҫымы юғары булып та, үҙен яҡшы тойған кешеләр "минең эш ҡан баҫымым шулай" тип алдана. Киреһенсә, аҫтыртын йүнәлеш алған сир көтмәгәндә аяҡтан йығыуы, үлемгә килтереүе ихтимал.

Ҡан баҫымы ниңә барлыҡҡа килә һуң? Уның нәҫелдән килеүе ихтимал. Шулай уҡ ирҙәр-45, ҡатындар 55 йәштән һуң был сиргә йышыраҡ дусар була. Бынан тыш ауырыуҙы "теләп" алыусылар ҙа бар. Ул тәмәке тартыу, һимереү, әҙ хәрәкәт итеү, дөрөҫ туҡланмау, холестериндың юғары булыуы, төрлө кимәлдәге стресс кисереү.

Юғары ҡан баҫымы менән ауырығандар уны тәүлегенә 2-3 мәртәбә мотлаҡ үлсәргә тейеш. Ҡан баҫымын үлсәгәндә арҡа төҙ тотолоп, ултырғысҡа һөйәлеп ултырырға кәрәк, һөйләшергә, аяҡты аяҡҡа һалырға ярамай. Ҡан баҫымының күпме булыуын яҙып, билдәләп барырға кәрәк. "Теге кеше шул дарыуҙы эскәйне, ҡан баҫымы төшкән", тигән һүҙҙәргә ҡарап, дарыуханаға ашыҡмағыҙ. Һәр кем үҙенә махсус дауалауҙы тулы медицина тикшереүенән һуң ала башларға тейеш. Шулай уҡ төрлө дарыу үләндәре, халҡыбыҙҙың бай медицинаһы тураһында ла онотorға ярамай. Тик уларҙың барыһы ла табип менән кәңәшләшкәндән һуң ҡулланылырға тейеш.

Һеҙҙең сәләмәтлегегеҙ-һеҙҙең байлығығыҙ ғына түгел, ә ул яҡындарығыҙ, бигерәк тә балаларығыҙ өсөн мөһим булыуын онотмағыҙ.

**Гүзәл ИҪӘНГИЛДИНА.**

**(Республика кардиология диспансеры мәғлүмәттәре буйынса әҙерләнде).**

МӨҒЖИЗӘЛӘР ЗАМАНЫ



# КОСМОЭНЕРГЕТИКА ҺӘМ СӘЛӘМӘТЛЕК



## Һауығыу хаҡы

**Аҡса - энергия эквиваленты. Дауаланыу өсөн хаҡ түләү - үҙенә күрә алмашыу, пациент үҙендә булған энергияның бер өлөшөн дауаланыу хаҡына бирә. Әгәр дауаланыу өсөн хаҡ түләнмәй йәки ул бик түбән икән, пациент йыһанға бурыслы булып ҡала. Был бурысты унан аҡсалата түгел, энергияның икенсе төрҙәре менән аласаҡтар. Бушлай эштең хаҡын Иблис түләй.**

Һәр алған нәмәнең хаҡын түләү - мөһим ҡағиҙә. Әгәр һеҙгә бесәй балаһы бүләк иттеләр икән, бер тин булһа ла бирегеҙ йәки нимәлер бүләк итегеҙ, бик булмаһа, ҡосаҡлап үбегеҙ. Һәр ваҡыт барыһы өсөн дә рәхмәтле булырға кәрәк. Рәхмәтле булыу нимә ул? Ул - именлек бүләк итеү!

Ҡапыл тапҡан әйберегеҙгә, мираҫҡа ҡыуанмағаҙ, сөнки хаҡ түләнмәгән нәмә һеҙҙә оҙаҡ тормаясаҡ, киреһенсә, ярлылыҡҡа алып килеүе мөмкин. Һис ҡасан лотереяла уйнарға йәки нимәнелер бушлай алырға тырышырға ярамай, сөнки аҙағынан барыбер юғалтыу буласаҡ. Бер кемгә лә буш ҡул менән ҡунаҡҡа бырырға тырышмағыҙ, һәр ерҙә лә һәр нәмә өсөн түләргә тырышығыҙ. Һәр кем бушлай ашаған телеме һәм бушлай эскән сәйе өсөн дә түләргә тейеш (Бушлай ашаған бер телеме өсөн шайтандың баҫыуҙа өс йыл бушлай эшләгәнен иҫегеҙгә төшөрөгөҙ).

Бик йыш кешегә бәләләр һәм ғазаптар, ниһайәт, ул Аллаһҡа мөрәжәғәт итһен, Уға килһен өсөн ебәрелә. Барыһы ла яҡшы булғанда күптәр Аллаһы Тәғәлә хаҡында уйлап та бирмәй бит.

Бихисап изгеләр үткән тормоштарында ныҡ гонаһлы булалар, тимәк, уларҙың ғазабы ла ҡот осҡос була. Әммә һөҙөмтә мөһимерәк - улар Аллаһҡа һығына, Уға мөрәжәғәт итә. Уларҙың даны - изге булыуҙарында. Аллаһҡа мөрәжәғәт итеү, алмашҡа бер нәмә лә бирмәйенсә, унан нимәләр һорау түгел. Ҡанундарҙы үтәмәйенсә генә Аллаһы Тәғәләгә ялбарып нимәләр һорау - Иблискә генә файҙа. Барыһы өсөн дә түләргә кәрәк, шул иҫәптән Аллаһҡа ла - уның ҡанундарын үтәп!

Беҙ аҡса булмау сәбәпле кемгәлер ярҙам итеүҙән баш тартмайбыҙ, әммә эҙемтәләре хаҡында ла иҫкәртергә тейешбеҙ. Дауаланыу хаҡын түләү тураһында Ғайса бәйғәмбәр ҙә әйткән: "И тотчас проказа сошла с него нет. И он повелел ему пойти показаться священнику и принести жертву за очищение свое". Аҡсағыҙҙы һаҡлауға һалыуҙың иң файҙалыһы - үҙеңә, үҙеңдең үҫешеңә, сәләмәтлегеңә һалыу! Нескә планға бары тик үҙ үҫешеңдең емештәрен генә алып сығырға мөмкин.

**Рауфан МОРТАЗИН.**
**(Дауамы бар).**

УҢЫШ ҠАҘАН



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Уңыш ҡулсаһын нисек үҙ теләгеңә буйһондорорға?

Аң торошо беҙҙең тойоу ағзаларының сигналы буйынса билдәләнә. Төп тойоу ағзалары - күреү һәм ишетеү, унан башҡа тағы ла тәм, еҫ, һиҙеү бар. Ярлылыҡ, мәҫәлән, аҙ аҡса менән генә түгел, ә башҡа тойоу формалары менән дә билдәләнә: иҫке keләмгә ҡағылыу, осһоҙло сосискалар тәме, серегән ағас еҫе...

Иң төп тойғо, әлбиттә, - күреү. Оптик каналдар аша беҙ донъяны 80 процент ҡабул итәбеҙ. Был күҙаллауҙың мөһимлеген күрһәтә. Күп мәҙәниәттәрҙә осраған Уңыш ҡулсаһы тормош әйләнешен күҙ алдына килтерә. Уны үҙегеҙгә лә эшләргә мөмкин. Был осраҡта үҙ ҡулығыҙ менән яҙған һәр һүҙ һеҙҙең өсөн байығыу ағымына ҡушылған ижади канал булып тора. Ҡулсаның уртаһында ОМ һүҙе яҙыла. Унда "Мин" тип тә яҙып ҡуя алаһығыҙ. Әммә ОМ - ныҡ көслө символ, шуға күрә ҡулса эсенә уны яҙыу яҡшыраҡ. Тормошта һеҙҙе илһамландырған сифаттарҙы ҡулсаның арасалары итеп эшләгеҙ. Ҡулсаның туғыны тирәләй байлыҡтың шәхси аффирмацияһын яҙығыҙ. Түбәндә бер нисә миҫал бирелә.




**Рухи ҡуйылыш:** Илаһ көсө мине кәрәк булған барлыҡ нәмәләр менән тәьмин итә.

**Фәнни ҡуйылыш:** Ни тиклем энергиямды күберәк бирәм, шул тиклем күберәк алам. Минең барлыҡ өлкәләрҙәге байлығым бер туҡтауһыҙ арта бара.

**Философик ҡуйылыш:** Байлыҡ - тәбиғәттең айырылғыһыҙ өлөшө. Мин - тәбиғәттең бер сағылышы. Байлыҡ- мин үҙем.

Кәрәкле аффирмацияны үҙегеҙ уйлап табығыҙ. Иң көслөһө булып рухи ҡуйылыш тороуын да онотмағыҙ. Уңыш ҡулсаһының һүрәтен күренгән урынға элегеҙ, уны йыш, күрерлек булһын. Әммә бынан алда һүрәтте метафизик әүҙемләштерергә кәрәк.

**Уңыш ҡулсаһын әүҙемләштереү күнекмәһе:**

● Уңыш ҡулсаһының һүрәте төшөрөлгән ҡағыҙҙы ҡулығыҙҙа тотоп, көсөргәнештән арынығыҙ.

● Өндәге төш халәтенә инеп, Ҡулсаны күҙ алдығыҙҙан 15 сантиметр тирәһе алыҫлыҡҡа ҡуйығыҙ.

● Уның арасалары тыш яҡҡа киңәйеп, тормошоғоҙҙоң барлыҡ өлкәләренә үтеп инеүен, һеҙгә уңыш, байлыҡ, етеш тормош килтереүен уйығыҙҙа ғына күҙәтегеҙ.

● Күҙҙәрегеҙҙе асығыҙ, ысынбарлыҡҡа ҡайтығыҙ, Уңыш ҡулсаһын үҙегеҙ йыш күрерлек урынға ҡуйығыҙ.

Хәҙер был Ҡулса, ысынлап та, һеҙҙеке. Әгәр был ҡағыҙ битен һыуытҡыс ишегенә йәбештереп ҡуйғанһығыҙ икән, һыуытҡыстың ишеген асҡан һайын уның ҡеүәтен күрәсәкһегеҙ. Уның тәьҫире шунда уҡ һиҙелмәйәсәк. Әммә тормош, ғөмүмән, яйланыр, ихтыяждарығыҙ ҡәнәғәтләндерелер, юрғанға ҡарап аяҡ һуҙыу урынына үҙегеҙгә тап килгән юрған һайларһығыҙ.

**Роберт СТОУН.**



## 28 НОЯБРЯ
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "Модный приговор"
11.50 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "ЖКХ"
13.20 "Участковый детектив"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Женский журнал"
15.25 "Хочу знать"
16.00 "Обручальное кольцо". Сериал
16.55 "Предел желаний", 5-я серия
18.00 Вечерние новости
18.50 "Давай поженимся!"
19.50 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Фурцева", 9-я серия
22.30 "Судьба на выбор"
23.35 "Познер"
00.35 Ночные новости
00.45 "Форс-мажоры", 10-я серия
01.35, 03.05 "Король"
03.00 Новости
03.20 "В паутине закона"
04.10 "Участковый детектив"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.00 "С новым домом!"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Вести-Башкортостан"
11.50 "Кулагин и партнеры"
13.00 "Тайны следствия". Сериал
14.00 "Вести"
14.30 "Вести-Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Ефросинья. Продолжение", 190-я серия
16.00 "Вести"
16.30 "Вести-Башкортостан"
16.50 "Все к лучшему", 220-я серия
17.55 "Здравствуй, мама!" 36-я серия
18.55 "Прямой эфир"
20.00 "Вести"
20.30 "Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Тайны следствия-10". Сериал
22.50 "Выборы-2011. Дебаты"
23.40 "Городок"
00.40 "Вести+"
01.00 "Профилактика"
02.10 "Империя солнца". Биографическая драма

### НТВ

05.55 "НТВ утром"
08.30 "Морские дьяволы". Сериал
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.25 "Судебный детектив". Сериал
14.40 "Центр помощи "Анастасия"
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.25 "Прокурорская проверка"
17.40 "Говорим и показываем"
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Литейный". Сериал
21.30 "Пятницкий". Криминальный сериал
23.15 "Сегодня. Итоги"
23.35 "Честный понедельник"
00.25 "Школа злословия"
01.10 "Футбольная ночь"
01.45 "В зоне особого риска"
02.20 "Один день. Новая версия"
02.55 "Ставка на жизнь". Остросюжетный сериал
04.55 "Сыщики". Детективный сериал

### БСТ

**07.00 "Салям"**
**10.00, 00.00 "Полезные новости"**
**10.15, 15.15 "Учим башкирский язык"**
**10.30, 15.30 "Гора новостей"**
**10.45 "Городок АЮЯ"**
**11.00, 00.15 "Замандаштар"**
**11.15, 17.45 "Орнамент"**
**11.30, 12.30, 13.30, 14.30, 16.30, 17.30, 18.30, 19.30, 20.30 "Новости"**
**11.45 "Новости недели"**
**12.40, 14.40, 18.00 "Выборы-2011"**
**12.45 "Надо знать!"**
**13.00, 22.00 "На самом деле"**
**13.45 "Бахетнама"**
**14.45 "В активном поиске"**
**15.45 "Царь горы"**
**16.00 "Бауырхак"**
**16.15 "Шатлык йыры"**
**16.45 "Историческая среда"**
**17.15 "Надо знать!"**
**18.05 "Еду я в деревню"**
**18.30, 22.30 "Новости" (на башк. яз.)**
**18.45, 19.40 Художественный фильм**
**20.40 "Сэнгелдек"**
**21.00 "Следопыт"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**23.00 Послесловие" с Азаматом Саитовым"**
**23.15 "Пора разобраться"**
**00.30 Поет Назифа Кадырова**

## 29 НОЯБРЯ
## ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
07.05 "Выборы-2011" (по окончании - телеканал "Доброе утро")
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "Модный приговор"
11.50 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "ЖКХ"
13.20 "Участковый детектив"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.25 "Хочу знать"
16.00 "Обручальное кольцо". Сериал
16.55 "Предел желаний", 6-я серия
18.00 Вечерние новости
18.25 "Выборы-2011"
18.50 "Давай поженимся!"
19.50 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Фурцева", 10-я серия. Биографическая драма
22.30 "Три семьи"
23.35 Ночные новости
00.00 "terra nova", 10-я серия
00.55 "Святоша"
03.00 Новости
03.05 "Миссия спасения"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Ауаз"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Вести-Башкортостан"
11.50 "Выборы-2011"
13.00 "Тайны следствия". Сериал
14.00 "Вести"
14.30 "Вести-Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Ефросинья. Продолжение", 191-я серия
16.00 "Вести"
16.30 "Вести-Башкортостан"
16.50 "Все к лучшему", 221-я серия
17.55 "Здравствуй, мама!" 37-я серия
18.55 "Прямой эфир". Ток-шоу
20.00 "Вести"
20.30 "Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Тайны следствия-10". Сериал
22.50 "Выборы-2011. Дебаты"
23.40 "Ликвидация", 12-я серия
00.40 "Вести+"
01.00 "Профилактика"
02.10 "Честный детектив"
02.40 "Молодой Эйнштейн"
04.25 "Городок. Дайджест"

### НТВ

05.55 "НТВ утром"
08.30 "Морские дьяволы". Сериал
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Внимание: розыск!" с Ириной Волк"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Судебный детектив". Сериал
14.40 "Центр помощи "Анастасия"
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.25 "Прокурорская проверка"
17.40 "Говорим и показываем"
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Литейный". Сериал
21.30 "Пятницкий". Сериал
23.15 "Сегодня. Итоги"
23.35 "Формат А4". "Островок безопасности". Сериал
00.35 "ГРУ. Тайны военной разведки"
01.30 "Кулинарный поединок"
02.35 "Один день. Новая версия"
03.05 "Ставка на жизнь"
04.55 "Сыщики". "Без шума и пыли"

### БСТ

**07.00 "Салям"**
**10.00, 23.45 "Полезные новости"**
**10.15, 15.15 "Учим башкирский язык"**
**10.30, 15.30 "Гора новостей"**
**10.45 "Царь горы"**
**11.00, 00.00 "Замандаштар"**
**11.15, 17.45 "Орнамент"**
**11.30, 12.30, 13.30, 14.30, 16.30, 17.30, 19.30, 20.30 "Новости"**
**11.45 "Пора разобраться"**
**12.40, 14.40, 18.00 "Выборы-2011"**
**12.45, 17.15 "Надо знать!"**
**13.00, 22.00 "На самом деле"**
**13.45 "Башкорт йыры"**
**14.45 "В активном поиске"**
**15.45 "Борсак"**
**16.00 "Байтус"**
**16.15 "Йырлы караз"**
**16.45 "Послесловие" с Азаматом Саитовым"**
**17.00 "Взгляд без слов"**
**18.30, 22.30 Новости "(на башк. яз.)**
**18.45 "Открытый чемпионат России по хоккею - Чемпионат КХЛ. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Металлург" (Магнитогорск). Прямая трансляция. В перерывах: Новости**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**23.00 Уфимское "Времечко"**
**23.30 "Криминальный спектр"**
**00.15 "Ретро-концерт"**

## 30 НОЯБРЯ
## СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
07.05 "Выборы-2011" (По окончании - телеканал "Доброе утро")
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "Модный приговор"
11.50 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "ЖКХ"
13.20 "Участковый детектив". Сериал
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.25 "Хочу знать"
16.00 "Обручальное кольцо". Сериал
16.55 "Предел желаний", 7-я серия
18.00 Вечерние новости
18.25 "Выборы-2011"
18.50 "Давай поженимся!"
19.50 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Фурцева", 11-я серия
22.30 "Среда обитания"
23.35 "Ночные новости"
00.00 "Убийство", 10-я серия
01.10, 03.05 "Дитя человеческое". Фантастика
03.00 "Новости"
03.15 "Горный патруль"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.00 "С новым домом!"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Вести-Башкортостан"
11.50 "Выборы-2011"
13.00 "Тайны следствия"
14.00 "Вести"
14.30 "Вести-Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Ефросинья. Продолжение", 192-я серия
16.00 "Вести"
16.30 "Вести-Башкортостан"
16.50 "Все к лучшему". Сериал
17.55 "Здравствуй, мама!" 38-я серия
18.55 "Прямой эфир"
20.00 "Вести"
20.30 "Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Тайны следствия-10". Сериал
22.50 "Выборы-2011. Дебаты"
23.40 "Ликвидация", 13-я серия
00.40 "Вести+"
01.00 "Профилактика"
02.10 "Горячая десятка"
03.15 "Скрой у всех на виду"

### НТВ

05.55 "НТВ утром"
08.30 "Морские дьяволы". Сериал
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00 "Сегодня"
10.20 "В зоне особого риска"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.00 "Сегодня"
13.25 "Судебный детектив". Сериал
14.40 "Центр помощи "Анастасия"
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Прокурорская проверка"
17.40 "Говорим и показываем"
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Литейный". Сериал
21.30 "Пятницкий". Сериал
23.15 "Сегодня. Итоги"
23.35 "Формат А4". "Каждому свое"
00.35 "Внимание: розыск!" с Ириной Волк"
01.15 "Квартирный вопрос"
02.20 "Один день. Новая версия"
03.00 "Ставка на жизнь"
04.55 "Сыщики". "Любовь зла"

### БСТ

**07.00 "Салям"**
**10.00, 12.15, 23.45 "Полезные новости"**
**10.15, 15.15 "Учим башкирский язык"**
**10.30, 15.30 "Гора новостей"**
**10.45 "Борсак"**
**11.00, 00.00 "Замандаштар"**
**11.15, 17.45 "Орнамент"**
**11.30, 12.30, 13.30, 14.30, 16.30, 17.30, 19.30, 20.30 "Новости"**
**11.45 "Действующие лица"**
**12.40, 14.40, 18.00 "Выборы-2011"**
**12.45, 17.15 "Дело мастера"**
**13.00, 22.00 "На самом деле"**
**13.45 "Байык"**
**14.45 "В активном поиске"**
**15.45 "Цирк в 13 метров"**
**16.00 "Семер"**
**16.15 "Городок АЮЯ"**
**16.45, 21.00 "Историческая среда"**
**18.30, 22.30 "Новости" (на башк. яз.)**
**18.45, 19.40 Художественный фильм**
**20.40 "Сэнгелдек"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**23.00 "Пора разобраться"**
**00.15 "В сердце вашем". Песни Нура Даутова**

## 1 ДЕКАБРЯ
## ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "Модный приговор"
11.50 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "ЖКХ"
13.20 "Участковый детектив"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.25 "Хочу знать"
16.00 "Обручальное кольцо". Сериал
16.55 "Предел желаний", 8-я серия
18.00 Вечерние новости
18.50 "Давай поженимся!"
19.55 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Фурцева", 12-я серия
22.30 "Человек и закон"
23.35 Ночные новости
00.00 "Подпольная империя"
01.05, 03.05 "Мачеха". Мелодрама
03.00 Новости
03.30 "В паутине закона"
04.20 "Участковый детектив"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "От всей души"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Выборы-2011"
13.00 "Тайны следствия"
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Ефросинья. Продолжение", 193-я серия
16.00 "Вести"
16.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
16.50 "Все к лучшему". Сериал
17.55 "Здравствуй, мама!" 39-я серия
18.55 "Прямой эфир"
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Тайны следствия". "Семейное дело". Сериал
22.50 "Выборы-2011. Дебаты"
23.40 "Ликвидация", 14-я серия
00.40 "Вести+"
01.00 "Профилактика"
02.10 "Из вечности"
03.55 "Комната смеха"
04.45 "Вести. Дежурная часть"

### НТВ

05.55 "НТВ утром"
08.30 "Морские дьяволы". Сериал
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00 "Сегодня"
10.20 "Медицинские тайны"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.00 "Сегодня"
13.25 "Судебный детектив". Сериал
14.40 "Центр помощи "Анастасия"
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.25 "Прокурорская проверка"
17.40 "Говорим и показываем"
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Литейный"
20.30 "Один день". Криминальная драма
22.25 "Сегодня. Итоги"
22.45 Футбол. Лига Европы УЕФА
00.55 "Женский взгляд"
01.45 "Всегда впереди. Санкт-Петербургский Государственный университет"
02.45 "Дачный ответ"
03.50 "Спасатели"
04.20 "Сыщики". "Любовь зла"
05.25 "Лига Европы УЕФА. Обзор"

### БСТ

**07.00 "Салям"**
**10.00, 12.15, 23.45 "Полезные новости"**
**10.15, 15.15 "Учим башкирский язык"**
**10.30, 15.30 "Гора новостей"**
**10.45 "Цирк в 13 метров"**
**11.00, 00.00 "Замандаштар"**
**11.15, 17.45 "Орнамент"**
**11.30, 12.30, 13.30, 14.30, 16.30, 17.30, 19.30, 20.30 "Новости"**
**11.45 "Тамле" (на русск. яз.)**
**12.40, 14.40, 18.00 "Выборы-2011"**
**12.45, 17.15 "Надо знать!"**
**13.00 "На самом деле"**
**13.45 "Пора разобраться"**
**14.45 "В активном поиске"**
**15.45 "Книга сказок"**
**16.00 "Шэп арба"**
**16.15 "Йырлы караз"**
**16.45 "Специальный репортаж с празднования 100-летия со дня рождения Ж. Киекбаева**
**18.30, 22.30 "Новости" (на башк. яз.)**
**18.45 "Открытый чмпионат России по хоккею - Чемпионат КХЛ. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Динамо" (Рига). Прямая трансляция. В перерывах: Новости**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "Выбери столицу добра!"**
**23.00 "Пятый угол"**
**00.15 "Мелодии сердца"**

## 2 ДЕКАБРЯ
## ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "Модный приговор"
11.50 "Женский журнал"
12.00 Обращение Президента РФ Дмитрия Медведева к гражданам России (по окончании - Новости (с субтитрами)
12.25 "ЖКХ"
13.20 "Участковый детектив"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.25 "Хочу знать"
16.00 "Обручальное кольцо". Сериал
16.55 "Жди меня"
18.00 Вечерние новости
18.50 "Поле чудес"
19.55 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Владимир Высоцкий. Последний год"
22.35 "Высоцкий. Последний концерт"
23.40 "Гладиатор". Историческая драма
02.30 "Как выйти замуж за миллионера"
04.20 "В паутине закона"
05.10 "Участковый детектив"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.00 "Мусульмане"
09.10 "С новым домом!"
10.10 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Вести-Башкортостан"
12.00 Обращение Президента РФ Дмитрия Медведева к гражданам России
12.05 "Кулагин и партнеры"
13.00 "Мой серебряный шар"
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Ефросинья. Продолжение", 194-я серия
16.00 "Вести"
16.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
16.50 "Все к лучшему". Сериал
17.55 "Здравствуй, мама!" 40-я серия
18.55 "Прямой эфир"
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Юрмала-2011"
22.50 "Выборы-2011. Дебаты"
23.40 "Свой-чужой". Мелодрама
01.45 "Письма с Иводзимы". Историческая драма
04.15 "Мой серебряный шар"

### НТВ

05.55 "НТВ утром"
08.30 "Морские дьяволы". Сериал
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00 "Сегодня"
10.20 "Спасатели"
10.55 "До суда"
12.00 Обращение Президента РФ Дмитрия Медведева к гражданам России
12.05 "Суд присяжных"
13.00 "Сегодня"
13.25 "Суд присяжных. Окончательный вердикт"
14.40 "Центр помощи "Анастасия"
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.25 "Прокурорская проверка"
17.40 "Говорим и показываем"
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Литейный". Сериал
21.30 "Пятницкий". Сериал
23.30 "Прятки". Криминальная драма
01.20 "Дикая река". Триллер
03.35 "Ставка на жизнь". Сериал

### БСТ

**07.00 "Салям"**
**10.00, 12.15, 23.45 "Полезные новости"**
**10.15, 15.15 "Учим башкирский язык"**
**10.30, 15.30 "Гора новостей"**
**10.45 "Книга сказок"**
**11.00, 00.00 "Замандаштар"**
**11.15, 17.45 "Орнамент"**
**11.30, 12.30, 13.30, 14.30, 16.30, 17.30, 19.30, 20.30 "Новости"**
**11.45 "Глас закона"**
**12.40, 14.40, 18.00 "Выборы-2011"**
**12.45, 17.15 "Надо знать!"**
**13.00, 22.00 "На самом деле"**
**13.45 "Арслан". Мужской телевизионный клуб**
**14.45 "В активном поиске"**
**15.45 "Зеркальце"**
**16.00 "Сулпылар"**
**16.15 "Царь горы"**
**16.45 "Автограф"**
**18.05 "Йома"**
**18.30, 22.30 "Новости" (на башк. яз.)**
**18.45, 19.40 Художественный фильм**
**20.40 "Сэнгелдек"**
**21.00 "Профили"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**23.00 "Уфимское Времечко"**
**23.30 "Криминальный спектр"**
**00.15 "Музыка на канале"**

## 3 ДЕКАБРЯ
## СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости
06.10 "Корабль-призрак"
07.20 "Играй, гармонь любимая!"
08.10 "Дисней-клуб"
09.00 "Умницы и умники"
09.45 "Слово пастыря"
10.00 Новости
10.15 "Смак"
10.55 "Евгений Миронов. "Фамилия обязывает". Док. фильм
12.00 Новости (с субтитрами)
12.15 "Среда обитания"
13.20 "Приходите завтра..."
15.10 "Екатерина Васильева. Из тени в свет перелетая". Док. фильм
16.15 "Единственному, до востребования". Мелодрама
18.00 Вечерние новости (с субтитрами)
18.20 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым"
19.25 "Болеро"
21.00 "Время"
21.15 "Мур". "Артисты", 1-я серия
22.15 "Прожекторперисхилтон"
22.50 "Что? Где? Когда?"
00.00 "Николай Носков. "Это здорово!" Юбилейный концерт
01.25 "Шоколад". Мелодрама
03.45 "Девчонки"

### РОССИЯ 1

05.05 "Грустная дама червей"
06.35 "Сельское утро"
07.05 "Диалоги о животных"
08.00 "Вести"
08.10 "Местное время. Вести-Башкортостан"
08.20 "Военная программа"
08.50 "Субботник"
09.30 "Городок. Дайджест"
10.05 "Дела и люди"
10.30 "Специальный корреспондент"
11.00 "Вести"
11.10 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.20 "Вести. Дежурная часть"
11.55 "Подари себе жизнь"
12.25 "Цвет войны. Битва за Москву". Док. проект
13.10 "Когда растаял снег". Военная драма
14.00 "Вести"
14.20 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.30 "Когда растаял снег". Продолжение
17.05 "Новая волна-2011". Лучшее"
18.55 Шоу "Десять миллионов" с Максимом Галкиным"
20.00 "Вести в субботу"
20.45 "Домработница". Мелодрама
22.30 "Девчата"
23.05 "Чертово колесо"
00.30 "Евровидение-2011"
02.35 "Денис-мучитель"
04.30 "Комната смеха"

### НТВ

05.30 "Аэропорт". Сериал
07.25 "Смотр"
08.00 "Сегодня"
08.20 "Золотой ключ"
08.45 "Академия красоты" с Ляйсан Утяшевой"
09.20 "Готовим с Алексеем Зиминым"
10.00 "Сегодня"
10.20 "Главная дорога"
10.55 "Кулинарный поединок"
12.00 "Квартирный вопрос"
13.00 "Сегодня"
13.20 "Своя игра"
14.15 "Дикий". Сериал
16.00 "Сегодня"
16.20 "Дикий". Сериал
19.00 "Сегодня"
19.25 "Дикий". Сериал
23.55 "ДиДюЛя". Большой концерт в Кремле!"
01.00 "Реквием для свидетеля"

### БСТ

**07.00, 18.30 "Новости" (на башк. яз.)**
**07.15 "Доброе утро"**
**08.00 Мультфильм**
**09.30, 13.30 "Взгляд без слов"**
**09.45 "Надо знать!"**
**10.00 "Бахетнама"**
**10.45 "Еду я в деревню"**
**11.15 "Арслан"**
**12.00 "Следопыт"**
**12.30 Новости (на русск. яз.)**
**12.45 "Дело мастера"**
**13.00 "Тэмле" (на русск. яз.)**
**13.45 "На страже закона"**
**14.00 "Дарю песню"**
**16.00 "Автограф". Ф. Надыршина**
**16.55 Открытый чемпионат России по хоккею - Чемпионат ВХЛ. "Торос" (Нефтекамск) - "Титан" (Клин). Прямая трансляция. В перерывах: Новости**
**19.15 "Выбери столицу добра!" Гала-концерт марафона "Добрых дел"**
**20.45 "Парад планет"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "Башкорт йыры"**
**22.30 "Башкорттар"**
**23.00 "Муз-базар"**
**23.30 Закрытие II Международного конкурса музыкантов-исполнителей им. З. Исмагилова. Гала-концерт**

## 4 ДЕКАБРЯ
## ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.50, 06.10 "Дело было в Пенькове"
06.00 Новости
07.50 "Армейский магазин"
08.25 "Дисней-клуб"
09.15 "Здоровье"
10.00 Новости (с субтитрами)
10.15 "Непутевые заметки"
10.30 "Пока все дома"
11.30 "Фазенда"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.15 "Галина Польских. В роли счастливой женщины". Док. фильм
13.20 "Белые росы"
15.00 Новости (с субтитрами)
15.15 "Ералаш"
16.15 "Место встречи изменить нельзя". Сериал
18.00 "Вечерние новости"
18.15 "Место встречи изменить нельзя". Сериал. Продолжение
21.00 "Воскресное "Время"
22.00 "Место встречи изменить нельзя". Сериал. Продолжение
00.00 "Выборы-2011"
00.15 "Место встречи изменить нельзя". Сериал. Окончание
00.30, 01.15, 02.15 "Мои звезды прекрасны"
01.00, 02.00, 03.00 "Выборы-2011"
02.35, 03.15 "Флика"

### РОССИЯ 1

05.40 "Женская дружба". Мелодрама
07.20 "Вся Россия"
07.30 "Сам себе режиссер"
08.20 "Смехопанорама" Евгения Петросяна
08.50 "Утренняя почта"
09.30 "Сто к одному"
10.20 "Вести-Башкортостан. События недели"
11.00 "Вести"
11.10 "С новым домом!"
11.25 "Тайны следствия-8". Детективный сериал
14.00 "Вести"
14.20 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.30 "Тайны следствия-8". Сериал
15.50 "Смеяться разрешается"
18.00 "Стиляги-шоу с Максимом Галкиным"
20.00 "Вести недели"
21.00 "Мой сводный брат Франкенштейн"
23.00 "Выборы-2011"

### НТВ

05.15 "Аэропорт". Сериал
07.00 "В поисках Франции"
08.00 "Сегодня"
08.15 "Русское лото"
08.45 "Их нравы"
09.25 "Едим дома!"
10.00 "Сегодня"
10.20 "Первая передача"
10.55 "Развод по-русски"
12.00 "Дачный ответ"
13.00 "Сегодня"
13.20"Своя игра"
Уважаемые телезрители! С 16.00 до окончания эфирного дня каждый час специальные выпуски программы "Сегодня"
14.15 "Дикий". Сериалы
21.55, 00.25 "Сибиряк". Остросюжетный фильм
22.55 "Сегодня. Итоговая программа"

### БСТ

**07.00, 09.30, 19.15 Новости (на башк. яз.)**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.30 "Тарихи фараз"**
**09.00 "Автограф"**
**09.40 "Йома"**
**10.00 "Тамыр представляет..."**
**11.30, 20.30 Новости (на русск. яз.)**
**11.45 "Дарман"**
**12.30 Новости недели (на башк. яз.)**
**13.00 "Тамле"**
**13.30, 14.30, 16.30 Новости**
**13.40 "За порогом"**
**14.00, 14.35 "Дарю песню"**
**16.00 "Дорога к храму"**
**16.45 "Замандаштар"**
**16.55 Открытый чемпионат России по хоккею - Чемпионат МХЛ. "Батыр" (Нефтекамск) - "Стальные Ижи" (Ижевск). Прямая трансляция. В перерывах: Новости**
**19.30 "Волшебный курай"**
**20.00 "Любимое дело"**
**20.30 "Новости спорта. Итоги"**
**21.00 "Урал Лото"**
**21.15 "Деловой Башкортостан"**
**21.30 "Новости недели"**
**22.15 "Байык"**
**23.15 "Вечер.com"**
**00.00 "Свидание с джазом"**

"Башҡортостан" телерадиокомпанияһы коллективы ВГТРК филиалы "Башҡортостан" ДТРК-һы директоры Дәүләтбаев Рәмис Рәжәп улының

**һөйөклө әсәһе**

вафат булыуы сәбәпле, уның һәм яҡындарының ауыр ҡайғыһын уртаҡлаша, рух ныҡлығы теләй.

**Донъя бер мосафирханалыр, инсан да рухтар ғәләменән, әсә ҡарынынан, балалыҡтан, йәшлектән, ҡартлыҡтан, ҡәбер ғәләменән әхирәткә күсеп киткән бер юлсылыр. Ауыр тупрағы еңел булһын мәрхүмәнең.**

ДИАЛОГ

# ЮЛБАШСЫЛАР ДӘҮЛӘТ ӨСӨН ГЕНӘ ТҮГЕЛ,

## халыҡ өсөн дә кәрәк

(Башы 8-9-сы биттәрҙә).

**Алда килтерелгән дәлилдәрҙән сығып, шундай һығымта яһарға ла булалыр: бал ҡорто күсе башлығы, юлбашсыһы булған инә ҡорт менән көслө. Әгәр ҙә ошо фекерҙе үҙебеҙҙең тормошҡа йүнәлтһәк, нимә тип әйтер инегеҙ?**

**Ә. ИШЕМҒОЛОВ:** Мин йыш ҡына үҙемә шундай һорауҙар бирәм: милләтебеҙ хәҙерге менталитеты менән йәшәһә, тарихтағы анауындай дауылдарҙы нисек үткән дә, Евразия киңлегендә нисек итеп үҙенең автономияһын төҙөй алған һуң? Ундай менталитет беҙҙең ҡанда әле лә йәшәй, тик халыҡты үҙенең артынан эйәртә алырлыҡ юлбашсылар кәрәк.Бөгөн беҙ шундай юлбашсыларға мохтажбыҙ.

**Ә.БОҪҠОНОВ:** Килешәм, күстәге инә ҡорт кеүек, беҙгә юлбашсылар кәрәк. Бер быуатҡа артҡа ҡараһаҡ, халыҡтың рухы бер нисә баҫҡысҡа юғарыраҡ булған. Революция алдынан дүрт тапҡыр Рәсәй Думаһы үтә. Уларҙың һәр береһендә лә башҡорт депутаттары ҡатнаша. Шунда Хәсәнов фамилиялы беҙҙең бер депутат алты тапҡыр сығыш яһай. Ул сығышында "Беҙ яулап алынған халыҡ түгел, Рус дәүләте менән килешеү төҙөнөк. Беҙ ерҙең хужаһы, ерҙәребеҙҙе кире ҡайтарығыҙ", тип белдерә. Хәсәновтан тыш, Әхтәмов, Мутиндар, Диваевтар, Сыртлановтар үткер генә сығыш яһай. Улар дворян булыуҙарына ҡарамаҫтан, һис нәмәнән ҡурҡып тормайынса, халҡыбыҙҙың мәнфәғәтен оло ҡорҙа яҡлап сыға. Хәҙерге ваҡытта Рәсәй Думаһында берәр Башҡортостан депутаты сығып, башҡорт милләтенең мәнфәғәтен яҡлап ике ауыҙ һүҙ әйткәне бармы?

Юлбашсы мәсьәләһенә килгәндә, күптәр "Әгәр ҙә мин теге йәки был урында өндәшмәй ҡалһам, властар тарафынан миңә һәйбәт мөнәсәбәт һаҡланыр", тип уйлай һәм яңылыша. Кеше үҙенең төплө дәлиле, ныҡышмалылығы, принципиаллеге менән һүҙендә нығыраҡ торған һайын, хатта уға ҡаршы булғандар ҙа ул кешене нығыраҡ ихтирам итәсәк. Күптәр хатта ул кешенең ныҡлы позицияһына ҡарап, үҙенең фекерен үҙгәртә. Ә беҙҙеңсә юлбашсы булған кеше йә властыи хуплап, йә тәнҡитләп йөрөргә тейеш. Юлбашсылыҡ ике сик араһында йөрөүҙе аңлатмай, юлбашсылыҡ - ул фекерләү һәләте. Юлбашсының һүҙенә бер үк ваҡытта халыҡ та, властар ҙа иғтибар итергә тейеш. Юлбашсылар халыҡҡа ғына түгел, дәүләт өсөн дә кәрәк. Күп кенә кешеләр төрлө сәбәптәр арҡаһында осраҡлы рәүештә власҡа килеп эләгә. Ул үҙенең сәйәсәтен үткәреү өсөн кемгә таяна һуң? Әлбиттә, ул халыҡ тарафынан танылған шәхестәрҙең, юлбашсыларҙың фекеренә таянырға тейеш. Иҫегеҙҙә булһа, Дамир Вәлиев барлыҡ милли хәрәкәткә тонус бирә торғайны. Уның менән ҡайһы саҡ килешмәһәк тә, йөрөй торғас, хаҡлығын аңлай инек. Беҙ бөгөн халыҡты пассивлыҡта ғәйепләйбеҙ, халыҡ пассив түгел ул, уға юлбашсы кәрәк, ул юлбашсы артынан бара. Халҡыбыҙҙың потенциалы бик көслө, уны асыр өсөн юлбашсылар кәрәк.

**Ә. ИШЕМҒОЛОВ:** Дөрөҫ, хәҙерге йәштәребеҙҙең потенциалы ололарҙыҡынан да көслөрәк. Уларҙа кәмһенеү комплексы юҡ. Шуныһы яҡшы.

**Ә.БОҪҠОНОВ:** Эйе, улар тыйнаҡлыҡтары арҡаһында үҙҙәрен әлегә күрһәтмәй.

**Ә. ИШЕМҒОЛОВ:** Яйы сыҡҡанда, күптән йөрәгемде яндырып йөрөгән бер хәлгә ҡарата үҙемдең бер тәҡдимемде әйтмәксемен. Мине Башҡортостандан ситтә Силәбе, Ҡурған, Свердловск, Ырымбур, Һамар, Һарытау, Пермь өлкәләрендә йәшәүсе милләттәштәребеҙҙең яҙмышы борсой. Улар йылдан-йыл милли асылын юғалта бара. Ә ни өсөн баш ҡалабыҙ Өфө янында шул өлкәләр һәм районлар исемдәре, ер-һыу атамалары менән ҡасабалар төҙөмәҫкә. Әйтәйек, Силәбе, Свердловск, Ҡурған, Ырымбур, Һамар, Һарытау, Пермь, Арғаяш, Ҡоншаҡ, Сафакүл, Әлмән, Ҡыуандыҡ, Һарыҡташ, Ырғыҙ, Кәмәлек, Кәрәлек ҡасабалары. Ул ҡасабаларҙа мәктәп, ҡасаба исемен йөрөткән төбәктең тарихын сағылдырған музей төҙөргә була. Әгәр ҙә ошо эште эшләмәһәк, республикабыҙҙан ситтә йәшәүсе милләттәштәребеҙ йотолоп, юҡҡа сығасаҡ. Уларға дәүләт тарафынан "сироп" бирелмәй һәм улар яйлап-яйлап бөтөүгә дусар ителә.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Илебеҙ, дәүләтебеҙ, милләтебеҙ үҫешһен өсөн объектив һәм субъектив факторҙар бар, етерлек, уларҙы хәрәкәткә килтерер өсөн юлбашсы кәрәк", тигән һығымта яһарға булалыр әңгәмәлә ҡатнашыусыларҙың әйткән фекерҙәрен йомғаҡлап. Бал ҡорто күсенең йәшәү рәүеше лә ошоно раҫлай.**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ**
**әңгәмә ҡорҙо.**

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия дарама театры

**26 ноябрь "Ай тотолған төндә"** (М. Кәрим), трагедия

**27 ноябрь "Хыялый"** (С. Әбүзәр), лирик комедия

**29 ноябрь "Ут - уйынсыҡ түгел!"**, әкиәт-уйын. Башлана 11.00, 13.00.

**29 ноябрь "Мөхәббәт ҡарағы"** (Ф. Бүләков), музыкаль комедия

**30 ноябрь "Ҡатынымдың исеме Морис"** (Р. Шарт), комедия

### М. Кәрим исемендәге Милли Йәштәр театры

**29 ноябрь "Сыңҡылдаҡ себен"** (Р. Ураҡсина), әкиәт

**29 ноябрь "Тоҡ эсендәге бесәй йәки Башҡорт тотҡоно"** (М. Кәрим), спектакль-концерт

**30 ноябрь "Йәнкиҫәккәйем"** (Т. Миңнуллин), музыкаль комедия

**2 декабрь "Йәнкиҫәккәйем"** (Т. Миңнуллин), музыкаль комедия

**3 ноябрь Гөлшат Ғайсинаның** концерты

### ИНФОРМАЦИОННОЕ СООБЩЕНИЕ

Казенное предприятие РБ Редакция журнала "Рампа" сообщает, что по результатам состоявшегося "21" ноября 2011 года аукциона по продаже государственного имущества РБ, автомобиля ГАЗ 31105, 2006 года выпуска, государственный регистрационный номер С 095 КТ 02, находящегося в оперативном управлении КП РБ Редакция журнала "Рампа" продан Сушкову Ивану Алексеевичу (г.Уфа) по цене 68748 (шестьдесят восемь тысяч семьсот сорок восемь) рублей.

АФАРИН!

# ХОҘАЙ ҺИНЕ, АХЫРЫ, ҺИНЕ ШУЛАЙ

## Һоҡланһындар өсөн яратҡан...



**СССР-ҙың һәм РСФСР-ҙың халыҡ артисы, Салауат Юлаев исемендәге республика дәүләт премияһы лауреаты, Салауат Юлаев ордены кавалеры Гөлли Арыҫлан ҡыҙы Мөбәрәкова тураһында ишетеү менән иң элек Рафаэль ағай Сафиндың ошо шиғыр юлдары иҫкә төшә. Ысынлап та, заманы, үҙ дәүере өсөн генә түгел, ә килер быуындар өсөн дә ул сәхнә оҫталығының ғына түгел, гүзәл ҡатын-ҡыҙ образының да эталоны булып тора һәм шулай булып ҡаласаҡ. Сәхнә оҫтаһы, режиссер, педагог Гөлли Мөбәрәковаға ошо көндәрҙә 75 йәш тулды. Юбилейы көндәрендә сәхнәләштәре уның тураһында ошондай йылы һүҙҙәрен еткерә:**

**Хәмит ЯРУЛЛИН, Башҡортостандың халыҡ артисы:** Мәскәүҙә биш йыл буйы иң матур, иң талантлы йәштәр менән бергә А.В. Луначарский исемендәге Мәскәү дәүләт театр техникумында уҡыу бәхете тейҙе. Шуларҙың иң талантлыһы, иң сибәре Гөлли-Гөлсәсәк ине. Уҡыуҙы тамамлап ҡайтҡас, 50 йылдан ашыу бергә, бер театрҙа эшләргә яҙҙы. Гөлли иң талантлы, иң аҡыллы, иң сабыр актрисаларҙың береһе булды. Аҡыл уға атаһынан биреләһә, әсәһенән ул сабырлыҡ алған. Бына ошо ике сифат уны бөгөнгө дәрәжәгә, бөгөнгө бөйөк артистарҙың береһе кимәленә еткерҙе.

Башҡорт халҡында "Өс таған таймай" тигән әйтем бар. Тағандың бер таяуы -Арыҫлан Мөбәрәков, икенсеһе - Рәғиҙә Янбулатова булһа, өсөнсөһөн мин уларҙың ҡыҙҙары Гөлли Мөбәрәкова тип күрәм.

Гөлсәсәк бөтөн яҡтан да өлгөлө булды. Бик күп ауыр һынауҙар үтте. Ләкин аҡылы, сабырлығы менән барыһын да еңеп сыҡты. Уйнаған ролдәрен һанап бөтөрлөк тә түгел. Һәм һәр ҡайһыһын ул үҙенсә асты, үҙенсә күтәрҙе, үҙенсә халыҡтың мөхәббәтен яуланы. Бөгөн дә ул сәхнәлә булыуы, үҙен тотоуы, үҙенең таланты менән һоҡландыра. Бөгөн дә ул театрыбыҙҙың йөҙөк ҡашы булыуы, элекке быуын артистарының мәктәбен һаҡлауы менән ғорурландыра.

**Хөрмәт ҮТӘШЕВ, М. Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театры директоры:** Гөлли Арыҫлан ҡыҙы легендар сәхнә оҫтаһы, легендар шәхес. Артислыҡ уның гендарына һалынған һәм ул йүргәктә саҡта уҡ сәхнә тормошо, гастролдәр уның ҡанына, булмышына һеңгән. Тәбиғәт бөйөк кешеләрҙең балаларында ял итә, тиһәләр ҙә, был һис тә Гөлли Мөбәрәковаға ҡағылмай. Киреһенсә, был тәбиғәт унда икеләтә, өсләтә нығыраҡ асыла. Бөгөн уның кимәлендәге артистар бик һирәк һәм Гөлли Арыҫлан ҡыҙының тап беҙҙең театрҙа эшләүе беҙҙең өсөн оло дәрәжә.

Кеше булараҡ та Гөлли Арыҫлан ҡыҙы бик кешелекле, кеселекле. Театрҙың, йәш коллегаларының яҙмышына ла һис битараф түгел, даими ҡыҙыҡһынып тора. Худсовет ағзаһы булараҡ ҡына түгел, оло коллега булараҡ та теге йәки был күренешкә, гастролдәр, репертуар буйынса ла үҙенең фекерен тура ярып белдерә бара. Тәнҡит, тәҡдимдәрен дә йәшереп тормай, һәм быға уның тулы хоҡуғы бар, сөнки был театр -уның һәм уның ата-әсәһенең, шулай уҡ бөйөк сәхнә оҫталары Рәғиҙә Йәнбулатова менән Арыҫлан Мөбәрәковтың туған театры.

Гөлли Арыҫлан ҡыҙы З. Исмәғилев исемендәге сәнғәт академияһының профессоры булараҡ, театрҙа йәштәр менән сәхнә теле буйынса дәрестәр алып бара. Репертуар һайлауҙа ла әүҙем ҡатнаша. Ул үҙен театрһыҙ күҙ алдына килтерә алмаһа, беҙ ҙә театрҙы унһыҙ күҙ алдына килтермәйбеҙ, артабан да ҡулға-ҡул тотоношоп, алда торған миҙгелдәрҙә лә бергә эшләргә яҙһын, тигән теләктәбеҙ.

**Сара БУРАНБАЕВА, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған артисы:** Гөлли Арыҫлан ҡыҙы беҙгә сәхнә телен камиллаштырырға ла, ролдәр эшләгәндә лә бик ныҡ ярҙам итә. Ниндәй генә ситуацияларға килеп эләккәндә лә, тыныслыҡ һаҡларға, сәбәләнмәҫкә лә унан өйрәнәбеҙ. Тағы бер сифатын яратам. Бер коллектив эсендә барыбер ҙә бер-береһен тикшереү, ғәйбәт һатыу ғәҙәте була. Ҡатын-ҡыҙға тел сарлап алыу ниндәйҙер ләззәт тә бирә бит инде ул. Сәхнә артында ла ундай күренештәр күҙәтелә. Әммә беҙ бер ваҡытта ла Гөлли Арыҫлан ҡыҙының сәхнә артында ләстит һатып ултырғанын ишеткәнебеҙ юҡ. Ул ошондай донъя ваҡлыҡтарынан шул тиклем юғары тора.

**З. ӘЙЛЕ яҙып алды.**

СМСНАМӘ - ШИҒРИ ӘЙТЕШ



# ҠЫҪҠА ҒҮМЕР ЮЛДАРЫНДА

## Өлгөр атыңды егеп...

**Йыл аҙағы яҡынлашҡан һайын көндәр һиҙелерлек һыуыта башланы. Еребеҙгә яҡынлашып килгән Ҡыш бабай үҙенең эшен белә, тыны менән бит-ҡулдарҙы, ҡолаҡ остарын семетә. Тап шуның кеүек ҡоробоҙҙары сәсәндәребеҙ ҙә бер-береһенең тын алышын тойоп, төртмә һүҙҙәре менән бер-береһен семетеп алырға, ҡыҙған табаға "баҫтырырға" тотондо. Ҡыҫҡаһы, маҡсатыбыҙға ирештек: әйтеш башланды, йәмәғәт!**

ЭТКОЛ:
Ырыҫҡа:
Һайлау етеп килә, тиһең,
Ышанаһмы һайлауға?
Һайланмағанды үткәреп,
Бар халыҡты алдауға?
Халыҡ үҙе теләне, тип
Торатауҙы һатырҙар.
Изге тауҙың ҡаяларын
Аҡтарырҙар, ватырҙар.
Халыҡ дәррәү тырышһа ла
Һаҡларға Ирәмәлен.
Ситтәр менеп тау башына
Күрһәтә ир әмәлен.
Батырға:
Йылғалар үргә аҡмайҙар,
Ҡасан күрҙең аҡҡанын?
Тамсы тамып күл булғанын,
Ҡаяларҙы ватҡанын?
Тауҙар сүгер, һыуҙар шиңер,
Әгәр бирһәләр әмер.
Шундай хәлдә булмаҫ тимә,
Эгоист булһа әмир.
Һайт, тигәнгә, тайт, тиерҙәр,
Өҫтән килһә бойороҡ.
Бергә ашап, бергә эсә
Болғаусылар ҡой(о)роҡ.
Кәфөгә:
Иртән торһам, бар шатлығым,
Игеҙәге - бар ҡайғым.
Ә шулай ҙа был донъянан
Һис кенә килмәй тайғым.
Тышҡа сыҡһам, ҡыуанамын
Яңы көндә күрҙем, тип.
Уфтанамын, бер көн үтте,
Яҡынайҙы үлем, тип.
Йондоҙ атылғандай үтер,
Ғүмер ҙә яныпһүнеп,
Ҡыҫҡа ғүмер юлдарында
Өлгөр атыңды егеп.
Кем һуң тотор дилбегәнде,
Атты ары ҡыуалап?
Дөрөҫ егелгәнме атың,
Сығанламаҫмы тулап?

КӘФӨ:
**Ырыҫ әйткән дуңғәләкте**
**Өҙәйекме, туғандар?**
**Атыбыҙҙы шулай итеп**
**Ярты юлда туғарһаҡ...**
**Бәхәсебеҙ инде-инде**
**Ҡыҙып ҡына барғанда,**
**Мөһим фекер аҡтарыла**
**Һыҙып ҡына барғанда...**
**Әйҙә, тағы һөйләшәйек,**
**Кемдә ниндәй һүҙҙәр бар?**
**Ҡайҙа түбән төшөүҙәр бар,**
**Ҡайҙа алған үрҙәр бар?**
**Миненсә, бит хәлдәребеҙ**
**Зарланырлыҡ та түгел,**
**Ғәләмәт шәп йәшәйбеҙ, тип**
**Маҡтанырлыҡ та түгел...**
**Әйҙә, һәр кем атаһын**
**Һуңғы шатланған мәлен,**
**Ә унан һуң бәйән итһен**
**Тормошон, хәл-әхүәлен.**
**Ә үҙемә килгәндә**
**Һуңғы оло шатлығым:**
**Ергә тағы ҡыш килеүе,**
**Был донъяның аҡлығы.**
**Эштән ҡайтыуымды ҡыҙым**
**Ҡаршылауы атлығып...**

ДАРМАН:
Сәй эсергә янымда
Бар балалар, туғандар,
Бар бит әле йәрем дә -
Ошо бәхет түгелме?
Күп һөйләһән, тел аҙа,
Күп көлһәң, күңел аҙа.
Күп зарланһаң, рух һына,
Алтын урта - бер сама.
Ун бер йылдан ҡуян килер,
Биш йылдан айыу килер.
Дуңғәләк һис өҙәлмәҫ,
Түҙһәк тә, түҙмәһәк тә.
Ябай ғына шатлыҡтыҡ ла
Бүлешешеп йәшәйек.
Халҡыбыҙҙың күңеленә
Рухи аҙыҡ сәсәйек.
Рәхмәт инде Кәфөгә
Уйлап таба бер сара.
Эскәндәй булам кофе,
Уҡыһам "Киске Өфө".

АҠЫҠ:
Ололарҙың һүҙҙәренә
Ҡолаҡ һалайыҡ, дуҫтар!
Яман эштәр эшләп ҡуйһаҡ,
Терһәкте тешләп булмаҫ.
Был донъяла йәшәүҙәре
Үҙе бер ләззәт кенә.
Донъяң имен, күңел тыныс -
Тағы ни кәрәк беҙгә?
Күрше-тирәм, ағай-эне
Иҫән-һау булһын, әйҙә.
Бала-саға, атай-әсәй
Бәхетле булһын әйҙә.
Шатланайыҡ аҡ ҡарҙарға,
Яҙҙар етеүенә лә.
Мәғәнәле, йөкмәткеле
Ғүмер үтеүенә лә.

ЫРЫҪ:
Эйе, Батыр, дин ҡоҙрәтле
Илдә алдаҡ булмаһа.
Отолмабыҙ илебеҙҙә
Мосолманлыҡ юллаһаҡ.
Эткол, Кәфө, шарттар булғас,
Тыуа әреғорт, көйә -
Әҙме ирҙең ҡәбәхәте
Әсә пенси(я)һын имә.
Әреғортто бырағтыра
Эшсе ҡорттар бик йәһәт.
Быңдай хәлдән сығыр өсөн
Беҙгә берҙәмлек кәрәк.
Үҙебеҙҙән генә торһа
Илдең сәләмәтлеге.
Яҡынайтып булыр ине
Илебеҙ киләсәген.
Ирек, үҙаллылыҡ кәрәк
Региондарға шулай уҡ.
Эшҡыуарға, бар халыҡҡа -
Шунһыҙ киләсәгебеҙ юҡ.
Хоҡуҡһыҙ дәүләттә шулай
Дуңғәләкте ҡыҫалар.
Хакимлыҡты һаҡлайым, тип.
Вертикально баҫалар.
Тик халыҡты енеп булмай,
Килеп етер ахыр саҡ.
Урамдарға сығып халыҡ
Һыу кеүек ҡайнаясаҡ.
Кәфө туған, тел төбөндә
Шулай аңларға була:
Форсат булмаған саҡта ла,
Яҡшылыҡты табырға.
Шатлыҡтар ҙа бар тормошта
Һанамайым уларҙы.
Был шарттарҙа онотмайыҡ
Мәңгелек ҡануңдарҙы.
Һаҡлайыҡсы телебеҙҙе,
Йыр, бейеүҙе, ҡурайҙы!
Һаҡлайыҡсы тыуған ерҙе,
Төйәгебеҙ Уралды!

ЭТКОЛ:
Кәфө туған, аңламаным
Һуңғы биргән һорауың...
Автобиографиям кәрәк,
Ә мин шулай аңланым.
Булдым оҫта гармунсы,
Комбайнсы, тракторсы.
Бригадир ҙа булыр инем,
Әгәр булһам коммунсы.
Эшләүҙәр ҙә, эсеүҙәр ҙә
Барыбыҙға ла төштө.
Ауыр, тиеп, ҡорҙаштарым
Ташлап ҡасманым эште.
Пенсия ашап ятһам да,
Йөрәгем һаман да йәш.
Тынғыһыҙ күңел теләй
Әбей түгел, йәш кәләш.
Йәшәгәс, ярһып сабыу ҙа
Шыуа белеү ҙә кәрәк.
Ғүмер таягын һөйәргә
Минә әле иртәрәк.
Үттем киң ҡапҡаларҙы ла,
Йылан һыймаҫ ярыҡтан.
Үкшый-үкшый эскән булды
Нәжес аҡҡан ярыҡтан.
Ҡыҙыҡһынам донъя менән,
Китапты кимерәмен.
Башҡа тынҡыслап тултырып
Белемгә тилмерәмен.
Ҡайҙа барһам, дуҫтар табам,
Шул ергә ерегәмен.
Оло менән, кесе менән
Һүҙгә тиҙ берегәмен.
Боҙ булып та туңғаным бар,
Уттай дөрләп янғаным.
Мә, тигәнгә ҡул һуҙып та,
Яңағыма алғаным.
Дуҫтарым ярҙам иттеләр,
Кемелер ярҙан этте.
Һыуға сарсаған сағымда
Ут мине ялмап үтте.
Бар абынып ҡолағаным,
Башты ташҡа орғаным.
Һыҙланһам да, көлә-көлә
Аяғөҫтә торғаным.
Таш булып та ҡатҡаным бар,
Май кеүек ирегәнем.
Утҡа сығып ингәнем бар,
Ялҡынға - кирегә мин.

КӘФӨ:
**Ҡорҙаштарым, Эткол кеүек**
**Кемең шарран асылыр?**
**Кемегеҙ йә тәҡдим итер**
**Эскерһеҙлек асылын?**
**Ә бит ысын кеше була**
**Үҙенән көлә алған...**
**Үсешә һәм алға бара**
**Үҙен тәңкитләй алған...**
**Әйҙәгеҙ, кем асылыр,**
**Тәҡдим итер асылын?**

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**СМСнамә - шиғри әйтеш дауам итә. Яңы ҡушылыусылар өсөн телефоныбыҙ: 8-917-477-09-74.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ҺҮҘЕНӘН ҠАЙТҠАН...

## ир түгел

Ҡайта сапҡан буҙ яман, ҡайтып килгән ҡыҙ яман.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер саҡ суфый уҡытыусы уҡыусыларына ҡарап былай тигән:**

**-Мин ярлы һәм көсһөҙмөн, ғүмерем ахыры етеүен дә тоям. Мин һеҙҙе күп нәмәгә өйрәттем, ә һеҙҙең бурыс - минең ҡартлығымды тәьмин итерлек аҡса табыу...**

**-Беҙгә нимә эшләргә һуң, уҡытыусыбыҙ? - тигән уҡыусылары. - Был ҡалалағы халыҡ бик һаран, күмәкләп хәйер йыйырға сығып китһәк тә, етерлек сумманы йыя алмаясаҡбыҙ...**

**- Ә бит аҡса табыуҙың бер ниндәй мәшәҡәтһеҙ ысулдары ла бар, - тигән уҡытыусы, - уны аҡсаһы күп булғандарҙан тартып алырға ла мөмкин. Беҙ ул аҡсаға лайыҡлы түгелме ни? Тик минең үҙемдең урларға һәм таларға ҡулымдан килмәй, мин көсһөҙмөн һәм ҡартмын...**

**- Беҙ һеҙҙең өсөн барһын да эшләргә әҙербеҙ, - тип яуап бирә уҡыусылар, - беҙ йәшбеҙ һәм көслөбөҙ. Тик беҙгә ни эшләргә икәнен генә әйт...**

**-Ҡараңғы төшкәс, урамға сығып, берәү ҙә күрмәй торған бер аулаҡ урын табып, шунда йәшеренеп тороғоҙ һәм затлы кейенгән кеше күрһәгеҙ, уның ҡулынан аҡсаһын тартып алығыҙ. Тик физик көс ҡуллана күрмәгеҙ... - ти уҡытыусы.**

**Уҡыусылар бүлмәнән бүлмәгә сабышып, йыйына, шаулаша башлай. Тик бер уҡыусы ғына башын күтәреп тә ҡарамайынса, бер урында баҫып тороуын дауам итә.**

**- Күрҙеңме, миңә ярҙам итергә тигәс, ҡалай күҙҙәре янып китте уҡыусыларымдың. Ә һин ни эшләп тораһың? Һинең дә миңә ярҙам иткең килмәйме ни? - ти уға уҡытыусы.**

**- Ғәфү ит мине, уҡытыусым, - ти уҡыусы. - Минең һеҙгә ярҙам иткем килә, тик һеҙ тәҡдим иткән нәмәне ҡабул итә алмайым...**

**- Ни өсөн?**

**- Был ерҙә беҙҙә берәү ҙә күрмәгән урын юҡ. Хатта мин үҙем генә ҡалһам да, мин үҙемдә үҙем күрәм бит. Юҡ, уҡытыусым, мин донъя буйлап хәйер һорап сығып китһәм, китәм, әммә үҙемде бур итеп күрергә теләмәйем...**

**Был һүҙҙәрҙе ишеткәс, уҡытыусының йөҙө нурланып китә. Ул уҡыусыһын ҡосаҡлап ала һәм: "Мин бәхетле, мин оҙаҡ йылдар буйы өйрәткән аҡылды бер генә уҡыусым булһа ла аңлаған!"- тип ҡысҡырып ебәрә. Бына шунда уның ҡалған уҡыусылары был һынау ғына булғанын аңлай. Был эҙһеҙ үтмәй. Ошонан һуң уҡыусылар ниндәйҙер ярамаған ғәмәл ҡылырға ниәтләгәндә гел генә әлеге уҡыусының "Мин бит үҙемде үҙем күрәм" тигән һүҙен иҫенә төшөрә һәм тыйылыр булған. Был уларҙы тамам камиллашыуға алып килгән".**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Таһир ИШКИНИН,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Беҙҙең адрес:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**
«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 25 ноябрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 5203
Заказ 4665

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.